***✓ Бер аҡыл эйәһенән: "Ни өсөн никахта тороусылар араһында ысын ҡатын-ҡыҙ һәм ысын ир-егет бик һирәк осрай торған күренеш?" - тип һорағандар. "Сөнки ир-егеттең ике тапҡыр тәҡдим итә торған ғәҙәте юҡ, ә ҡатын-ҡыҙҙың принцибы - тәүге тапҡырҙан уҡ ризалашма", - булған яуап.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14 - 20 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№37 (559)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бәхәстән бәхет тыуамы?**



3

**Нигеҙ ташың ниңә короно, Оло Кәбәс?**



6-7

**Йөрәгеңде тыңла...**

тормош сере - йөрәктә



9

**Йылмайып баҡ донъяға!**



13

14 ТВ-программа


*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

## ЕҢЕЛ УҠЫЛМАЙ...

### әммә теләп уҡыла

**"Киске Өфө" - шау-шыу, көндәлек ығы-зығыларға баш бирмәй, сенсация көҫәмәй генә йәшәгән баҫма, уны мин үҙенсәлекле мәғлүмәти утрау, тип тә атар инем.**

Әлеге шул көндәлек тынғыһыҙлыҡтан арынып торорға теләгән ваҡытта ярҙамға килә торған утрау ул. Был утрауҙа йәнең теләгән мәғлүмәт, рухи ниғмәт табырға була. Иң тәү сиратта башҡорт зыялыларын берләштереүсе баҫма ла ул "Киске Өфө". Бында улар майҙан тота, фекер алыша, халҡыбыҙ алдында торған мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын бергәләп эҙләй.

Хәҙерге гәзиттәр алдында тиҙ уҡыла, еңел үҙләштерелә торған мәҡәләләр биреү өҫтөнлөгө, талабы тороуы барыбыҙға ла мәғлүм. Ошо күҙлектән ҡарағанда, "Киске Өфө"нө уҡыуы әллә ни еңелдән түгел. Эш араһында ғына күҙ йүгертеп сығып булмай. Бына шуның өсөн дә уны аңлау, күңеленә һеңдереү өсөн үҙеңә лә әҙерлекле булыу талап ителәләр, моғайын. Һәр хәлдә, һүҙем рухи яҡтан әҙерлек хаҡында бара. Ғәмле, рухлы, үткәненә битараф булмағандар өсөн бик шәп баҫма ул, бер һүҙ менән әйткәндә.

Әйтелгәнгә өҫтәп, яратҡан гәзитебеҙҙә яңы быуын уҡыусылар әҙерләү маҡсатында йәштәрҙе лә ҡыҙыҡһындырыр ҡыҙыҡлыраҡ сығыштар күберәк урын алһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине, тип уйланыла.

**Зөлфиә РӘХМӘТУЛЛИНА,**
**"Юлдаш" радиоһы һәм Башҡортостан юлдаш телеканалы журналисы.**

## ХАЛЫҠ ГӘЗИТЕ

**"Киске Өфө" гәзитен бик яратып уҡыйым, тип кенә әйтеү аҙ һымаҡ. Бәлки, был һүҙҙәргә, был гәзитте яратмау мөмкин түгел, тип тә өҫтәп әйтергә кәрәктер.**

Милли йөҙө, үҙенең һүҙе, телем, илем, ерем, халҡым, тип янған, аныҡ ҡына маҡсаттары булған, халҡыбыҙ йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙеүгә, милли мәҙәниәтебеҙ үҫешенә, туған телебеҙҙе өйрәнеүгә, әҙәбиәтебеҙгә, халҡыбыҙ тарихына, халыҡ ижадына ла ҙур әһәмиәт биргән милли баҫмаларыбыҙҙың береһе ул "Киске Өфө". Мин бында "милли баҫма" тигән һүҙгә айырым баҫым яһап үткем килә. Сөнки баҫма башҡорт телендә сығып та, милли булмауы бар бит әле.

Зыялылыр, абруйлылар, инсандар һүҙен дә нәҡ ошо гәзит аша ишетәбеҙ. Гәзит йәмғиәтте рухи йәһәттән байытыуға, халҡыбыҙҙың ҡаҙаныштарын тарихҡа, йылъяҙмаға индереүгә тос өлөш индерә. Киләсәктә XXI быуат башы башҡортоноң уй-кисерештәрен иң беренсе нәүбәттә ошо баҫмаға таянып өйрәнәсәктәре бәхәсһеҙ. Үҫеп килеүсе быуынға рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүҙә, илһөйәрлек тойғоһо үҫтереүҙә унын әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Республикала төрлө баҫмалар бар. Зауҡыңа, күңел талаптарыңа ҡарап, төрлөһөн һайлап уҡырға була. Шулай ҙа был гәзит башҡорт милләтенең рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүсе берҙән-бер милли баҫма. Ул - халыҡ гәзите.

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**
**Күгәрсен районы.**

## ҺӘР ҺҮҘЕН ЯТЛАП АЛЫРЛЫҠ...

**"Киске Өфө" гәзитен тәү тапҡыр эшләгән урынымда күреп уҡыным. Сыға башлаған ғына ваҡыты ине гәзиттең. Шундай мәғәнәле, фәһемле гәзит булыуына ҡарамаҫтан, ул ваҡытта был гәзит нисек килтереп һалынған, шулай ята биргәс, үҙемдең бүлегемә ҡараған хеҙмәткәрҙәрҙе йыйҙым да: "Ошо гәзитте ни эшләп ятҡыраһығыҙ әле ул, килгән береһен алып уҡырға тейешһегеҙ. Тәүге битенән аҙағынаса ятлап алырлыҡ бит", - тип тәнҡитләнем.**

Хаҡлы ялға сыҡҡас, ул коллективта минең эште алып барған кеше бармы икән, юҡтырмы, белмәйем. Хәҙер мин был эште өйҙә лә эшләйем - туғандарым өсөн гәзиткә яҙылам. Һуңғы гәзит-журналдарға яҙылыу мәлендә, мәҫәлән, "Киске Өфө"нө 6 туғаныма яҙҙырҙым. Икенсеһендә бүтәндәренә яҙҙырырмын, тип өмөт итәм, һаулыҡ ҡына бирһен Хоҙай. 75 йәште уҙҙым инде. 10 меңлек пенсиямдың күпселек өлөшө дарыуға китһә лә, артығын барыбер теге донъяға алып китә алмайым, тип, яратҡан гәзитемә яҙылыу ойошторорға булдым. Моғайын, дөрөҫ эшләйемдер. Юҡһа, мин гәзиткә яҙҙырған туғандарым: "Инәй, һин "Киске Өфө"нө ҡайҙан таптың?" - тип һорай. Нисек инде, "таптың", ул бит күптән сыға килгән гәзит, тиһәм, аптырап китәләр.

"Киске Өфө"нөң эстәлегенә килгәндә, ул мине һәр ваҡыт шаҡҡатыра. Был хәтлем оҫталыҡты, был тиклем фекерле кешеләрҙе ҡайҙан табаларҙыр, хайран ҡалам. Моғайын, ауырҙыр ундай гәзит сығарыуы. Ошондай тырышлыҡ һалып ижад ителгән, ошоноң сама фекер туплаған гәзитте ниңә күптәр алдырмай һуң һаман? Әллә күп кеше унын исеменә ҡарап, ҡала гәзите икән, ауылға бармайҙыр, тип алданамы? Ә бит уны республиканың һәр мөйөшөндә яҙҙырып уҡырға була.

**Зөлхизә БУРАНБАЕВА,**
**пенсионер.**
**Өфө ҡалаһы.**



ТУРАҺЫН ЯРЫП...

# БАҺАЛАУСЫЛАРҘЫҢ... теле юҡ




**Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы "Байыҡ" бейеү конкурсының бер генә тапшырыуын да ҡалдырмай ҡарайым, проект авторына ла, уны тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итеүселәргә лә, баһалама комиссияһы ағзаларына ла сикһеҙ рәхмәтлемен.**

Баһалама комиссияһы ағзаларының шул тиклем белемле, үҙ эшенең оҫталары булыуына, һәр хәрәкәтте күҙәтеп, профессиональ яктан баһалауҙары, сит-ят элементтар өҫтәлмәүенә ныҡ иғтибар итеүҙәре һоҡландыра. Рәхмәт уларға. Сәнғәтебеҙҙе ҡурсалаусылар барлығы беҙҙе ҡыуандыра.

Әлбиттә, башҡорт бейеүҙәренә рус бейеүҙәре хәрәкәттәре инеп китһә, был конкурс "Байыҡ" тигән исемгә лайыҡ булмаҫ ине. Тап ошондай яңылыш хәрәкәттәр "Байыҡ"тың баһалама комиссияһы ағзаларының иғтибар үҙәгендә. Мин дә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, башҡорт теленең таҙалығына битараф түгелмен, шуға ла телевизорҙан яңғыраған һәр сығышҡа иғтибар итәм, хаталарға йәнем көйөп ултырам. Һүҙем, әлбиттә, "Байыҡ"тың ҡайһы бер баһалама комиссияһы ағзаларының телмәре тураһында. Шундай юғары трибуна, киң аудитория тотоп та, уларҙың ҡайһылары бейеүҙәргә баһа бирерлек тә башҡорт һүҙҙәре таба алмай ҡаңғыра. Мәсәлән, улар ауыҙынан иң йыш яңғыраған һүҙҙәр: движение, спина, круг, заниматься итергә кәрәк, раз сәхнәгә сыҡканһың икән, по-моему, состояние барлыҡка килә, скромно ғына оценка бирҙе, хитрый гәйбәтсе, үҙемдә зритель итеп тоям, общая драматургия, прямо держать ит, руководитель, каким-то образом, как-то бына, уже, даже, потом, музыка подбирать итеү, потому что, между прочим, һәм башҡалар. Күп булһа, егерме-утыҙ һүҙҙе башҡортса әйтергә кәрәктер бейеүҙәрҙе баһалау өсөн. Тапшырыуҙы яҙҙырып алдынан уларҙы тәржемә итеп, ятлап алырға ла булыр ине бит.

- Телегеҙ шул тиклем ярлымы ни, "движение" тигәндең дә башҡортсаһы юҡмы? - тип һораны бер рус ҡатыны тапшырыуҙы ҡарап ултырғанда. Бына бит ниндәй фекер уятабыҙ башҡаларҙа. Ҡайҙа беҙҙең ғалимдарҙан Александр Бессонов, Николай Дмитриевтар һоҡланған "ҡолаҡҡа ятымлы" башҡорт теле?

"Башҡорт йыры" тапшырыуын баһалаусылар араһында ла булғылай яртылаш рус телендә сығыш яһаусылар. Ғалимә Гөлназ Салауат ҡыҙы Галинаға "Афарин!", тием, ҡала ҡыҙы булыуға ҡарамаҫтан, тап-таҙа башҡортса телмәр тота, бик күп музыка терминдарының башҡортсаһын уның аша белдем әле үҙем дә.

**Сафия СӘҒИТОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

БАШ ЙӨРТТА

# БАЙ БАЙМЫ...

## әллә күңеле бай баймы?

**Йәмәғәт транспортында көн һайын йөрөргә тура килә, шуға ундағы күренештәр генә түгел, хатта бер үк пассажирҙарға, уларҙың ҡылыҡтарына өйрәнеп тә бөтәһең.**

Бер ваҡыт хатта Ҡаҙан ҡалаһынан килгән танышым Башҡортостандың баш ҡалаһында пассажирҙарҙың шул тиклем тәртипле һәм тәрбиәле, намыҫлы булыуына һоҡланыуын белдергәйне. Уны бындай һығымта яһарға шундай күренеш этәрә: маршрут автобусындағы бер һуҡмыш ир үҙенең туҡталышына килеп етә лә, кеҫәһенән аҡса таба алмай йонсой. Ул мыштырлағас, водитель уға: "Ярай, түләмәй генә төш", - ти. Ә ҡырын тейәгән ир: "Юҡ, ул минең елкәмдә бурыс булып торасаҡ..." - тип, оҙаҡ кына кеҫәләрен аҡтарғандан һуң, барыбер юл хаҡын түләп төшөп китә. "Беҙҙә булһа, нисек тә булһа түләмәскә тырышырҙар ине. Шуға ла маршрут автобустары водителдәре түләүҙе, Өфөләге кеүек, сыҡҡанда түгел, ә ингәндә үк һорап ала", - тигәйне Ҡаҙандан килгән танышым.

Күптән түгел бер үк төрлө бер нисә күренеш ҡапыл ошо ваҡиғаны иҫкә төшөрҙө. Йәмәғәт транспорты водителенә пассажирҙарҙың береһе юл хаҡы өсөн ҙур номиналтағы аҡса биргәс, тегеһенең ҡайтарып биргән аҡсаһы тейешенән артығыраҡ булып сыҡты. Пассажир аҡсаһын һананы ла, артыҡ аҡсаны кире ҡайтарҙы. Бындай хәлдә магазиндарҙа ла йыш күрергә тура килә. Тауар йәки продукция алғандан һуң һатыусы артыҡ сумма ҡайтарып бирә икән, бераү ҙә, "шәп булды әле", тип шым ғына сығып китмәй, мотлаҡ артыҡ сумманы кире ҡалдыралар.

Бында, моғайын, халыҡтың быуаттар буйына килгән тәрбиәһе лә сағылып тапмай ҡалмайҙыр: харам мал уңыш килтермәй. Ләкин һуңғы ике тиҫтә йылда кешелек ҡиммәттәре ныҡ үҙгәрҙе. Элек юғары белемле, юғары урындарҙа эшләгән кешеләрҙе өлгө итеп ҡуялар, улар маяҡ ролен үтәй ине. Әлеге ваҡытта, киреһенсә, кем өсөндәр наҙан булып күренгәндәр ихлас, эскәрһеҙ булып ҡалыуын дауам итә. Ә белемдәре тураһында дипломдары һаны артҡандар иһә ике йөҙлөрәк, мәкерлерәк була бара. Бөгөн кор-



рупция бер ҙә күпселекте тәшкил иткән ярлы һәм урта хәлле халыҡ араһында таралмаған, киреһенсә, ул байҙар донъяһында сәскә ата. Сөнки кеше тигән мәхлүктең нәфсеһе бер ваҡытта ла туя белмәй, уның аппетиты артҡандан-арта бара. Ирекһеҙҙән, уларҙың диндәре, имандары, Аллалары башҡамы икән әллә, тип уйлап ҡуяһың.

...Бер көн тағы автобустың иң артында ултырған пассажир кешеләр аша водителгә юл хаҡы өсөн аҡса ебәрҙе. Шул уҡ сылбыр буйлап уға сдачаһын тапшырҙылар. Уныһының күләме артығыраҡ булған, күрәһең, "артыҡ тәңкәләр" кире водителгә урап ҡайтты. Намыҫ төшөнсәһе булғандар кеше өлөшөнә, кеше кеҫәһенә инеүҙән өҫтөнөрәк һәм ошо ҡылыҡтары менән дә юғары вазифа биләп, юғары эш хаҡы алып, үҙҙәрен бай тип тойоусыларға ҡарағанда күпкә байыраҡ шул. Бөтә был күренештәр беҙҙең Өфөбөҙҙә күҙәтелде һәм беҙҙең тарафтан өфөләләргә ҙур мәртәбә өҫтәүсе миҫал булып теркәлде.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **414 һум 36 тингә** яҙылырға була.

● Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе төүгө **2 уҡыусыбыҙ - "Башҡорт халыҡ мәкәлдәре һәм әйтемдәре"**, **2 уҡыусыбыҙ -"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, **10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, **10 уҡыусыбыҙ** 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигә юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндә ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **246 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **246 һум.**

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru.** Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru.** Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы сараларында ҡатнашыу өсөн Ҡырғыҙстан баш ҡалаһы Бишкәккә килде. Унда делегация Рәсәйҙең Ҡырғыҙстандағы Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Андрей Крутько менән осрашты, уны республикала 2015 йылда үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек сиктәрендә үткәрелгән саралар комплексы менән таныштырҙы. Сарала ҡатнашыусылар билдәләүенсә, хеҙмәттәшлекте әүҙемләштереү өсөн яңыраҡ булдырылған "Башҡортостан - Ҡырғыҙстан" сауҙа йортонон мөмкинлектәрен файҙаланыу мөһим.

✓БР Хөкүмәте Президиумы ултырышында етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһе тикшерелде. Сараны Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов алып барҙы. Ағымдағы йыл башына төбәктә 18336 етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған бала иҫәпләнә. Уларҙың 1,5 меңе 2013 йылда торлаҡ алыу хоҡуғына эйә. Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, һуңғы өс йылда төбәк бюджетынан 1 миллиард 250 миллион һум аҡса бүлендe һәм 1272 бала торлаҡ алды. Быйыл йәнә 650 етем бала торлаҡ мәсьәләһен хәл итәсәк.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Америка Ҡушма Штаттарының Екатеринбургтағы Генераль консулы Отто Ханс Ван Маерссен менән осрашты. Ван Маерссен әфәнде Өфөгә Американың эшлекле даирәһе вәкилдәре менән ҡайһы бер бизнес-йүнәлештәрҙе тикшереү маҡсатында килгән. Ағымдағы йылдың июлендә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге республика делегацияһының Америкаға барышында шулай уҡ бер нисә килешеү төҙөлгәйне. Атап әйткәндә, Башҡортостанда юл төҙөлөшө өсөн стабилизатор етештереү буйынса "Терракрит" производствоһын ойоштороу, торлаҡ төҙөлөшө өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеү ҡарала.

✓8-9 октябрҙә Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанала Башҡортостандың презентацияһы үтә. Республика башлығы Рөстәм Хәмитов сараларға әҙерлек тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Рәсми визит сиктәрендә Башҡортостандың презентацияһын үткәреү, күргәҙмә әҙерләү планлаштырыла, урындағы театрҙа М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары Сыңғыҙ Айтматовтың пьесаһы буйынса "Аҡ пароход" спектаклен күрһәтәсәк.

*✓ Шулай тигән дә тауыш шымған. Ҡасандыр гөл-сәскәгә күмелгән ауылда йәшәгән кешеләр иһә бөгөнгәсә бәхәсләшә. Өйҙәре емерек, баҡсалары ташландыҡ хәлдә. Ҡорамдар бейегәйгән һайын, бәхәс тә ҡыҙа бара…*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП…

# БӘХӘСТӘН БӘХЕТ ТЫУАМЫ?

Тыуҡһан туғыҙ йортло ҙур ғына ауылда бик бәхетле кешеләр йәшәгән. Береһенән-береһе матурыраҡ, зауыҡ менән биҙәлгән өйҙәрҙә йәшәгән улар. Һәр хужалыҡты гүзәл баҡсалар уратып алған. Ауылдаштар йыл әйләнәһенә емешеләктән, йәшелсәнән өҙөлмәгән. Яҙҙарҙы дәртләнеп ҡаршы алғандар, йәйҙәрҙе көндәлек хеҙмәт менән күңелле үткәргәндәр. Байрамдарҙа уйнап-көлөп, йырлап-бейеп күңел асҡандар. Көҙ мул уңыш йыйғандар ҙа, ҡышҡыһын рәхәтләнеп ял иткәндәр. Ерҙә йәшәһәләр ҙә, күккә бағып, йондоҙҙарға ҡарап, өмөтләнгәндәр, йәшәйеш тураһында уйланғандар, киләсәккә ышаныс менән ҡарағандар, кейеҙ-келәмдәргә йыһан есемдәрен биҙәк итеп төшөргәндәр.

Өс йылға бер тапҡыр июль айында ауыл кешеләре йәшәгән урындарынан йыраҡ булмаған яланда ҡорға йыйыла торған булған. Өс йылға бер тапҡыр кешеләр Аллаһы Тәғәлә тауышын ишеткән һәм үҙ һорауҙарына яуап алған. Маңлай күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә, кешеләр күңелдәре менән эргәләренә килгән Хоҙайҙы тойғандар. Һәр кем ошо мәлдә киләсәккә уй-хыялдар ҡорған, Хаҡ Тәғәлә менән кәңәшләшкән. Мөғәмәлә төрлө кимәлдә барған: берәүҙәр тәрән уй-фекергә сумған, икенселәр ябай ғына донъяуи кимәлдә аралашҡан, өсөнсөләрҙең мөғәмәләһе уйын-көлкөгә ҡоролған.

Мәҫәлән, берәү ошондай һорау биргән:

- Хоҙайым, ниңә һин бөгөн беҙҙе ямғыр һыуына ҡойондорҙоң? Иртә менән лысма һыу иттең дә, төшкә ҡарай ғына ҡояш йылыһын өләштең. Әллә үҙең төшкә тиклем йоҡондан уянманыңмы, әллә беҙҙең байрам майҙанына йыйылғанды көтөп торҙоңмо?

- Юҡсы, - тип яуап бирә Хоҙай. - Мин иртә таңдан уҡ байрамығыҙ күңелле үтһен өсөн хәстәрлек күрҙем. Арағыҙҙа иртәнге тәһәрәт алырға йыбанғандар бар. Улар байрам йәмен ебәрмәһен, тинем дә, бөтәгеҙҙе лә бер юлы ҡойондорҙом. Әле бына таҙарынып кибендегеҙ.

- Улайһа, бик шәп иткәнһең, - тип ризалаша һорау биргән кеше.



Сәстәренә сал төшкән олпат ир бөтөнләй икенсе төрлө һорау бирә:

- Хоҙайым, әйт әле миңә, йыһандағы йондоҙҙарҙың мәңгелек тәртибе ни аңлата? Ерҙәге тормоштан биҙһәм, үҙем һайлаған йондоҙға ғаиләм менән күсенеп бара аламмы?

- Йондоҙҙар һеҙгә йыһан тураһында мәғлүмәт бирә. Ерҙәге ығы-зығынан арынып, күңел тыныслығына өлгәшә алһағыҙ, йондоҙло китап һеҙгә үҙ серҙәрен асыр. Әммә бының өсөн тән таҙалығы ғына етмәй, күңел сафлығы мөһим. Йыһан сикһеҙ - һайла, әйҙә, үҙеңә оҡшаған планетаны. Тик быының өсөн бер генә шартты үтәргә кәрәк: йондоҙҙағы ғүмереңде ерҙәге тормошоң менән сағыштырғанда, тик ижад менән генә һуғарылһын.

Шулай күңелле йәшәгән был ауыл халҡы.

Көндәрҙән бер көндө был ауылға бер ыңғайҙан йөҙ аҡыл эйәһе килгән. Киң күңелле ауылдаштар ят кешеләрҙе бик ҡунаҡсыл ҡаршы алған, һый-хөрмәт күрһәткән. Бындай муллыҡты күреп, хакимдарҙың иҫе киткән. Уларҙың береһе былай тип һүҙ башлаған:

- О, кешеләр, һеҙ бик матур йәшәйһегеҙ. Әммә тормошоғоҙ үтә талғын, бер тигеҙ үтә. Һәр бер өйгә ҡот ҡунып, етеш йәшәһәгеҙ ҙә, Аллаһы Тәғәлә менән дөрөҫ һөйләшә белмәйһегеҙ, һеҙгә тәрбиәлелек етешмәй. Шуға күрә һеҙ Илаһи көскә дан йырлап табына белмәйһегеҙ.

- Юҡсы, бер ҙә улай түгел, - тип, ауылдаштар борсола башлаған. - Аллаһ менән беҙ өс йылға бер тапҡыр тиң күреп аралашабыҙ. Уны күрмәһәк тә, һәр иртәлә Ул беҙгә ҡояш булып балҡый, бал ҡорто булып бал йыя, ҡышҡы һалҡындарҙа ерҙе аҡ шәл менән ҡаплай. Ул һәр саҡ эргәбеҙҙә, беҙгә тәбиғәттең һәр миҙгеле ҡәҙерле.

- Юҡ, һеҙҙә эштәр дөрөҫ ойошторолмаған, - тигән аҡыл эйәләре. - Беҙ һеҙҙе Аллаһ менән аралашырға өйрәтергә килдек. Бөтә Ер шары буйлап ғибәҙәтханалар, матур-матур ҡорамдар төҙөлә. Был изге урындарҙа кешеләр Аллаһ менән көн дә һөйләшә ала. Беҙ һеҙҙе лә өйрәтәсәкбеҙ.

Өс йыл дауамында ауыл кешеләре аҡыл эйәләренең һүҙҙәрен диҡҡәт менән тыңлаған. Һәр хакимдың үҙенә хас ҡарашы, үҙ теләге булған: берәүҙәре ҡорамды нисегерәк эшләү тураһында аҡыл һатҡан, икенселәре ғибәҙәт ҡылыу тәртибе тураһында һөйләгән - һәр кем үҙ яғына ҡайырған. Ауылдаштарҙың ҡайһы аҡыл эйәһен һайларға белмәй баштары ҡатҡан. Етмәһә, улар сит кешеләрҙе рәнйетеүҙән ҡурҡҡан. Шуға күрә һәр өйҙә, һәр аҡыл эйәһен тыңлап, ҡорамдар төҙөргә булғандар. Тик ауылда тыуҡһан туғыҙ йорт булһа, аҡыл эйәләре йөҙ булған. Был яңы ауыл кешеләренең ҡарарын ишетеп, аҡыл эйәләре хафалана башлаған. Нисек инде улай, тимәк, бер аҡыл эйәһенә ҡорам етмәйәсәк, ул хәйер-саҙаҡаһыҙ ҡаласаҡ бит? Килмешәктәр кемдең теорияһы иң хаҡ икәнен иҫбатлап, бәхәсләшә башлаған. Яйлап был бәхәскә ауыл кешеләре лә ҡушылған. Бәхәс шул тиклем көслө булған: ауылдаштар өс йылдан һуң яланға ҡорға йыйылыу тураһында ла онотҡандар хатта!

Тағы өс йыл үткән. Ауыл тирәләй тыуҡһан туғыҙ мөһабәт ҡорам ҡалҡып сыҡҡан. Улар эргәһендә кешеләрҙең элекке өйҙәре йәмһеҙ һәм шөкәтһеҙ булып күренгән. Кешеләр емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе лә ҡарамаған, баҫыуҙар ташландыҡ хәлгә ҡалған, баҡсалар ҡороған.

Һәр аҡыл эйәһе үҙ ҡорамына бикләнеп, кешеләргә аҡыл һатҡан: "Һеҙ әле тулыһынса иманға килмәгәнһегеҙ. Хәйер-саҙаҡаны күберәк алып килегеҙ, көнө-төнө табыныгыҙ".

Ҡорамһыҙ тороп ҡалған йөҙөнсө аҡыл эйәһе иһә йәшертен үҙ эшен алып барған. "Ғибәҙәтхана улай төҙөлмәй, табынғанда ла икенсе һүҙҙәр ҡулланырға кәрәк. Аллаһ менән нисек көн һайын һөйләшергә икәнен бер мин генә беләм", - тип өгөтләгән ул.

Әгәр ҙә ауылдаштарҙың береһе уның өгөт-нәсихәтенә инанһа, ауыл эргәһендә яңы ҡорам төҙөлгән, элеккеһе ташландыҡ хәлгә дусар булған. Хәҙер инде ҡорамһыҙ тороп ҡалған икенсе аҡыл эйәһе халыҡты үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шулай бик күп йылдар уҙған.

Көндәрҙән бер көндө ауылдаштар өс йылға бер йыйылған элекке ҡорҙо иҫтәренә төшөргән. Аллаһ тауышын тағы үҙҙәренсә ишеткеләре килгән. Ауыл эргәһендәге яланға йыйылғас та, улар күмәкләп яуап таба алмаған һорауҙырын биргән: "Аллаһы Тәғәлә, әйтсе беҙгә, ни өсөн беҙҙең баҡсаларҙы ҡорт баҫты? Ни өсөн беҙ элеккеләй йыл да мул уңыш йыймайбыҙ? Ни өсөн кешеләр бер-береһе менән бәхәсләшеүҙән бушамай? Ни өсөн беҙ, күпме генә ыҙғышһаҡ та, үҙ иманыбыҙға ҡайта алмайбыҙ? Беҙ күпләп төҙөгән ҡорамдарҙың ҡайһыныһында йәшәйһең Һин"?

Кешеләр яуапты оҙаҡ көткән. Күктән был юлы күңелһеҙ, арыған тауыш ишетелгән:

- Эй, кешеләрем, мин һеҙҙе берҙәм итеп яраттым. Һеҙ берҙәм булғанда ғына илаһи хыялға ирешеп була. Ә һеҙ һәр берегеҙ, үҙ аллаһын эҙләп, айырым ҡорамдарға бикләндегеҙ. Ҡәҙерле балаларым, әйтегеҙсе, мин ҡайһы ҡорамда булырға тейеш? Бөтәгеҙҙе лә тиң күргәс, берегеҙҙе лә рәнйетмәҫ өсөн ҡайһы ҡорамды һайлайым? Һөйөү менән һайлау ирке һеҙҙең һәр берегеҙҙең үҙендә. Берҙәм ҡарарға килһәгеҙ генә хыялығыҙ тормошҡа ашыр...

Шулай тигән дә тауыш шымған. Ҡасандыр гөл-сәскәгә күмелгән ауылда йәшәгән кешеләр иһә бөгөнгәсә бәхәсләшә. Өйҙәре емерек, баҡсалары ташландыҡ хәлдә. Ҡорамдар бейегәйгән һайын, бәхәс тә ҡыҙа бара...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Был кинәйәлә кемдәр һүрәтләнә, аңғарҙығыҙмы? Шулай шул. Ҡорамдарыбыҙ бейегәйә, ас-яланғас түгелбеҙ, тамағыбыҙ туҡ - ә беҙ һаман бәхәсләшәбеҙ, зарланабыҙ. Шөкөр итеү тигәнде бөтөнләй онотҡоҡ. Былай барһа, бер көн килеп ысынлап та емерек ҡорамдарға, ярыҡ ялғашҡа ҡалмаҫмы икән көнөбөҙ?**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Әбйәлил һәм Белорет райондарында ташҡындан зыян күреүселәргә компенсация түләүҙең икенсе этабы өсөн федераль бюджеттан 40 миллион һумдан ашыу аҡса күсерелгән. Федераль бюджеттан бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам бер кешегә 10 мең һум күләмендә түләнә, әммә бер ғаиләгә 50 мең һумдан ашыу аҡса бирелмәй. Сентябрь башында Башҡортостанда ташҡындан зыян күреүселәргә бер тапҡыр матди ярҙам түләүҙең беренсе этабы тамамланды. Был маҡсаттарға республика бюджетынан 18 миллион һумға яҡын аҡса бүленде. Республика бюджетынан компенсация күләме һәр кешегә 5 мең һум, бер ғаиләгә 25 мең һумдан ашыу тәшкил итте.

✓Өфө 2012 йыл өсөн Рәсәй ҡалаларының экологик рейтингында туғыҙынсы урынды биләй. Рейтингты РФ Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы төҙөгән. Тәүге бишәү иҫәбенә Курск, Мәскәү, Калуга, Саранск, Ижевск ҡалалары инә. Рейтинг Рәсәйҙең 85 ҡалаһы буйынса иҫәпләнгән. Ҡалаларға түбәндәге ете күрһәткес буйынса баһа бирелгән: һауа мөхите, һыуҙы файҙаланыу һәм уның сифаты, ҡалдыҡтар менән идара итеү, территорияларҙы файҙаланыу, транспорт, энергия ҡулланыу, тирә-яҡ мөхиткә йоғонто яһауға идара итеү.

✓Ағымдағы аҙнала Өфөлә "Кроношпан" заводының тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһон баһалау буйынса йәмәғәт тыңлауҙары башлана. Республика етәксеһе фекеренсә, бөгөн тирә-яҡ мөхитте бысраҡҡан төп сығанаҡ итеп автомобилдәр иҫәпләнә, ә был производствоға бәйле хәлдәр арттырылып күрһәтелә. "Өфөлә 350 мең автомобиль иҫәпләнә. Был автомобилдәр бүлеп сығарған зарарлы матдәләрҙең күләме төҙөләсәк объекттыҡынан яҡынса 20-25 тапҡырға күберәк", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов. Билдәләнеүенсә, "Кроношпан" буйынса барлыҡ экспертизалар ҙа үткәреләсәк. Предприятие төҙөү буйынса һуңғы ҡарар тик экспертиза мәғлүмәттәре нигеҙендә генә ҡабул ителсәк.

**✓Башҡортостан Президенты Указына ярашлы, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Ҡотлайбыҙ!**

**“Башинформ”дан.**

✓ *Дөйөм алғанда парламентта "Берҙәм Рәсәй" партияһына һәм КПРФ-ҡа 55 депутат мандаты тура киләсәк (49 мандат - "Берҙәм Рәсәй"гә, 6 мандат - коммунистарға).*



СӘЙӘСӘТ

# БЕР УРЫНҒА ТАШЛАЙҺЫҢ...

## икенсе урында шартлай

**Был аҙна шуныһы менән тарихта ҡаласаҡ: уның дауамында донъя лидерҙары Сүриә низағын нисек хәл итеү мәсьәләһе буйынса баш ватты. Тәүҙән үк сәйәсмәндәр хәл-ваҡиғаны тыныс юл менән, килешеүҙәр өҫтәлე артында сисеү өсөн сығыш яһап, быны өсөн унда бары тик Сүриә властарының ҡатнашыуы ғына мотлаҡ булһа, АҠШ һаман да үҙ юлын ҡыуып, көсөн ҡайҙа, кемгә күрһәтергә белә алмайынса, нисек тә һөжүм башларға тырышты.**

БМО-ның Сүриә Ғәрәп Республикаһында кеше хоҡуҡтарын боҙоуҙы тикшереү буйынса комиссияһының докладында иһә бындағы хәл-ваҡиғаларҙың көрсөккә инеүе тураһында һығымта яһала. БМО эксперттары һуңғы ос айҙа хөкүмәт ғәскәрҙәренең инициативаны үҙ ҡулдарына алыуын билдәләй. Элек ҡораллы көстәр баҫып алған бер нисә район азат ителгән, эре ҡалалар һәм мөһим иҡтисади зоналарҙы контролләү көсәйтелгән. Хөкүмәткә ҡаршы ғәскәрҙәрҙәргә килгәндә инде, улар төньяҡта һәм көнсығышта ҙур участкаларҙа контролде көсәйтһә лә, Хомста һәм Дамаскта мөһим урын яулай алмаған.

Комиссия был низағты хәрби ысул менән көйләү мөмкин түгел, тип белдерә. Эксперттар иҫкәртеүенсә, әгәр хәрби һөжүм була ҡалһа, илдән ситкә китеүсе ҡасаҡтарҙың һаны тағы ла артасаҡ. Әлеге ваҡытта ҡасаҡтарҙың һаны 2 миллион кешегә еткән, 4 миллион кеше илдәрен ташлап сыҡмаһа ла, ил эсендә тыныс урын эҙләп күсенеп йөрөй.

Һәм ахыр килеп: "Мин Сүриәгә ғәскәр ебәрмәйәсәкмен, һөжүм сикле генә буласаҡ, - тип белдерә Америка Президенты Барак Обама. - Бары тик шундай һөжүмдән һуң ғына Сүриә Президенты Бәшәр Асад икенсе тапҡыр химик ҡорал ҡулланыр алдынан ике тапҡыр уйлаясаҡ". "Вьетнам һуғышы беҙ унда "көнәшселәр" ебәреүҙән һуң ҡатмарлашты. Ираҡта ла, Афғанстанда ла шулай булды. Бөгөн Сүриә буйынса ниәттәр һауа һөжүме менән генә сикләнер тип уйлайһығыҙмы?" - тигән фекерҙәр ҙә яңғырай американдарҙың фекер алышыу форумдарында Обаманың ошо белдереүенән һуң. Эйе, ябай американдарҙың күпселеге һуғышҡа ҡаршы. Элекке һуғыштарҙа ҡатнашыусылар ил президентына һуғыштан баш тартырға саҡырып хат яҙҙы, низағты тыныс юл менән хәл итеү яҡлылар ҡултамғалар йыя. Интернет аша тауыш биреүҙә ҡатнашыусыларҙың 80 проценттан ашыуы тыныслыҡ яҡлы. Ысынбарлыҡта ябай американдар ҡан ҡойоштан ялҡҡан - "терроризм менән көрәш" йылдарында ғына АҠШ-тың Британия тажынан бойондороҡһоҙлоғо өсөн азатлыҡ көрәше йылдарында һәләк булғанға ҡарағанда күберәк кеше үлгән һәм ғәриплӘнгән.

Шул уҡ ваҡытта Сүриә властары Рәсәй властарының инициативаһы менән килешеп, үҙҙәренең химик ҡорал запастарын халыҡ-ара тикшереүгә рөхсәт биргән. АҠШ киң мәғлүмәт саралары хәбәр итеүенсә, ваҡиғаларҙың бындай боролошо Штаттарҙың фекерен тамырынан үҙгәртеп, улар һөжүм башламауы ла ихтимал. Сөнки, моғайын да, АҠШ властары ил халҡының бындай реакцияһын көтмәгәндәр ҙә. "Вьетнамға ташланған бомбалар Америкала шартлай", - тигән Мартин Лютер Кинг хаҡлы булған. Бөгөн тап географик атамаларға икенселәрен ҡуйып әйткәндә, Сүриәгә ташланасаҡ бомбаларҙың Америкала шартлауы бик ихтимал. Ул саҡта инде Обаманың былай ҙа саҡ торған абруйы бөтөнләй төшөүе мөмкин.

Әйткәндәй, Рәсәй адвокаты Александр Зорин Америка Президентының эшмәкәрлегендә РФ Енәйәт кодексының 353-сө статьяһына ярашлы, енәйәт эҙҙәрен тапҡан. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙең Тикшереү комитеты хоҡуҡ һаҡсыһының ғаризаһын теркәп, уны ҡарай башлаған. Был статья буйынса Обаманы Сүриәлә һуғыш әҙерләүҙә һәм һуғыш уты тоҡандырыуҙа ғәйепләп булыр ине. Әммә шуныһы, Рәсәй ҡанундары донъя киңлегендә түгел, үҙ ерлегебеҙҙә лә тейешенсә эшләмәй әле...

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА әҙерләне.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҺАЙЛАУҘАР ҮТТЕ,

## һөҙөмтәләр билдәле



**Башҡортостан Республикаһының Үҙәк һайлау комиссияһы бишенсе саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутаттар һайлау буйынса һайлауҙарҙы ғәмәлдә, депутаттар һайланды, тип белдерҙе.**

Һайлау йомғаҡтары буйынса, граждандарҙың 53 проценттан ашыуы гражданлыҡ бурысын үтәгән. Саҡмағош, Баҡалы, Балтас, Тәтешле районлдарында исемлеккә ингән һайлаусыларҙың 90 проценты тауыш бирергә килһә, Йәрмәкәйҙә был күрһәткес 97 процент тәшкил итә. Ҡалалар араһында иң юғары күрһәткес Салауатта (35 процент), Күмертауҙа (33 процент), Сибайҙа (29 процент). Баш ҡаланың Дим районы электораты әүҙемлеген күрһәтте - бында тауыш биреү участкаларына һайлау хоҡуғы булған граждандарҙың 44 проценты килде. Дөйөм алғанда, Берҙәм тауыш биреү көнөндә республиканың 1 миллион 584 мең 66 һайлаусыһы ҡатнашты.

Берҙәм республика округы буйынса кәрәкле ете процент барьерҙы "Берҙәм Рәсәй" һәм КПРФ сәйәси партияларының төбәк бүлексәләре генә үтә алды. "Берҙәм Рәсәй"ҙәр 76,06 процент тауыш йыйһа, коммунистар өсөн 11,7 процент электорат тауыш биргән. Һөҙөмтәлә яңы һайланған парламент тарихында беренсе тапҡыр алты партия вәкилдәре эшләйәсәк. ЛДПР, "Рәсәй патриоттары", "Йәшелдәр альянсы - Халыҡ партияһы", "Социаль теләктәшлек партияһы" вәкилдәре был хоҡуҡҡа бер мандатлы һайлау округтарында еңеү яулап лайыҡ булды.

Дөйөм алғанда парламентта "Берҙәм Рәсәй" партияһына һәм КПРФ-ҡа 55 депутат мандаты тура киләсәк (49 мандат - "Берҙәм Рәсәй"гә, 6 мандат - коммунистарға). Шулай уҡ бер мандатлы һайлау округтары буйынса "Берҙәм Рәсәй" вәкилдәре 39 мандатҡа эйә булһа, КПРФ-тар дүрт мандатҡа хоҡуҡлы. ЛДПР вәкилдәренә - ос урын тура килә. Ҡалған урындар ҡалған өс партия һәм үҙтәҡдим юлы менән һайлауҙа ҡатнашыусы кандидаттар өлөшөнә сыға.

Берҙәм тауыш биреү көнөндә республика буйынса сәйәси партияларҙан барлығы 5500 күҙәтеүсе эшләне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КОНСТАНТИН ХАБЕНСКИЙ - УҠЫТЫУСЫ?

**Эйе, эйе, юҡҡа аптырамағыҙ, был ысынлап та шулай. Бына бер нисә йыл инде билдәле актер Константин Хабенский физик мөмкинлектәре сикләнгән 11-18 йәшлек балаларҙы үҙенең офөләге Студияһына уҡырға йыя. Кастинг үтеүселәр бушлай уҡыу хоҡуғын ала.**

Конкурс шарттары буйынса, балалар бер ижади номер (бейеү, вокал, пантомима, шиғыр йәки проза әҫәре һөйләү, 10 минутлыҡ автор фильмы) күрһәтергә тейеш. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн тыуыу тураһында таныҡлыҡ, паспорт, инвалидлыҡ тураһында документ, мөмкин булһа, портфолио, ҡатнашыусы тураһында мәғлүмәт (исем-шәрифе; форма номеры; атамаһы; маҡсаты) кәрәк.

Тулыраҡ белешмәне 8-917-791-58-03 (Екатерина Попова) номеры буйынса алырға мөмкин.

# БЕРҘӘМ СИСТЕМА

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса һәм уның ярҙамы менән Өфө ҡалаһында 2013-2014 йылдарҙа балаларҙың хоҡуғын яҡлауҙы тормошҡа ашырыусы учреждениелар һәм ойошмаларҙың берҙәм системаһын ойоштороу буйынса пилот проекты тормошҡа ашырыла.**

Проект сиктәрендә Дим районының "Үсеш", Калинин районының "Торнаҡай", Орджоникидзе районының "Саторис" социаль-психологик үҙәктәре ҡала округының Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы ҡарамағына тапшырылған.

11 сентябрҙә Өфө ҡалаһы хакимиәтенең ҙур залында социаль-психологик үҙәк хеҙмәткәрҙәренең киңәйтелгән ултырышы үтте. Уның эшендә башҡа ҡыҙыҡһыныусы ойошмалар вәкилдәре лә ҡатнашты. Йыйылыусылар алдына эшмәкәрлектең өҫтөнлөклө йүнәлештәрен билдәләү, ғаилә именлеге боҙолоуҙы иҫкәртеү, тыуған һәм ғаиләне алмаштырыусы ғаиләләрҙәге хәл-торошто күҙәтеү буйынса берҙәм саралар комплексы эшләү бурысы ҡуйылды.

# ФӘН БАЙРАМЫ ЛА БУЛА ИКӘН?

**14 сентябрҙә баш ҡала үҙенсәлекле байрам үтәсәк. Саралар бер юлы бер нисә майҙанда барасаҡ. Мәктәп уҡыусылары химия һәм физика өлкәһендәге ҡыҙыҡлы тәжрибәләрҙә, фәнни темалар буйынса конкурстарҙа ҡатнаша аласаҡ. Ә инде талиптар биотехнологиялар, нанотехнологиялар буйынса тематик секцияларҙың эшен баһалай, билдәле ғалимдарҙың лекцияларын тыңлау мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Теләге булған йәш белгестәр һәм фән эшмәкәрҙәре семинарҙарҙа һәм "түңәрәк ҡор"ҙарҙа ҡатнаша аласаҡ.**

Аңлағанһығыҙҙыр инде, баш ҡала БР Фәндәр академияһы һәм БР Фәнде үҫтереү һәм уға ярҙам итеү фонды ойошторған Фән фестивале тураһында һүҙ бара. Уның маҡсаты - республикала фәнде популярлаштырыу, фәнни белемде һәм заманса технологияларҙы ҡыҙыҡлы һәм һәр кем аңларлыҡ итеп күрһәтеү, юғары технологиялар өлкәһендә тәжрибә уртаҡлашыу өсөн майҙансыҡ булдырыу. Сараға Рәсәйҙең исемдәре донъяға билдәле фән эшмәкәрҙәре саҡырылған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Силәбе өлкәһенең "Уралмостострой" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте Өфөнөң Затон биҫтәһендә Ағиҙел йылғаһы аша икенсе күпер төҙөү һәм документация әҙерләүгә асыҡ конкурста еңеүсе булды. Был йәмғиәт составына алты күпер төҙөү предприятиеһы, шул иҫәптән Өфөнөң 30-сы күпер төҙөү отряды инә. Мәғлүмәттәргә ярашлы, объект Ағиҙел йылғаһы аша һалынған автомобиль күперенән 40 метр өҫтәрәк төҙөләсәк. Уның оҙонлоғо 936,1 метр тәшкил итәсәк. Күперҙә өс һыҙатлы хәрәкәт ойоштороу планлаштырыла. Был объект ҡаланан сыҡҡан урында тығындарҙы бөтөрөргә ярҙам итәсәк, М-5 "Урал" һәм М-7 "Волга" федераль трассалары араһында транспорт бәйләнешен тәьмин итәсәк.

✓Башҡортостанда айыҡ туйҙар йышыраҡ үткәрелә башланы. Ошо көндәрҙә Йылайыр районында бер юлы ике пар никахҡа ингән. Юлдыбай ауылынан Рәмилә һәм Марат Мусиндар, Ишбулды ауылынан Гөлназ һәм Азат Әмәкәсовтар тантаналы байрамдарын алкоголһеҙ үткәргән. Бындай ғаиләләр йәштәр өсөн өлгө булып тора. Ғөмүмән, әле республикала киң ҡолас алған "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыусылар сәләмәт йәшәү рәүеше өсөн көрәштә күп саралар үткәрә: магазин кәштәләренән алкоголле эсемлектәр алына, айыҡ һабантуйҙар үткәрелә, уҡыусылар һәм студенттар өсөн алкоголдең зыяны тураһында семинарҙар ойошторола, ә айыҡ туйҙар үткәреү йылдан-йыл киң популярлыҡ яулай бара.

✓БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы ҡарамағында Йәмәғәт спорт советы булдырылды. Уның составына спорт төрҙәре буйынса федерациялар етәкселәре һәм вәкилдәре, тренерҙар һәм спортсылар инде. Йәмәғәт советын Владимир Самородов етәкләне. Йәмәғәт спорт советы ағзалары министрлыҡ тарафынан әҙерләнгән норматив хоҡуҡи акттар проекттарын, граждандарҙың, йәмәғәт ойошмаларының башланғыстарын тикшерәсәк, ведомствоның бюджет средстволары иҫәбенә тормошҡа ашырылған инвестиция проекттарының урынлы булыу-булмауын ҡараясаҡ, шулай уҡ төрлө ултырыштарҙа ҡатнашасаҡ.

✓Өфөлә ҡаланы таҙартыу һәм төҙөкләндереү айлығы 10 октябргә Республика көнө байрамына тиклем дауам итәсәк. Ә 28 сентябрҙә дөйөм ҡала өмәһе иғлан ителә.

*ЗАКОНДАР ӘЛИФБАҺЫ*

**Өфөнөң етемдәреһеҙ ҡала булыу тураһындағы изге маҡсаты хаҡында гәзитебеҙ биттәрендә даими яҡтыртып барабыҙ. Социаль етемлекте иҫкәртеү йәһәтенән ул Рәсәйҙә лидерлыҡ позицияларын биләй. Мәҫәлән, былтыр балалар йорттарында 700 бала иҫәпләнһә, быйыл был һан - 450. Шуларҙың 100-ҙән ашыуы даими медицина ҡүҙәтеүенә мохтаж, физик мөмкинлектәре сикләнгәндәр. Былтыр йыл дауамында 70 бала ғаиләләргә бирелһә йәки уллыҡҡа - ҡыҙ итеп, опекунлыҡҡа алынһа, быйыл йыл һуңына тиклем был һан 100-гә етеүе мөмкин. Август айында ғына төрлө йәштәге ете баланы (бер ғаиләнән - дүрт, икенсе ғаиләнән - өс) ике ғаилә тәрбиәгә алған. Был - опека хеҙмәткәрҙәре өсөн ҙур шатлыҡ та, сөнки туғандарҙы айырырға ярамай, ә инде бер юлы күп баланы тәрбиәгә алырға теләүселәр бик һирәк. Тағы шуны әйтергә кәрәк: былтыр тәрбиәгә алынған балаларҙың береһе лә кире ҡайтарылмаған.**



# ҠАРАУСЫҺЫҘ БАЛАЛАР...

Журналистар өсөн уҙғарылған матбуғат конференцияһында ҡала хакимиәтенең Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы начальнигы Руслан Хәбибов ошолар хаҡында белдерҙе һәм был өлкәне көйләүсе норматив базаға индерелгән үҙгәрештәр менән таныштырҙы. Беренсенән, федераль закондан быға тиклем опекун (попечитель) булған һәм был бурыстан ситләтелмәгән граждандарға ҡабаттан ғаиләгә ҡыҙ итеп йәки уллыҡҡа бала алыу өсөн әҙерлек үтеү зарурлығы алып ташланған. Икенсенән, РФ Граждандыҡ процессуаль кодексының 274-се статьяһына яңылыҡ индерелгән: хәҙер баланы уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алыу тураһындағы суд ҡарарына ялыу биреү ваҡыты 10 көнгә тиклем ҡыҫҡартыла. Йәғни элек суд ыңғай ҡарар сығарғандан һуң "яңы" ата-әсәләр балаларҙы бер айһыҙ өйөнә алып ҡайта, тейешле документтар юллай һәм баланы дауалауға йөрөтә алмаһа, хәҙер был ваҡыттың ҡыҫҡарыуы опекун-попечителдәр өсөн дә, сабыйҙар өсөн дә ыңғай әһәмиәткә эйә.

"Опека һәм попечителлек тураһында" Федераль закондың ваҡытлыса опека йәки попечителлек ваҡытын оҙайтыуы ла ыңғай үҙгәрештәрҙең береһе. Бының өсөн, даими опеканан айырмалы, опекун йәки попечитель булырға теләүсенән махсус органдарға бары тик шәхесен раҫлаусы документ тапшырыуы ла етә. Бынан тыш, элекке ҡанунға ярашлы, ваҡытлыса опека йәки попечителлек билдәләнгән ваҡытта граждандар тейешле документтар йыйып тапшырып өлгөрмәһә, был вәкәләт туҡтатыла ине, хәҙер был ваҡыт алты айғаса, айырым осраҡтарҙа һигеҙ айғаса оҙайтыла.

Ҡануниәткә индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, тәрбиәләнеүсенең милкен файҙаланыу һәм идара итеү буйынса уның опекундары йәки попечителдәре йыл һайын биргән отчеттарында аҙыҡ-түлек, кәнкүреш әйберҙәре, ваҡ-төйәккә тотонған сығымдарын раҫлаусы документтар тапшырмаһа ла була.

Бынан тыш, РФ Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, ҡануниәттә төп үҙгәреш булып хәҙер ғаилә килемен раҫлаусы документ урынына иренең килеме тураһындағы белешмәне тапшырыу мөмкинлеге тора. Был ҡатын-ҡыҙ өйҙә хужабикә булып ултырған һәм ғаилә тәрбиәгә бала алырға ҡарар иткән осраҡты күҙ уңында тота.

Опека һәм попечителлек органдарының тәрбиәгә бала алырға теләүсе граждандың сәләмәтлеге торошо тураһында медицина һығымтаһын талап итеү ваҡыты оҙайтылыуы ла көнүҙәк булып ҡала. Элек бының өсөн өс ай билдәләнһә, хәҙер ул ярты йылғаса оҙайтылған.

Ҡануниәткә индерелгән үҙгәрештәрҙең өсөнсө төркөмө етем балаларҙың һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлауға һәм гарантиялауға ҡағыла. Мәҫәлән, һаулыҡ торошо тирә-яҡтағыларға хәүеф менән янаусылар, бер енесле никахтағы кешеләр, никахта булмаусылар опекун (попечитель) була һәм баланы уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп ала алмай.

Бынан тыш, элек ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған баланы илдән ситтә даими йәшәүсе, балаға туғанлығы булмаған Рәсәй граждандарына, сит ил граждандарына, граждынлығы булмаусыларға уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп биреү ваҡыты мәғлүмәттәрҙең федераль банкка килеп эләгеү көнөнән алып алты ай булһа, хәҙер был ваҡыт бер йыл тәшкил итә. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа баш ҡаланан бер генә бала ла сит ил граждандарына бирелмәгән.

Ошо категорияға ҡараған балаларҙың юғары технологиялы медицина ярҙамы алыуы һәм шулай уҡ Рәсәйҙән ситтә дауаланыуы хоҡуғы ла нығытылған. Бының өсөн сығымдар федераль бюджеттан бүленә. Быға тиклем сит илдә дауаланыу мәрхәмәтлек фондтары ярҙамы менән тормошҡа ашырыла ине. Бынан тыш, тәрбиәгә бала алған ата-әсәләр медицина, психологик, педагогик, юридик, социаль ярҙам алырға хоҡуҡлы.

Әйткәндәй, әгәр ғаилә тәрбиәгә инвалид, ете йәштән өлкән бала, бер туғандарҙы ала икән, уларға бер тапҡыр һәр бала өсөн 100 мең һум аҡса түләнә. Сағыштырыу өсөн: ындай категорияға инмәгән баланы тәрбиәгә алғанда бер тапҡыр түләнә торған пособие суммаһы 15 мең һум тәшкил итә. Был - федераль бюджеттан түләнгән пособие. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан Республикаһы ҡануниәтенә индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған баланы уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алғанда әсәлек капиталына тиң - 408960,5 һум пособие түләнә. Әгәр инде тәрбиәгә инвалид бала алынһа, был пособиеның күләме 100 мең һумға арта.

Әлбиттә, бала тәрбиәләүҙе бер ниндәй сумма менән дә баһалап булмай. Бөгөнгө эшһеҙлек заманында, бәлки, кемдер даими килеп торған аҡсаһы өсөн опекунлыҡ юллайҙыр, бәгеләр, ысынлап та, үҙҙәренең балалары үҫеп таралышып, тын ҡалған донъяһында шат тауыштар ишеткеһе, уларҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ һорауҙарына яуап бирәп, нимә - насар, нимә - яҡшы икәнлеген мейеһенә һеңдерергә теләгәндән ошо аҙымға баралыр. Иң мөһиме - уларға лайыҡлы тәрбиә бирелһен дә, ҡарт көндәрендә ата-әсәләре бәхетле ҡартлыҡ кисереп, балаларының изгелек-игелеген күреп ултырһын ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## Тупланма түләтеү

**Былтыр миңә пенсия тәғәйенләнде. Тупланма суммаһын түләтеү өсөн миңә ни эшләргә кәрәк?**

- Беренсенән, һеҙҙең хеҙмәт пенсияһы тәғәйенләүгә хоҡуғығыҙ булыуы кәрәк. Икенсенән, Рәсәй Пенсия фондындағы шәхси иҫәбегеҙҙә күрһәтелгән пенсия тупланмаһы аҡсаһының булыуы мотлаҡ. Ә ул кемдәрҙең бар? 1967 йыл тыуған һәм унан кесерәк йәштәгеләрҙең, шулай уҡ 1953-1966 йылғы ирҙәрҙең һәм 1957-1966 йылғы ҡатындарҙың - улар өсөн эш биреүсе тарафынан 2002-2004 йылдарҙа тупланма өлөшкә страховка иғанәләре түләнде. Ошо тупланма аҡсаһын түләтеү өсөн Рәсәй Пенсия фондына йәки дәүләттеке булмаған пенсия фондына (әгәр тупланмағыҙ шунда теркәлһә) мөрәжәғәт итергә кәрәк. Әгәр пенсия тупланмағыҙ хеҙмәт пенсияғыҙҙың дөйөм күләменә ҡарата 5 процент һәм унан аҙыраҡ тәшкил итһә, ул бер тапҡыр түләнә.

## Ғариза биргән көндән

**Пенсия тәғәйенләнгәндән һуң ҙурыраҡ эш хаҡы алып эшләгән йылдарым өсөн документтарым табылды. Рәсәй Пенсия фонды пенсиям күләмен ҡайтанан иҫәпләне, ләкин аҡсаны түләүҙән баш тартты. Ни өсөн?**

- Пенсия күләмен үҙгәртеүсе яңы мәғлүмәттәр табылған хәлдә ҡайтанан иҫәп башҡарыла һәм пенсия яңы күләмдә ҡайтанан иҫәпләүҙе һорап мөрәжәғәт иткән айҙан һуң килгән айҙың 1-се көнөнән түләнә. Түләнмәй килгән ваҡыт өсөн өҫтәмә тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел.

## Балаларға күсһен өсөн

**1996 йылда ирем менән икебеҙгә ер участкаһы бүлеп бирелгәйне, ул хосусилаштырылмаған. Беҙгә берәр хәл була ҡалһа, ул балаларға күсәме?**

- Мираҫ буйынса фәҡәт милек кенә күскәнлектән, киләсәктә ер участкағыҙға балаларығыҙ хужа булыуын теләһәгеҙ, һеҙгә уны мотлаҡ хосусилаштырырға кәрәк. Васыят булмаған хәлдә тәү сираттағы вариҫсылар булып ир йә ҡатын, балалар, мираҫсының ата-әсәһе иҫәпләнә.

## Мөлкәткә һалым

**Быйыл шәхси милкемдә 2 йыл да 3 ай булған автомобилде 200 мең һумға һаттым. Автомобиль мираҫ килешеүенә ярашлы, әсәйем үлгәндән һуң ҡалғайны. Мин 2013 йылда алған килемем тураһында декларация бирергә тейешме? Автомобилде һатыуҙан килгән килемгә мөлкәт ташламаһын ҡуллана аламмы? Әгәр ҙә был мөмкин икән, ул ниндәй күләмдә булырға мөмкин? Декларацияны ҡайҙа һәм ниндәй ваҡытҡа тапшырырға тейешмен?**

- Һеҙгә 2014 йылдың 30 апреленән дә ҡалмай йәшәү урыныгыҙ буйынса һалым инспекцияһына 3-НДФЛ формаһы буйынса декларация тапшырыу мотлаҡ. Декларацияла 2013 йылда автомобиль һатыуҙан килгән килемде, йәғни 200 мең һумды, күрһәтергә кәрәк. Шулай уҡ һеҙ ошо уҡ суммаға мөлкәткә һалым ташламаһына хоҡуғығыҙҙы белдерә алаһығыҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡара миләш

❖ Көнөнә ун бөртөк кенә ҡара миләш емешен ашаһаң, баш ауыртыуынан, йөкөһөҙлөктән, ҡан баҫымы үҙгәреүенән ҡотолаһың.

❖ Ҡара миләштәге А витамины күреү һәләтлеген яҡшырта.

❖ Ҡара миләштәге Е витамины йөрәк мускулын нығыта.

❖ Ҡара миләш һуты бауыр һәм үт ҡыуығы өсөн файҙалы, тын юлын таҙалай, аҙ ҡанлылыҡтан да ярҙамы ҙур.

## Ҡабаҡ

❖ Ҡабаҡ һутына бал ҡушып эсһәң, тынысландыра, яҡшы йоҡлата.

❖ Бөйөрҙәр ауыртҡанда 2 ҡалаҡ киптереп ваҡланған ҡабаҡ һабағын ярты литр ҡайнар һыуға һалып, томалап, 2 сәғәт төнәтергә. Һеҙөргә, ҙур булмаған йотомдар менән көн буйына эсеп бөтөрөргә.

❖ Ҡабаҡтың үҙен бәлеш, бутҡа итеп тә ашарға кәрәк. Тәмле лә, файҙалы ла.

## Ваҡ шешектәр сыҡһа

❖ Ваҡ шешектәрҙән ҡотолоу өсөн һуғанды бешерергә һәм арыш икмәге менән болғатырға, бал ҡушырға. Килеп сыҡҡан ҡамырҙы шешекле ергә ябып бәйләргә һәм йоҡларға ятырға. Иртәнгә шешек һытыла, ауыртыу бөтә, йәрәхәт тә тиҙ уңала.

❖ Ошондай уҡ ҡамырҙы һыҙлаған быуындарға ла 2-3 аҙнаға бәйләргә кәрәк, һыҙлау үтә.

❖ Шулай уҡ сей ҡабаҡты иҙеп ябыу ҙа шешектәрҙән ҡотҡара. Тән бешкәндә лә файҙалы.

## Склероз

❖ Ваҡ ҡырғыстан ҡырылған башлы һуғандың һутып һығып алырға. 1 стакан һуған һутын 1 стакан ойоған (шәкәрләнгән) бал менән болғатырға, көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 1 сәғәт алда йәки ашағандан һуң 2-3 сәғәт уҙғас 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ Ҡартлыҡ склерозы ваҡытында 30 грамм ваҡланған андыҙ тамырын 0,5 литр һыуға һалып, һәр көндө болғатып, 40 көн төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 20-30 тамсы эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Эс-бил ауырыуҙары менән бәйле им-том

**Һыу тотоуҙан им-том.** Йылға һыуы эсеп, кешенең эсе ауыртһа, ололар "һыу тотҡан" тиҙәр. Ауырыуҙы һауыҡтырыу өсөн кешенең һыу эскән ерендә уҡынып, һыуға йомортҡа һарыһы йә тәңкә, булмаһа, бер ус үлән ырғытҡандар. Имләгәндә:

*Һинән һаулыҡ,*
*Минән яулыҡ,*
*Кәртә тоттом,*
*Ҡаҙыҡ ҡаҡтым,*
*Име-томо шул булһын.*

**Эс күбеүҙән им-том.** Эс күбеү ашты " Бисмилла" һыҙ ашауҙан, тиҙәр. "Бисмилла" булмағас, эскә яман ел инә һәм эс күбә. Эс күпһә, Урта Урал башҡорттары уҡлау менән 3, 7, 9 мәртәбә:

*Юл ситенә кит,*
*Юл ситенә кит,*
*Оло юлға кит,*
*Имем-томом шул булһын, -*
тип эскә төрткәндәр.

**Эс китеүҙән им-том.** Эс китһә, уны артыш еләге менән имләгәндәр. Быйың өсөн артыш еләген алалар, уны сәй кеүек бешерәләр һәм эс доғаһын уҡый-уҡый ауырыуға эсерәләр. Доға ошо:

*Артыш эсерәм, ары кит,*
*Еләк эсерәм, елеп кит,*
*Ауырыу булһаң, сығып кит!*
*Тфү, тфү, тфү!*

**Яңы ыштан менән имләү.** Кешенең эсе ауыртһа, уны яңы ыштан менән имләгәндәр. Быйың өсөн кешегә яңы ыштан кейҙергәндәр, шунан уны өшкөргәндәр, аҙаҡ ыштанын сисеп, оло әбейҙәргә биргәндәр. Шулай итһәң, эс ауырыуы китә икән.

**Эс төшөүҙән им.** Эс төшөүҙе мунсала һылап имләйҙәр. Имсе ауырыуҙы эләүкәгә һалып, сүрәләр уҡып, уның эсен һылай, аяҡтарын һелкетә.

**Бил ауыртҡанда им-том.** Бил ауыртһа, игеҙ тапҡан кешенән (атаһымы, әсәһеме) типтерәләр. Типтереү өс тапҡыр булырға тейеш. Игеҙ баланың үҙенең дә сауабы көслө. Шуға игеҙҙәрҙән дә типтерергә була.

**Биртек сабыу.** Биртек булып, бил ауыртһа, кешене ергә әйләндереп һалып, балтаның үткер яғы менән төртөп-төртөп алалар ине. Төрткәндә: "Ни сабаң?" "Биртек сабам!" тип, 5, 7 тапҡыр ҡабатларҙар ине.

**Биртек йыйыу.** Берәйһенең биле биртенһә, уны биртек һорап имләйҙәр. Биртек һорарға өс бала: баш бала, уртансы бала, кинйә бала (төрлө кешенеке булһа ла ярай) йөрөй. Улар өс өйҙән биртек һорай:

*Билем, билем биртенгән,*
*Биртек һорай мин килдем.*
*Ҡайным улы ҡатынған,*
*Ҡатыҡ һорай мин килдем.*
*Асығыҙ ишекте! -*
тип ҡысҡыра. Уға ишекте ҡыҫып ҡына асалар, ул арты менән тора. Шунан килен кеше:

*Ҡайным улы ҡатынһа,*
*Ҡатыҡ туҡып бирерһең.*
*Уның биле биртенһә,*
*Мал майына йыуырһың, -*
тип, уға икмәк, ҡорот һ.б. ризыҡ биргән.

Ауырыған кешенең билен май менән ыуалар, алып ҡайтҡан башҡа ризыҡтарҙы ашаталар. Шунан ул кеше һауығырға тейеш була.

Баш һәм кинйә баланың биртек йыйыуы. Баш бала менән кинйә бала сүмес тотоп сыға ла, кешегә барып, ишекте ҡыҫып, ҡулын һона:

*Етем улы етенгән,*
*Ҡаты-ҡото бирегеҙ,*
*Ҡайным улы ҡатынған,*
*Ҡаты-ҡото бирегеҙ,*
*Бейем улы биртенгән,*
*Биртек һорай мин килдем.*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ШАҢДАУЫ

**Һәр кешенең үҙ яҙмышы булған кеүек, ауылдарҙың да яҙмышы - үткәне, тарихы бар. Ҡайһы берәүҙәр бөтә ғүмерен тыуған ауылында, тыуған ерендә йәшәп уҙғара. Ә ҡайһылар бер ауылда тыуа, икенсеһендә үҫә, ә аҙаҡ сит-ят ерҙәрҙә йәшәп, илдәр гиҙеп ғүмер итә. Ауылдар ҙа, кешеләр кеүек - бер урында нигеҙләнеп барлыҡҡа килһә, күпмелер ваҡыт үткәс, заманына бәйле сәбәптәр арҡаһында, икенсе яҡтарға күсенеп йәки бүленеп ултырырға мәжбүр була. Бөтөнләй һүнеп, халыҡ хәтерендә генә ҡалып, юғалғандары ла бик күп.**

# НИГЕҘ ТАШЫҢ НИҢӘ ҠОРОНО, ОЛО КӘБӘС?

Әле студент саҡтарҙа, Өфө юлынан Ауырғазы районы аша автобуста барғанда, Кәбәс ауылы туҡталышын күреп үтә торғайным. Ҡолғона ауылы дауаханаһына эшкә килгәс, Ишембай районында ла Кәбәс исемле ауыл барлығын белдем. Эйе, ысынлап та, халыҡ хәтере киң, ул үҙенең тарихын быуындан-быуынға һөйләп, һаҡлап ҡала алған.

Ҡолғона ауылы тирәләй, 30 - 40 саҡырым әйләнәһендә генә, юғалған - Урта Айры, Алатау, Һартағас, Ҡалғасау, Фәрәй, Ҡоҙаш исемле ауылдар булған. Ә юғалған утар-йәйләүҙәр - Сатра йорт, Ҡырын йорт, Ташлы йорт, Балта йорт, Һәйет утары, Нәғим, Хәбиб, Сабит утарҙары...

Утар-йәйләүҙәрҙең һүнеүенә Рәсәй батшаларының башҡорттарға ҡусмә тормошто тыйыуы сәбәпсе булһа, бәләкәй ауылдарҙың һүнеүенә халҡы кәмеү, мәктәптәрҙе ябыу, юлһыҙлыҡ, электр уты булмауы арҡаһында ғаиләләрҙең тирә-яҡ ауылдарға күсенеп ултырыуы сәбәпсе булған. Былар ҙа Рәсәйҙең "перспективаһыҙ ауылдар" тигән сәйәсәтенең емештәре.

Ә бына Оло Кәбәс ауылы халҡының аҡтар һәм Ҡыҙыл армия тарафынан атылып, йорттары яндырылып бөтөүенә һис тә ышанғы килмәй ине. Ҡолағың менән ишеткәнсе, күҙең менән барып күр, тиҙәр бит. Ниһайәт, бер йәй ошо теләгемде башҡарырға мөмкинлек булды. Оло Кәбәс ауылы урынынан 2-3 саҡырымда ятҡан Ҡалғасау утарында ҡатыны менән икәүләп кенә донъя көткән Фәхретдин ағай ҙа: "Ял итеп ҡайтырһың, отпускыңда миңә кил", - тип нисәмә йылдар ҡунаҡҡа саҡырғайны. Ул үҙе элек Стәрлетамаҡта йәшәгән. "Сода" комбинатының ныҡ зарарлы цехында эшләп, 45 йәшендә пенсияға сыҡҡан, һаулығы ныҡ ҡаҡшағас, Ҡалғасау утарында урынлашҡан Ҡолғона леспромхозының бүлексәһенә ҡарауылсы булып эшкә урынлашып, шунда уҡ йорт һалып, тормош иптәше Минифа апай менән йәшәп алып китә. Леспромхоз ябылһа ла тыуған ауылы Ҡалыу-Айрыға күсенмәй тороп ҡала.

- Аллаға шөкөр, ошонда 25 йылдан ашыу йәшәйбеҙ. Байтаҡ мал аҫырайым, умарталарым да ишле генә. Заманында ҡорт балын Өфө хужалары вертолет менән генә килеп ала торғайны. Яҡын-тирә ауылдарҙы, ер-һыу атамаларын, халыҡ араһында йөрөгән риүәйәттәр, ваҡиғаларҙы ла байтаҡ беләм, - тип һөйләгәйне ул.

Ун етенсе быуаттың баштарында бөгөнгө Ауырғазы районында Кәбәс ауылының ярты халҡы, ни сәбәптәндер бүленеп, бөгөнгө Ишембай районындағы Зигановка ауылы урынына килеп нигеҙләнә. Бик мәғрифәтле, һөнәрле халыҡ була улар. Салауат батыр ихтилалында ла әүҙем ҡатнашалар. Шул сәбәптән дә, ихтилал баҫтырылғас, карателдәр отрядтары иң тәүҙә шундай ауылдарға ябырыла. Халҡын язалай, һөргөнгә оҙата. Бөгөнгө Петровск урынында ла Кинйәкәү исемле башҡорт ауылы урынлашҡан була. Уларҙы ла ҡыуып таратып бөткәс, Белорет яҡтарынан урыҫтарҙы күсереп ултырталар.

Ярты быуат та иркенләп йәшәй алмаған Кәбәс халҡы, яңынан күсенеп, Бөрйәнгә сиктәш булған Юрматы ырыуының Үрек йылғаһы буйҙарына, төпкөлдә, тауҙар араһында ятҡан ерҙәргә килеп урынлаша. Йыраҡта булғас, бүтән бәлә-ҡазаға тарымай, тыныс йәшәрбеҙ, тип өмөтләнгәндәрҙер инде. Ысынлап та, халҡы ишәйеп, нығынып, бай тормош менән йәшәй башлай ауыл. Ҡортсолоҡ, малсылыҡ, һунар, Үрек, Нөгөш йылғаларынан һалдарҙа ағас оҙатыу менән шөғөлләнәләр. Ауылдарында ике мәсет була, йорттар һаны 70-кә етә. Ләкин бәлә, быуат ярым ваҡыт үткәс, тағы килә. Был юлы каратель экспедицияһы ҡиәфәтендә Рәсәйҙең "еңелмәҫ Ҡыҙыл армияһы" килә.

Билдәле булыуынса, 1918 йылдың июленән 1919 йылдың март айҙарына тиклем Башҡортостан ерендә бик ҡатмарлы һәм фажиғәле граждандар һуғышы бара. 1919 йылдың йәйенән ҡышына тиклем Ҡыҙыл армия үҙенең һөжүмен Стәрлетамаҡты алыуға йүнәлткәндә Петровск, Маҡар, Ҡолғона, Әүжән ауылдары тирәһендә ҡаты бәрелештәр була.

Сентябрь-ноябрь айҙарында аҡтар, Ҡолғона ауылы тирәһендәге тау битләүҙәрендә окоптар ҡаҙып, Маҡар яғынан киләсәк ҡыҙылдарға ҡаршы торорға әҙерләнә. Ләкин хәүеф һиҙгән Ҡыҙыл армия командирҙары тура Ҡолғонаға инмәй, Ғафури районы аша үтеп, Әүжәнде ала һәм аҡтар көтмәгән тау арттарынан һөжүмгә күсеп, еңеүгә өлгәшә. Тарҡалған аҡ армия яугирҙәре, Урта Айры, Алатау, Ҡалғасау ауылдары аша сигенеп, декабрь, ғинуар айҙарында Оло Кәбәстә туплана.

19 декабрҙә Стәрлетамаҡ та ҡыҙылдар ҡулына күсә. Кәбәстә йәшеренеп ятҡан аҡтарҙың барлығы билдәле булғас, уларҙы тулыһынса юҡ итеү ниәтендә ҡыҙыл отряд ебәрелә. Ҡаты бурандарҙан һуң юлдар өҙөлөп торған саҡ булғанға һиҙгерлеген кәметкән ауыл халҡы менән йөҙҙән ашыу аҡтар ҙа ҡыҙыл большевиктарҙың ҡамауында ҡала. Күрәһең, тиҙ бирелмәй, ҡаршылыҡ күрһәтеп һуғышҡандарҙыр, бәлки, ауыл халҡы ла аҡтар яҡлы булғандыр, шулай булмаһа, ауыл халҡын аҫып, ағастарға ҡаҙаҡтар менән ҡағып ҡуймаҫтар, атмаҫтар ине. Ҡулға эләккән аҡтарҙы ауыл эргәһендәге мәмерйәгә килтереп атып тултырмаҫтар ине.

Нисектер иҫән ҡалған аҙмы-күпме халыҡ бөгөнгө Ялтыран ауылынан бер нисә саҡырым арала ятҡан ергә күсенеп, яңынан Кәбәс



ауылын нигеҙләй, нигеҙҙе яңыртырға ярамаған йола булғанға ла шулай эшләгәндәрҙер.

Бөгөн Оло Кәбәс ауылы урынында ер менән тигеҙләнгән нигеҙ таштары, янған күмер, мейес кирбестәре һәм ауылға ингән юл ҡаршыһында ғына үҫкән бер өйкөм акация ағастарынан башҡа бер нәмә лә юҡ **(һүрәттә)**. Оло Кәбәс юғалғандар иҫәбендә!

Был сәфәремә мин Ишембайҙа йәшәгән дуҫым Фәнил Дәүләтшин менән сыҡҡайным. Электроника менән шөғөлләнеп, археология менән дә ҡыҙыҡһынғас, үҙе менән "металлоискатель" приборын да алғайны ул. Йорт нигеҙҙәре буйлап йөрөп, ауылдың көнкүрешенә, шөғөлөнә, үҫешенә бәйле булған әйберҙәр табырға тура килде. Тимерлектә һуғылған балталар, солоҡ балталары, тәгәрмәс һәм мискә туғындары, дағалар ауылда тимерлек һәм оҫта тимерсе булыуын раҫлап тора. Балталар, туғындар заклепкаһыҙ, ҡыҙҙырып йәбештереү ысулы менән эшләнгән, һал ағыҙғанда ҡуллана торған багор-ырғаҡтар халыҡтың ысынлап та һал ағыҙыу менән шөғөлләнгәнен иҫбатлай. Ҡайһы бер өйҙәрҙең башы тимер ҡалай менән ябылған булған. Ватыҡ фарфор сәйнүктәр, сеүәтәләр һәм быяла, көҙгө киҫәктәре - халыҡтың бай, етеш йәшәгәнлегенән. Мейестәр яндырылған кирбестән һалынған. Яҡын-тирә ауылдарҙа кирбес һуҡмағандар, тимәк, уны үҙҙәрендә һуҡҡандар.

Ҡасандыр Стәрлетамаҡ менән Өфө араһында йәшәгән халыҡ төпкөлдәрҙә йәшәгән башҡорттарға ҡарағанда күпкә белемле, һөнәрле, мәҙәниәтлерәк булған. Үҙҙәре лә төпкөлгә, тау-урмандар араһына урынлашҡас, балаларына белемдәрен, һөнәрҙәрен, мәҙәниәтен өйрәтеп ҡалдыра алған. Бүтән ауылдарға ҡарағанда етешерәк, иркенерәк йәшәгәндәр. Бик күп урында 2-3 нигеҙ ярыш ҡына ҡоролған. Был инде ир кеше, бай булғас, икеөс ҡатын ала алғанлығы, һәр ҡатынына үҙенең урамынан йорт та төҙөткән булыуы тураһында һөйләй. Тимәк, етеш, бай йәшәгән халыҡ үҙ мөлкәтен, үҙ иркен, электән килгән ил ҡоролошон һаҡлап ҡалырға тырышҡан аҡтар яҡлы булған, уларға үҙҙәрендә йәшеренеп торорға рөхсәт, мөмкинлек биргән.

Ауыл эргәһенән генә ағып ятҡан Кәбәс йылғаһының көнсығыш ярынан 300 метр самаһы йыраҡлыҡта тау һыртындағы мәмерйәне лә табып тикшерергә булдыҡ **(һүрәттә)**. Уны мәмерйә тип тә әйтеп булмай. 30 метрҙай оҙонлоҡта, тотошлай таштан торған тау битләүе уйылып ярылыуҙан барлыҡҡа килгән йырын. Бейеклеге өс метрҙай, ә киңлеккә урыны менән метр ярымдай булалыр. Байтаҡ өлөшө таш ишелеүҙән күмелеп тә бөткән. Ләкин бер өлөшөнөң мөгәрәп ауыҙылай ғына ҡалған ярығынан эскә ҡараһаң, кеше һөйәктәре ятыуы күренә.

Бик шомландырһа ла, ҡыҙыҡһыныу көслө булғас, эсенә төшөп, бер баш һөйәген һәм аяҡ, ҡул һөйәктәрен йыйып, бер урынға өйөп һалып сыҡтым. Кемдең ғәзиз һөйәктәре икән улар: атылған аҡтарҙың береһенекеме, йәки беҙҙең замандың криминаль ҡорбанынығымы? Әйтеүе ҡыйын. Дөрөҫлөктө аныҡлау өсөн ишелгән таштарҙы өҫкә сығарып, аҫта ятҡан һөлдәләрҙе табыу кәрәктер.

Аҡылдарын юғалтҡансы эскән Ҡыҙыл армия һалдаттары халыҡты һәм ауылда булған вәлидовсыларҙы язалаған, атҡан икәнлекте раҫлаусы ҡомартҡы ла табылды. Ул араҡы шешәһенең алюминий ҡалайҙан яһалған бөкөһө. Уртаһында ҙур йондоҙ баҫылған. Ә ситләтеп "Завод Б. Н. г. Екатеринбург" тип яҙылған. Нөктәләр урынына бәләкәй йондоҙҙар һуғылған. Тимәк, Екатеринбургты Свердловскиға әйләндергәнсегә тиклем сыҡҡан араҡы был. Ә йондоҙҙар һуғылғас, завод большевиктар ҡулына күскән осор. "БН" тигәне "Большевиктар наркомпроды" булалыр.

Һөнәрем буйынса дүрт ай буйы Белоруссияның Минск ҡалаһында уҡырға тура килде. Унда немец фашистары тарафынан халҡы менән бергә яндырылған Хатынь тигән ауылды барып күргәйнем. Ауылдың урынында шундай уҡ яҙмышҡа дусар булған ауылдар иҫтәлегенә мемориаль һәйкәл асҡандар. Былтыр Салауат ҡалаһы эргәһендә, элекке Аллағыуат ауылы урынында төрлө сәбәптәр арҡаһында күсерелгән, халҡы таралыуҙан бөтөнләй ер йөҙөнән юғалған ауылдар хөрмәтенә мемориаль комплекс асылғайны. Ул ауылдар бары һуңғы 60-70 йыл эсендә генә юҡ ителгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был мәҡәләмде мин 2005 йылда "Йәшлек" гәзитендә баҫтырғайным һәм уның буйынса бер ниндәй фекер алышыуҙар ҙа булмағайны. Әле бына был ҡот осҡос фактты ҡабатлап йәмәғәтселек иғтибарына еткерергә булдым. Башҡортостан ерлегендә Рәсәй сәйәсәтенә ҡаршы булған ихтилалдарҙан һуң, граждандар һуғышы осоронда юҡ ителгән, халҡы ҡыуылып, бүтән милләт килмешәктәре урынлаштырылған ауылдарҙың исемдәрен тергеҙеп, шул ауылдар иҫтәлегенә лә мемориаль һәйкәл асырға булмаҫ инеме икән? Ишембай районында ғына ла ике тиҫтәгә яҡын бит улар. Тарихсылар, ғалимдар ни әйтер?**

**Рәдис ДУСАЛИН.**
**Ишембай районы**
**Ҡолғона ауылы.**







*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

Башҡорттарҙың ризығы тураһындағы беренсе мәғлүмәттәр бик наҡыҫ һәм улар бары тик һуңғы ике йөҙ ярым йылға ҡарай. Билдәләп китеүебеҙсә, "Ҙур һыҙма китабы"нда (XVII быуаттың беренсе яртыһы) уларҙың аҙыҡтары "бал, йәнлек һәм балыҡ" булыуы бәйән ителә. Был сығанаҡ һөт ризыҡтары тураһында иҫкә алмай, шуға ҡарамаҫтан, улар башҡорттарҙа, малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе халыҡ булараҡ, ҙур әһәмиәткә эйә булған. 1725 - 1726 йылдарҙа Юхнев йыйған мәғлүмәттәргә ярашлы, Себер даруғаһы башҡорттары "икмәк ашамайҙар, ит кенә ашайҙар һәм бейә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ эсәләр"; шулай уҡ Нуғай даруғаһы башҡорттары ла "йылҡы итен ашай һәм ҡымыҙ эсә, уларҙа шулай уҡ бал да бар"; ә Ҡаҙан даруғаһы башҡорттары "икмәк һәм йылҡы ите ашай". Уса даруғаһының төньяҡ башҡорттарында икмәк был ваҡытта төп туҡланыу ризығы булып торған.

Башҡорттарҙың ризығы тураһындаентекле мәғлүмәттәрҙе XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы сәйәхәтселәр ҡалдырған. И. И. Лепехиндың һүҙҙәренсә, йәйгеһен башҡорттар, нигеҙҙә, һөт менән туҡланған. "Уларҙың (башҡорттарҙың) юлға алған ризығы ҙур булмаған киҫәк сырҙан һәм бер турһыҡ ҡымыҙҙан тора. Шуның менән улар туҡ һәм кәйефле йөрөгән". П.С. Паллас шулай уҡ башҡорттарҙың төп аҙығы һөт ризыҡтарынан һәм иттән тороуын, ә инде икмәкте көн һайын ашамауҙарын билдәләгән. Пермь башҡорттары тураһында уҙған быуаттың башындағы автор Н. С. Попов, улар "иттән тыш өлөшләтә икмәк тә ашай; йәйгеһен ҡымыҙ эсәләр, ә ҡышҡыһын бейә һөтөнән бал һәм ирень (моғайын, айрандыр) ҡоялар", тип яҙа.

Башҡорттарҙың хужалыҡ көнкүреше үҙгәреүе менән уларҙың ризыҡ итеп ҡулланған аҙыҡ-түлеге лә үҙгәрә, ит урынына улар икмәкте күберәк ашай башлай.

Ҡырағай үҫемлектәр - балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, ҡымыҙ (малочай), ҡыркөпшә, ҡуян ҡолаҡ, сабыртҡан һ.б. үләндәр башҡорттар тарафынан йыш ҡулланылһа ла, үҫемлек ризыҡтары башҡорттарҙың туҡланыуында һәр ваҡыт икенсе урында тора. Бик күп ризыҡтарға тәмләткес рәүешендә улар йыуа һәм ялан һуғаны, урман йыуаһын файҙаланған. Бигерәк тә янтраҡ йәки һарына ризыҡ өсөн күпләп йыйылған һәм файҙаланылған.

XX быуатҡа тиклем башҡорттар баҡсасылыҡ менән бик һирәк шөғөлләнгән. Баҡсалары булғандары ла ла унда бары тик бәрәңге генә ултыртҡан һәм бары тик уны ғына ризыҡ итеп файҙаланған. Башҡортостандың көнбайыш һәм төнъяҡ-көнбайышында уҙған быуат һуңында башҡорттар башҡа йәшелсә-емеш тә ултырта башлаған, әммә улар бәрәңге кеүек үк башҡорттарҙың туҡланыу ризыҡтары араһында икенсе урында торған һәм шуға ла запасҡа тупланмаған.

Башҡорттар бер ниндәй төр бәшмәк тә ашамаған, еләктән инде ер еләген, ҡайын еләген, ҡурай еләген, ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағат, тал бөрлөгәне, бөрлөгән, сейә һәм муйыл йыйған. Еләкте улар сей килеш тә, ҡаҡ эшләп тә ашаған; киптерелгән муйыл менән сейәне тирмәндән үткәреп, бәлеш эслеге итеп файҙаланғандар.

***✓ Тәбиғәт тарафынан бирелгән талант ниндәйҙер өҫтәмә "һуғарыуға" мохтаж түгел. Һәләт йә бар, йә юҡ һәм алкоголь ҡулланып ҡына үҙеңдә ниндәйҙер илһам сығанағы табырға һәм бөйөк әҫәрҙәр ижад итергә тырышыу ахмаҡлыҡ.***

# ЫСЫН ИЖАД ШЕШӘ ТӨБӨНДӘ ТҮГЕЛ...

## Ә беҙҙе уратып алған донъяла, хис-тойғоларҙа

**Донъяла төрлө ғаиләләр бар. Ғәҙәттә, ғаиләләргә ҡарата шундай ҡылыҡһырлама бирәләр: бәхетле һәм бәхетһеҙ, тулы һәм тулы түгел, ярлы һәм бай... Йәмғиәт был төрлөлөккә шул тиклем өйрәнгән, уларҙың теге йәки был айырмаһына артыҡ иғтибар ҙа итмәй. Шулай ҙа йәшәү рәүеше башҡа бик күптәрҙекенән айырылып тороуы менән ҡайһы бер ғаиләләр күҙгә ташланып тора. Һүҙебеҙ айыҡ тормош алып барыусы, алкоголь тигән яуыздан алыҫ тороусы ғаиләләр хаҡында. Ысынлап та, бындай ғаиләләргә иғтибар һәр саҡ көслө: кемдер хуплай, икенселәр йөпләй, өсөнсөләр аңламай, әммә ләкин битарафтар юҡ. Бөгөнгө әңгәмәбеҙ нәҡ ошондай ғаиләләрҙең береһе - Гөлшат һәм Әлфир БАЙМЫРҘИНДАР менән.**

**▸ Йәмғиәттә алкоголгә, иҫерткес эсемлек ҡулланыуҙыға ҡараш төрлөсә. Һеҙҙең дә был хаҡта фекерегеҙҙе белге килә.**

**Әлфир:** Табиптар алкоголь ҡулланыуҙы сиргә тиңләй, ә был яуыздың тоҙағына эләккәндәрҙең яҡындары иһә уны характер көсһөҙлөгө, насар ғәҙәт, кәмселек менән аңлата. Минеңсә, был фекерҙәрҙең икеһендә лә дөрөҫлөк бар. Кемдер аҙналар дауамында туҡтай алмай эсә икән - был ауыр сир һәм уны характер көсһөҙлөгө, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ ине. Ләкин кешене был ауыр сиргә нимә алып килеп еткерә? Нәҡ характер көсһөҙлөгө, яуапһыҙлыҡ, башҡалар артынан эйәреү инстинкты. Берәү ҙә үҙ теләге менән теге йәки был ауырыуҙы һайлап алмай. Шулай уҡ бер кем дә үҙ алдына бөгөн сирләргәме, әллә иртәгелеккә ҡалдырырғамы, тигән һорау ҡуймай. Тик алкоголь ҡулланыуҙы һәм тора-бара ошо һаҙлыҡҡа батыуҙы ғына кеше үҙенең теләге һәм ихтыяры менән башҡара.

**Гөлшат:** Алкоголь - йәмғиәттең социаль афәте. Быны берәү ҙә инҡар итмәй. Шул уҡ ваҡытта күптәр кемдендер алкоголь ҡоло булып киткәне өсөн түгел, ә иҫерткес эсемлек ҡулланыуҙан туҡтай алмаған өсөн шелтәләй. Ләкин был һүҙҙәр кеше тәүге рюмка күтәргән ваҡытта уҡ әйтелергә тейеш, ә беҙ, күп осраҡта, һуңлайбыҙ һәм һуңынан яфа сигәбеҙ. Саң ҡағыу мәсьәлә ҡырҡыулашҡас түгел, ә баш ҡалҡытып килгәнендә үк атҡарылырға тейеш. Һәр беребеҙ эргәбеҙҙәге яҡыныбыҙға, дуҫыбыҙға, танышыбыҙға иғтибарлы булһаҡ һәм ваҡытында ярҙам ҡулы һуҙа алһаҡ, бөгөнгө көндәге ҡот осҡос упҡынды йырып сығасаҡбыҙ.

**▸ Һуңғы ваҡытта наркологтар был өлкәләге яңы проблема - үҫмерҙәр алкоголизмы хаҡында күп һөйләй. Ни өсөн йәштәребеҙ был ауға барып эләгә һәм был хәл килеп тыуғанға кем ғәйепле?**

**Гөлшат:** Мин быны яңы ғына килеп сыҡҡан проблема, тип әйтмәҫ инем, сөнки ул тиҫтәләгән йылдар буйы үҫте, тамыр йәйҙе, нығынды һәм бөгөн килеп глобаль мәсьәләгә әйләнде. Шешә һәр бер байрамдың, табындың, хатта саф һауала йөрөүҙең дә айырылғыһыҙ атрибутикаһына әйләнде. Йәштәр араһында айырыуса һыра ҡулланыу киң таралған күренеш. Уларҙың күбеһе һыраны алкоголь эсемлек итеп түгел, ә ауыр эҙемтәләргә килтермәгән, ваҡытлыса күңелде күтәреү сараһы булараҡ ҡабул итә. Бының төптө хата фекер икәнлеген ололар аңлатырға тейеш. Ләкин аңлатыу өсөн уларҙың үҙҙәренә айыҡ тормош алып барыу, шешәле табындарҙан алыҫ булыу мөһим. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ - бала донъяға килер-килмәҫтән уның атай-әсәйенең туғандары бәпес аяғын араҡы йәки башҡа төрлө иҫерткес эсемлек менән "йыуа" ла башлай. Бәпес менән әсәй бала табыу йортонан сыҡҡас, табындар тағы ҡабатлана, сөнки йәш ғаиләнең ике яҡтан да әллә күпме туғандары, дуҫтары, хеҙмәттәштәре, таныштары бихисап. Шулай уҡ бындай ҡунаҡтарҙа балаһына күкрәк һөтө имеҙгән йәш әсәнең дә шарап, һыра йәки араҡы уртлап ҡуйыуы ят күренеш түгел. Был иһә баланың физик һаулығына ғына зыян килтереп ҡалмай, ә уның булмышын, асылын ҡоротоуға табан эшләнгән тәүге аҙым. Шуға күрә был йәһәттән ололарҙың йәштәргә тос ҡына "ярҙам" күрһәтеүен танырға кәрәк.

**▸ Шешәһеҙ табындар, тигәндәй, белеүемсә, һеҙҙең туй тантанаһы иҫерткес эсемлектәрһеҙ үтте. Был матур күренеш әлеге ваҡытта киң таралыу алһа ла, ете йыл элек йәмғиәт өсөн ул ят ине. Саҡырылған ҡунаҡтарығыҙ, атай-әсәйегеҙ быны нисек ҡабул итте?**

**Әлфир:** Һуңғы ваҡытта туй, тыуған көндәрҙең һәм башҡа байрамдарҙың алкоголһеҙ уҙғарыла башлауы, һис шикһеҙ, ыңғай күренеш. Тимәк, йәмғиәт ҡара урман аша ҡояш нурҙары күрергә өйрәнә башланы. Ә мин иһә, үҫмер ваҡытта уҡ, туйымды араҡыһыҙ үткәрәсәкмен, тип хәл иткән инем һәм ваҡыты еткәс, ҡарарымды үҙгәртмәнем. Был ваҡытҡа минең бер тамсы иҫерткес эсемлек эсмәүемә, тәмәке тартмауыма эргә-тирәләгеләрҙең барыһы ла өйрәнгән ине, шуға күрә туғандарым яғынан да, дуҫтарым тарафынан да аңлашылмаусанлыҡтар булманы. Туйҙан һуң күптәрҙең "Араҡыһыҙ ҙа күңел асып була икән", тип аптырап йөрөүенә шаһит булдыҡ.

**Гөлшат:** Минең атай-әсәйем, үҙҙәре эсмәһә лә, тәүҙә ҡаршы булды. "Берҙән-бер ҡыҙҙарына йүнле туй ҙа үткәрә алманылар, тип әйтәсәктәр", "Ғүмерҙә бер тапҡыр була торған байрамды кешесә үткәрәсәкбеҙ" һәм ошо юҫыҡтағы уй-дәлилдәре менән беҙҙе кире күндерергә тырыштылар. Бына бит ул кешенең аңында байрам уҙғарыу тәртибе нисек һынлана: араҡыһыҙ үткән туй - туй түгел, йәнәһе лә. Тимәк, туй тантаналары йәштәр күңеле булһын өсөн, уларға яҡты киләсәк теләү өсөн түгел, ә тиҫтәләгән кешене йыйып, араҡы менән һыйлауға ҡайтарып ҡалдырылған. Күпме кешенең "Туй шәп үтте, ҡоҙаларҙы иҫһеҙ булғансы һыйлап ҡайтарҙыҡ", тип маҡтанып хәбәр һөйләүен ишеткәнем бар. Хайуан ише булып иҫергән кешенән дә сирҡаныраҡ күренеш юҡтыр ул был донъяла, ә туғанлашҡан кешеләренде был ҡиәфәттә күреү икеләтә күңелде ҡыра. Яҡындарыма ошоларҙың барыһын да аңлаттым һәм улар минең дәлилдәрем менән килешеп, айыҡ туй үткәрергә ҡарар итте. Һуңынан барыһының да ҡәнәғәт ҡалыуы ҡарарыбыҙҙың дөрөҫ булыуын тағы ла бер тапҡыр күрһәтте.

**▸ Күптәр эскән ғаиләлә тәрбиәләнгән баланың киләсәге яҡшы, айыҡ булыуына ышанмай. Ә һеҙ был осраҡта "Алма ағасынан алыҫ төшмәй", тигән әйтемде ҡулланыуҙы дөрөҫ тип һанайһығыҙмы?**

**Әлфир:** Бала саҡта атайымдың эсеүен, эскәс, уның ниндәй ҡиәфәткә инеүен, кешелек сифаттарын юғалтыуын, әсәйемә ҡул күтәреүен күреп үҫтем һәм, бер ҡасан да уның хәленә төшмәйәсәкмен, тип үҙемә һүҙ бирҙем. Әлегә тиклем, Аллаға шөкөр, һүҙемә хыянат иткәнем юҡ һәм артабан да был йәһәттән көслө рухлы, үҙ һүҙенән ситкә тайпылмаған кеше булып ҡаласаҡмын. Шулай уҡ 5 синыфҡа Өфөгә уҡырға килеүем һәм бында айыҡ аҡыллы, алдынғы ҡарашлы кешеләрҙең ҡулы аҫтына эләгеүем дә үҙенең ыңғай ролен уйнағандыр, тием. Шуға күрә үҙемә ҡарата был әйтемде ҡуллана алмайым. Ғөмүмән, барыһын да бер бизмәнгә һалып үлсәү хата. Бында, минеңсә, алмағастың ниндәй булыуынан түгел, ә унан өҙөлөп төшкән алманың ниндәй мөхиткә барып эләгеүе мөһимерәк роль уйнай. Әгәр ҙә ерҙә сереп ятҡан алмалар араһына барып төшһә, артабанғы тормошо ла, күп осраҡта, улар ише буласаҡ. Ләкин шул серек алмалар араһынан уны үҙ ваҡытында үрелеп алыусы осраһа, ул емештең киләсәге яҡты булыр.

**Гөлшат:** "Атаһы эсә, бынан арыу кеше сыҡмаҫ", тип фекер йөрөтөргә ярамай, минеңсә. Дуҫтарығыҙ араһында ғаиләһендә эсеүселәр булып та, ауыҙына тамсы ла алмаған, маҡсатлы һәм эшһөйәр кешеләрҙең күп булыуына иманым камил. Мәҫәлән, Әлфирҙе алып ҡарайыҡ. Әгәр ҙә мин уның атаһына ҡарап фекер йөрөтөп, уны кире ҡаҡһам, әлеге ваҡыттағы бәхетле тормошомдан баш тартҡан булыр инем. Ҡайһы берәүҙәр "иртәме-һуңмы гендар барыбер үҙенекен итә ул", тип яу һалырға ярата. Ләкин айыҡ тормоштоң бәхетен татыған, иҫерткес эсемлектәр эсеп, ялған күңел күтәреүҙән азат булған кешенең ҡасан да булһа был һуҡмаҡҡа төшөрөнә шикләнәм. Шуға күрә, кемгәлер "эскесе балаһы" тигән мөһөр һуғып, уны ситкә этәреү, уға ҡарата битарафлыҡ күрһәтеүҙе хупламайым.

**▸ Һеҙ икегеҙ ҙә ижад кешеһе. Берегеҙ рәссам, икенсегеҙ музыка өлкәһендә эшләй. Ижад кешеләре араһында эскелек тигән ауға эләгеп, унан ысҡына алмай яфаланыусыларҙың күп булыуы бер кемгә лә сер түгел...**

**Гөлшат:** Иҫерткес эсемлек ҡулланған таныш рәссамдар миңә был ваҡытта үҙҙәрендә эйфория, еңеллек тойоуҙарын, төрлө проблемаларҙы онотоуҙарын, тыныслыҡ кисереүҙәрен, күңел күтәренкелеге артыуын белдерә. Ижад итеү өсөн быларҙың барыһы ла ярҙам итә һәм һүрәттәр ҙә тиҙерәк һәм оҫтараҡ килеп сыға, тиҙәр. Ләкин мин был фекер менән килешмәйем, сөнки тәбиғәт тарафынан бирелгән талант ниндәйҙер өҫтәмә "һуғарыуға" мохтаж түгел. Һәләт йә бар, йә юҡ һәм алкоголь ҡулланып ҡына үҙеңдә ниндәйҙер илһам сығанағы табырға һәм бөйөк әҫәрҙәр ижад итергә тырышыу ахмаҡлыҡ. Ысын ижад, ысын сәнғәт шешә төбөндә түгел, ә беҙҙе уратып алған һоҡланғыс тормошта, күңелдәрҙән урғылған хис-тойғоларҙа һәм уйҙарҙа.

***Бала саҡта атайымдың эсеүен, эскәс, уның ниндәй ҡиәфәткә инеүен, кешелек сифаттарын юғалтыуын, әсәйемә ҡул күтәреүен күреп үҫтем һәм, бер ҡасан да уның хәленә төшмәйәсәкмен, тип үҙемә һүҙ бирҙем. Әлегә тиклем, Аллаға шөкөр, һүҙемә хыянат иткәнем юҡ һәм артабан да был йәһәттән көслө рухлы, үҙ һүҙенән ситкә тайпылмаған кеше булып ҡаласаҡмын. Шулай уҡ 5 синыфҡа Өфөгә уҡырға килеүем һәм бында айыҡ аҡыллы, алдынғы ҡарашлы кешеләрҙең ҡулы аҫтына эләгеүем дә үҙенең ыңғай ролен уйнағандыр, тием.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡартайған көнөндә атайым эсеүен ташлап, донъяға айыҡ ҡараш менән ҡарай башланы һәм тормоштоң араҡыһыҙ ҙа иҫ киткес һоҡланғыс булыуын аңланы", тине Әлфир һүҙ барышында. Әлбиттә, ул ағай өсөн ҡыуанырға ғына кәрәк, ләкин ошоно ул алдараҡ аңлаһа, әллә күпме таңдары матурыраҡ, уҙған көндәре һәм башҡарған эштәре мәғәнәлерәк булыр ине. Бөгөнгө әңгәмәселәрем иһә был хәҡиҡәтте бик иртә төшөнөүҙәре менән бәхетлеләр.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА**
**әңгәмәләште.**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ ИР-ЕГЕТ

**"Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ята" тигән әйтемгә миҫал эҙләп донъя ҡыҙырырға кәрәкмәй - ундайҙар ауыл-ҡала һайын. Ә шулай ҙа... Күңелендә бер түгел, әллә нисәмә эйәр-өпсөнлө ат ятҡан ир-аҙаматтар һәр кемгә осрағаны барҙыр. Ундайҙарға ҡарап, ҡулынан килмәгән эше юҡ, тип, аптырап, һоҡланып ҡуяһың. Бындай ирҙәр, беренсенән, оҙайлы ваҡыт арауығында ҡалыплашырға өлгөргән ҡайһы бер ҡағиҙә-нормаларҙы ла инҡар итмәй, икенсенән, тормоштағы күп кенә проблемаларҙы хәл итеүҙең үҙ юлдарын да таба белә. Бөгөн беҙ уҡыусыларыбыҙҙы был донъяға үҙенсәлекле ҡарашы булған, матди яҡтан да, рухи яҡтан да бай шәхес тип аталырға хаҡлы оҫта ҡуллы, йор һүҙле ир-азамат менән таныштырабыҙ. Мәсетле районының Дыуан-Мәсетле ауылында тыуып үҫеп, шул ауылда балалар үҫтереп, матур итеп донъя көтөүсе Родион МОРТАЗИН атлы булыр ул. Һүҙ - етмеш һөнәрле ҡунағыбыҙға:**



# ЙӨРӘГЕҢДЕ ТЫҢЛА...

## тормош сере - йөрәктә

### Беренсе уңышың - икенсеһенә арҡа һөйәге...

Әй йылғаһы буйында урынлашҡан йортобоҙҙа ҡатыным менән дүрт балаға ғүмер бирҙек, балаларыбыҙ әле мәктәптә уҡый, тик бишле билдәләренә генә өлгәшеп, беҙҙе ҡыуандыра. Һөнәрем буйынса технология уҡытыусыһымын. Әйткәндәй, районыбыҙҙа үткән "Йыл уҡытыусыһы" бәйгеһендә ҡатнашып, тәүге урындар яулағаным да булды. Ғаиләмдән дә, һөнәремдән дә уңдым, тип әйтә алам. Ағас семәрләү, төрлө һын-фигуралар, йорт кәрәк-яраҡтары яһау, һүрәттәр төшөрөү өсөн "кесәгә төшөргә" тура килмәүе лә яҡшы бит ирмен тигән иргә. Әйткәндәй, беҙҙе Рәсәйҙән ситтә лә беләләр. Өс тапҡыр Германияға саҡырып, семәрле әкиәт майҙансыҡтары эшләтеп алдылар. Яратҡан эшемдән ҡәнәғәтлек тәмен бер татып ҡараһаң, үҙенә яңынан-яңы һөнәрҙәр өҫтәге килә лә тора икән ул.

### Күңелгә ниҙер етмәгәндә...

Эйе, күңел болоҡһоп торғанда яңы бер шөғөл үҙләштерергә тотонам.

Бына, мәҫәлән, музыка донъяһы менән ҡыҙыҡһына башланым бер мәл. Тәүҙә гитарала уйнарға өйрәндем, аҙаҡ баян, гармун "тысҡылдата" башланым. Кеше тәүҙә күңел аҙығын башҡаларҙың хеҙмәт емешенән алһа, аҙаҡ бындай "еңел" емештән ялҡа һәм ижад итеү теләге менән яна башлай икән. Минең менән дә шулай булды. Шиғырҙы электән яҙа инем инде, әле килеп, музыка ҡоралдарын да үҙ иттем. Егет кешенең ҡулынан килмәгән һөнәре юҡ, тиеүҙәре хаҡтыр, моғайын. Шулай ҙа, алда күңелдә ҡытыҡлап торған бер хыялым бар ине әле - ул да булһа, матур бер көй яҙып ҡарау. Тәүҙә әллә ни уңышлы килеп сыҡманы көйҙәр. Йөрөй-йөрөй, бер мәл был әтнәкәне лә килтереп сығарҙым бит тәкем! Әлбиттә, үҙемдә профессиональ композиторҙар менән сағыштырырға йыйынмайым, әммә был һәләтемде 40 йәштәр тирәһендә генә асһам да, көй яҙыуҙы әлеге көндә күңелемә иң ҙур йыуаныс килтергән һөнәрем тип әйтә алам.

### Көй нисек тыуа?

Яҙыласаҡ йырҙарымды кемдер йырлап йәки көйләп ултырған көүек итеп, төштә күрәм, гәҙәттә. Шунда уҡ, йәғни төшөмдә уҡ, был йыр киң таралыу табырмы, ундай йыр эстрадала юҡмы, тигән һорауҙар пәйҙә була. Уянып, теге көйҙө диктофонға тиҙ генә теркәй һалам да, гәҙәттә, ике-өс сәғәт эсендә һүҙҙәре лә күңелгә килә. Шулай көтмәгәндә йыр тыуа. Ҡайһы бер йырҙарымды яҙа алмайынса, бер-нисә көн күңелемдә алып йөрөтәм, әлбиттә, шулай ҙа була. Етмешкә яҡын йырым башҡорт эстрадаһының популяр башҡарыусылары - Хәсән Усманов, Искәндәр Ғәзизов, Әлим Ҡәйүмов, Венера Юлгилдира, Илсур Тайсин һәм башҡалар репертуарына ингән. Йырсыларға йырҙарымды бүләк итәм, ул ғына ла түгел, оранжировкалар эшләтеп биреүҙе лә гәҙәт итеп алғанмын. Оранжировка эшләтеү өсөн матди сығымдар талап ителә, ҡайһы бер йәш йырсыларҙың бындай мөмкинлеге лә юҡ бит. Шуға, уларға ярҙам итеүҙән дә күңелемә йәм табам.

### Аҡса эше менән йән эше - икеһе ике нәмә

Әйткәндәй, үҙемдә бер ҙә тығыҙ графиклы кешемен, тип әйтмәҫ инем: ирекле кеше мин. Эшемдә дөрөҫ ойоштороуым арҡаһында шәхси эшҡыуарлыкты ла еңел алып барам - ауылыбыҙҙа бер-нисә бәләкәй сауҙа нөктәбеҙ бар. Ғаиләм аҡсаға мохтажлыҡ кисергәне юҡ. Ижад итергә лә ваҡытым ҡала, тәбиғәттә ял итергә лә ялатам. Дөрөҫөн генә әйткәндә, эшҡыуарлыҡ эше минең өсөн әллә ни ҡыҙыҡ түгел. Аҡса эше менән йән эшен бутарға ярамайҙыр, тигән фекерҙәмен. Ошо сикте танырға теләмәгән кешеләр был донъяны бутай, күптәргә дөрөҫ булмаған өлгө күрһәтә. Һәр кем йөрәге ҡушҡан эште генә эшләргә, эске саҡырыуға ҡолаҡ һалырға һәм үҙенең ижади һәләттәрен асып, күңелен байытып йәшәргә тырышырға тейеш, тигән һығымтаға киләм. Кешенең шул тиклем үҙенсәлекле, киң мөмкинлектәргә эйә зат булыуының сәбәбе ниҙә икән? Донъяла ете миллиард кеше иҫәпләнә икән, һәр кем үҙ өлкәһендә оҫта, һәр кемдең үҙе генә белгән һөнәри сере була һәм һәр кеше үҙ һөнәренән үҙенсә файҙа күрә. Кем иһә үҙ һөнәре менән сикләнергә теләмәй, башҡа һөнәрҙәрҙә лә оҫталыҡҡа өлгәшергә ынтыла, йәне теләгән - йылан ите ашаған, тиеүҙән башҡа сара юҡ.

### Ижади көс артһын, тиһәгеҙ...

Кеше ситтәр тарафынан көсләп таҡылған идеялар, ҡалыплаштырылған йәшәү моделдәре ҡолона әйләнеүҙән һаҡланырға тейеш. Әлеге заманда ирҙәрҙе күптәр телевизорға текәлеп, ваҡытын бушҡа уҙғарыусы, өҫтәүенә, аҙ хәрәкәтләнеүсе зат итеп күҙ алдына килтерә. Сөнки күбебеҙ, ысынлап та, килем сығанағы булған төп эшенән арып ҡайтҡас, телевизор, компьютер артында ял итергә өйрәнгән. Тик "ял" тигәнебеҙҙең нисек итеп ижади көсөбөҙҙө һурыуын ғына тоймайбыҙ. Шуны тойорға һәм ялды сикләргә өйрәнергә кәрәк. Бында иһә "Хәрәкәттә - бәрәкәт" тигән халҡыбыҙҙың тапҡыр аҡылын иҫкә төшөрөү ҙә етә.

### Донъяла барыһы ла талантлы...

Был донъяға килгән һәр кемдең үҙенә генә тәғәйен миссияһы бар. Шуға ла, бер кем дә кемдәндер өҫтөн дә, кәм дә түгел, йән кимәлендә барыһы ла бер тигеҙ, әммә айырма бары шунда - һәр кем үҙ маҡсаты, үҙ бурысы менән тыуа. Миҫал өсөн, әйтәйек, ил башлыҡтары, юғары дәрәжә биләгән эшмәкәрҙәр, беҙ "бөйөк" тип белгән башҡа кешеләрҙең дә, ысынында, башҡаларҙан өҫтөнлөгө юҡ, тик үҙенсәлеге йәнәтенән саҡ ҡына икенсерәк бурыс йөкмәтелеп тыуыуҙары менән генә бөтән кешеләрҙән айырыла. Ғөмүмән, был донъяла һәр кем уникаль һәм һәләтле. Күптәр үҙҙәренең нимәгә һәләтле икәнлектәрен генә ғүмер буйы белмәй йәшәй.

### Тормоштоң серен таптым

Әле әйтелгәндәр тураһында уйланғандан һуң, үҙемдә был тормоштоң серҙәренә төшөнә башлағанмын һымаҡ тоям. Быларҙы аңлау өсөн миңә нимәләр аша үтергә кәрәк булды? Аныҡ ҡына итеп әйтеүе ауырыраҡтыр, бәлки, унан бигерәк, ҡайһы бер һығымталарҙы ҡабул итеүе лә ҡыйынлыҡ тыуҙырыр, шулай ҙа тормоштоң серҙәрен эҙләгән ваҡытта йөрәкте тыңлау кәрәк. Мин үҙем шулай итәм. Сөнки беҙ күпселек осраҡта был серҙе ситтән эҙләйбеҙ, барыһы ла беҙҙең үҙебеҙгә йәшерелгән икәнен белмәйбеҙ. Йөрәгеңә, күңелеңә иғтибар итһән, ирекһеҙҙән үҙеңдә был донъяның, Алланың бер өлөшө итеп тояһың. Кеше үҙе Алла түгелме икән, тигән уй ҙа килә башҡа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормоштоң серен йөрәктән эҙләргә саҡыра бөгөнгө ҡунағыбыҙ. Һәр кемдең был донъяла үҙ маҡсаты була, тигән фекере менән дә уртаҡлаша ул. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт, беҙ дөрөҫ йәшәйбеҙме икән?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЙӘШӘЙЕШ АҠЫЛЫ...

## инәйҙәрҙә, бабайҙарҙа икән

**Хәүефле, ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ, тибеҙ. "Йәшәү ҡиблабыҙ ҡайҙа, нисек юғалмаҫҡа, ҡайҙа беҙҙең рухи байраҡ булыр шәхестәребеҙ?" тип уфтанабыҙ бер туктауһыҙ. Баҡтиһәң, ошо моңһоҙ заман заңын ябай һүҙҙәр менән аңлатып биргән, күптәребеҙгә рухи шәм булырҙай заттарыбыҙ беҙҙең арала икән дә. Уларҙы тыңлай, нәсихәттәренә ҡолаҡ һала белергә генә кәрәк икән.**

Ошондай һығымтаға килдем яныраҡ Йылайыр районында бер аят ашында булғандан һуң. Ҡара ялтыр ситектәр кейгән, аҡ яулыҡлы инәйҙәр менән күрешеү үҙе бер күңел байрамы булһа, аят уҡыусы олатай менән аралашыу йән тантанаһына әүерелдә. Йөҙө бигерәк тә таныш күренгәйне ул олатайҙың, һуңынан белеүемсә, элегерәк "Киске Өфө" гәзите биттәрендә уның менән әңгәмә баҫылған булған икән. Йылайыр районы Ҡәҙерша ауылынан Нуретдин олатай Игебаев булып сыҡты ул ("Киске Өфө"нөң 36-сы һанында ла уның менән әңгәмәне уҡып ҡыуандыҡ, күп фәһем-аҡыл алдыҡ). Ҡайһы бер дин әһелдәре һин биргән һорауға яуапты "Ҡөрьәндә шулай тип яҙылған", тип сикләһә, Нуретдин олатай Ҡөрьән һүҙен, хәҙистәрҙе үҙенең аҡылы, үҙенең һығымталары менән төплө итеп йөпләй, беҙҙең тормошҡа, заманға бәйләй. Аҡыл өйрәтмәй ул, кинәйә, ишара менән күңелдә ҡуҙғытып, һендергәнсе генә әйтеп ҡуя.

Һуңынан Нуретдин олатай мәсеткә тәрәүих намаҙына китте. Беҙ инәйҙәр менән ҡалдыҡ. Аят ашы үткәргән әхирәтемдең ваҡытһыҙ вафат булып ҡалған ағаһы өсөн өҙгөләнеүенә ҡарап, аҡ йөҙлө һөйкөмлө бер инәй һүҙ башланы:

- Аша уйла, балам, аша уйла. Аҙарыңма, өҙгөләнмә. Балаларың, ирең, донъяң бар, шуларҙы хәстәрлә. Ғүмер итеү еңел түгел, ағын, ҡараһын, донъяның әшрәкһәтләрен... төшөрөгөн үткәрә белегеҙ. Баҫыла белергә кәрәк, балалар. Заманы ла ауыр бит, ана. Бәгзе ир-егеттәребеҙ ҙә юғалып ҡалды. Беҙ юғалып ҡалмайыҡ. Бәндәбикә, Аһылбикәләр аҡылын тотайыҡ. Ошо ваҡытта ирҙәребеҙгә терәк булайыҡ, унан китә ул улар яҙылып. Беҙҙең башҡорт ирҙәре көүек ир-ат бер халыҡта ла юҡ. Батыр, таһыл, һәре, сабыр бит улар. Әле бына әҙ генә күңел тыныслығын юғалтып торалар. Беҙ уларға ярҙам итеп ебәрәйек. Аша уйлайыҡ, бушалғайымға йөрәкһенмәйек, - тине.

Инәйҙең был һүҙҙәрен рухташтарыма, ҡатын-ҡыҙҙарға "Киске Өфө" гәзите аша еткерә һалайым, тип ашыҡтым...

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

***✓ Боролоп ҡараһам, йән-фарман сабып Аҡсай килә. Шатлығынан сыйылдай, бер туҡтауһыҙ ҡойроғон болғай, аяҡтары һыу, батҡаҡ тип тормай, тәпәйҙәре менән күкрәккә баҫып, битте ялар өсөн өҫкә һикерә башланы.***



Кемгә нисектер, әммә миңә үҙ ғүмерем осоронда алған бөтә бүләктәргә ҡарағанда быныһы иң ҡәҙерлеһе булды. Уны алған ваҡытымда бик ҡыуанғайным. Ул тойғоно кисергәнгә инде ике тиҫтә йыл үтеп барһа ла күңелем төбөндә иң ҡәҙерле хәтирә итеп һаҡлайым.

Көҙ аҙағы ине. Ергә ҡырпаҡ ҡар төшкән. Көндәрҙән бер көн, октябрь байрамы алдынан, улым, ҡыҙым һәм кейәүем Өфөнән ҡунаҡҡа килеп төштөләр. Йүгереп сығып ҡаршы алдыҡ. Сумкалар, ҡатырға ҡумта, тағы әллә ниндәй ваҡ әйберҙәр индереп, иҙәнгә ҡуйҙылар. Ҡунаҡтарҙы ҡаршылап, ул-был иткән арала күстәнәскә тигән әйберҙәр араһынан ниндәйҙер сәйер тауыш ишетелгәндәй булды. Тора-бара сәйер тауыш сыйылдауға, унан һулҡылдауға күсте. Шул ваҡыт ҡатырға ҡумтаны астылар ҙа, эсенән ап-аҡ, күҙҙәре ҡап-ҡара бәләкәй генә көсөктө сығарып: "Бына, атай, һиңә тыуған көнөңә", - тип ҡулыма тотторҙолар.

Йоп-йомшаҡ йән эйәһен яҡтыға тотоп ҡарағас, көсөктөң урам алабайы түгеллегенә төшөндөм. Бармаҡ йөҙөндәй генә ҡолағы теп-текә үрә торған. Ә күҙҙәре... Эре ҡара ҡарағаттай ике күҙе туп-тура миңә ҡарап тора. Аҡ йомғаҡ ҡулымдан төшөргә тулай башлағас, иҙәнгә ҡуйҙым. Шыуғаҡ ҡаты иҙән өҫтөндә ул үҙенең ҡайҙа булыуын белергә теләп, ян-яҡҡа башын борғолап еҫкәнде. Үҙе шым ғына һулҡылдап сыйылдай, әммә атлап китергә һаман да баҙнат итмәй. Өйҙәгеләрҙең барыһының да күҙе көсөктә. Бына ул яҡтан еренән торҙо. Тәмле еҫ килгән аш бүлмәһе яғына башын һоноп, сыйылдау аша өрөп тә ебәрҙе. Өйҙәге барлыҡ балалар уны эләкләп, көсөккә ҡушылып өрөргә керештеләр. Ул дүрт аяғына баҫҡас та уң яҡ һыртына тәгәрмәс кеүек бөгәрләнгән бәләкәй генә ҡойроғона, төлкө тәпәйҙәренә оҡшаған алғы аяҡтарына, етдилеген раҫлап алға табан ҡарап торған текә ҡолағына, йәтеш кәүҙәһенә ҡарап, Себер өрәгәсе - лайка тоҡомло көсөк икәнен аңланым. Ул сама менән бер ярым - иң күбеһе ике ай тулыр-тулмаҫ йәштә. Уның сыйылдауы асығыуы һөҙөмтәһе икәнен аңлап, үҙҙәре көсөк кеүек кенә ейәндәрем уға төрлө аҙыҡ тәҡдим итә башланы. Кемдер кәнфит, кемдер алма, кемдер печенье бирә. Ләкин ул был аҙыҡтарҙы үҙ ғүмерендә еҫкәп тә ҡарағаны булмағас, тәғәмдәрҙән башын ситкә бора. Көсөккә һөт ҡойғас, уның өҫтөн әҙ генә еҫкәне лә, бәләкәс кенә теле менән супылдатып эсә башланы. Тимәк, еҫкә бик һиҙгер булаcаҡ, тип үҙемсә һығымта сығарам.

Беҙҙең башҡортта эт ҙурмы, бәләкәйме булыуға ҡарамаҫтан, уны өйҙә тотоу ғөрөфкә яуап бирмәһә лә, ғаиләне ауырлыҡ менән ризалаштырып, көсөккә бер мөйөшкә ҡатырға ҡумтанан йылы итеп өй эшләп бирҙем. Ейәндәрем был мәсьәләне хәл итергә ҙур ярҙам күрһәтмәһә, ул тышта, һыйыр бүлмәһендә урын алыр ине. Ҡапыл минең башыма ҡайҙандыр уға исем дә килде. "Аҡсай, Аҡсай" тип хатта ҡысҡырып ебәрҙем. Был исем бөтәбеҙгә лә оҡшаны. Йомшаҡ ҡына ап-аҡ мамыҡҡа төрөнгән аҡ көсөк шул көндән "Аҡсай" исемен алды.

Яҙға тиклем ул үҙенең ҡатырға ҡумтаһында йәшәһә лә, өй башынан тамсылар тама башлағас, Аҡсайҙы ҡапҡа эсенә сығара башланым. Беҙ иртә менән эшкә китәбеҙ, ул өйҙә ҡала. Төшкөлөккә кем өйгә алдан ҡайта, уны тышҡа сығара. Унда Аҡсай ҡойма аша үрмәләп килеп ингән күрше бесәйҙәрен баҫтыра. Ағас ботаҡтарына ҡунған турғайҙарға өрә. Ә тегеләре элек күренмәгән был мәхлүктең ҡайҙан килеп сығыуына аптырап, үҙ-ара сипылдашалар ҙа сипылдашалар. Бигерәк тә уға ҡаршылағы тауҙа ҡайынлыҡ араһында оя ҡора башлаған һайыҫҡандың ризаһыҙлығы ҙур. Көн һайын килә лә, йә һарай, йә мунса ҡыйығына ҡунып, Аҡсайға ҡарап шыҡырлай ҙа шыҡырлай. Аҡсай ҙа буш ҡалмай. Һайыҫҡанға ҡаршы ултырып ала ла сәңкелдәй ҙә сәңкелдәй тегегә. Ахырҙа, һайыҫҡан ялҡа, буғай. Осоп китә. Бер көндө ул күршенең йәш бесәйен баҫтырып, алма ағасына мендергән. Кискә тиклем тегене ҡарауыллаған, төшөрмәгән. Ағас төбөнә ултырып сәңкелдәгән дә сәңкелдәгән. Ахырҙа, хужаһы килеп, бесәйен ҡотҡарып алып ҡайтҡан. Аҡсайҙы бигерәк тә ҡапҡа эсендә үҙен тик ул ғына хужа итеп тотҡан ҙур божор әтәс яратманы. Тауыҡтары менән һарай алдында ҡуҡырайып йөрөгән әтәс, көсөктөң ҡапыл күтәрмә өҫтөнән һикереп төшөүен күреү менән башын аҫҡа эйеп, ҡанаттарын һалбырата биреп йүгереп килеп уға ташлана. Тәүге һөжүмгә Аҡсай ҡаршы тора алманы. Үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа күрмәгән был ҡуҡырай дошмандан суҡылыу менән, сай ҙа сой килеп, күтәрмә аҫты тишегенә инеп китте. Әтәс маҡтанып, ҡуҡырайып, атаҡ та атаҡ та булып тауыҡтары янына киткәс тә әле, Аҡсай йәшенгән урынынан сыҡмай, байтаҡ ултырҙы. Көндәр йылынғас, Аҡсайҙың өйгә ингеһе килмәй башланы. Күтәрмә аҫтын үҙ итте. Ҡатырға өйөн шунда сығарып ҡуйғас, бигерәк иркенләне. Ҡапҡа эсендә йөрөр өсөн ул иң алда солан аҫты тишегенән башын ғына сығарып, "Божорҙо" ҡарай. Божор сүплектә йә малтыуар араһында йөрөһә, сыҡмай. Алғы аяҡтарына башын һалып күкрәгенә һөйәлеп ята ла Божорҙоң һарай эсенә инеүен көтә. Әммә уның Божорҙан ҡурҡып, артҡа аттар янына сабып сығыуы көн һайын уңышлы үтмәй. Божор уны йә һарай ҡапҡаһы аша, йә мөйөш арьяғынан күреп ҡала ла, ҡанаттарын төшөрөп, Аҡсай артынан төшә. Ҡыуып етә алһа өҫтөнә һикерә, типкесләй, суҡый. Ҡобараһы осҡан Аҡсай сайылдап-сайылдап йә кире солан аҫтына, йә аттарҙың аяҡ аҫтына кереп ҡотола. Божор аттарға яҡын уҡ бармай. Ә Аҡсай аттарҙы үҙенең яҡлаусыһы итеп белә.




Бигерәк тә ул Ҡарағош исемле атымды, уның инәһен Зинка ҡушаматлы оло бейәне ярата. Ниңәлер, ул һыйыр-һарыҡтарға бик үк һырығып бармай. Ә Ҡарағош менән Зинканың аҫтында уҡ йөрөй, аяҡ бәкәлдәрен ялап-ялап ала. Аттар уны тибеп осормай.

Яҙ етеп, шаулы ташҡын ташты. Малайҙар эшләп элгән ояларға сыйырсыҡтар ҡунды. Малдар тау битләүҙәренә сыҡты. Аҡсай ҙа Ҡарағош менән Зинка артынан ҡалмай. Көнө буйы улар менән ҡырҙа йөрөй. Сысҡан, йомран ояларын ҡаҙып маташа. Әммә дәрте булһа ла, дарманы юҡ. Сөнки тырнаҡтары үҫеп, ҡатып өлгөрмәгән, ҡанап интектерә. Ҡау үләнен ашап туйғас, аттар арҡаларын ҡояшҡа ҡуйып торған килеш юшай. Аҡсай ҙа шул тирәлә үлән араһына һуҙылып ятып йоҡлай. Йылҡы малында һәр көн ҡайтыу ғәҙәте булмаһа ла, Ҡарағош менән Зинка, кис булдымы, өйгә ашыға. Иң алда ҡойроғон тәгәрмәсләндереп Аҡсай юрта. Ул асыҡҡан. Уның артынан һуҡмаҡҡа лап та лоп баҫып ерән Зинка бара. Ә иң артта Ҡарағош атлай. Зинка менән Ҡарағош ҡайтмаҫ та ине - уларҙы тәмле һоло көтә.

Ҡайтҡас, эсе күптәйгәнсе Аҡсай ҙа ашай. Туйһа ла, бутҡа тәгәсен таҙартҡансы ялай. Унан һуң ҡойроғон төшөрә биреп, Божорға ла иғтибар итмәй, аттар янына сыға. Сыға ла, аттарға төңгөлөккә һалынған бесән аҫтына, уҫтыҡҡа кереп ята. Шулай йәй үтте. Аҡсай үҫте. Көҙгә, август айына, ун бер айлыҡ булды. Божор менән Аҡсай араһындағы мөнәсәбәт тә уның файҙаһына үҙгәрҙе. Уға һигеҙ ай тулды тигәндә, Божорҙоң нәүбәттәге һөжүме уның өсөн бик уңышһыҙ булды. Аҡсай, Божорҙоң һөжүменә яуап итеп, уның типке аяғын, ҡанатын, муйынын тешләп, йөндәрен туҙҙырҙы. Ҡото осҡан Божор, атаҡ та атаҡ итеп, һарай эсенә ҡасып ҡотолдо. Башҡаса ул Аҡсайға һөжүм итергә баҙнат итмәне. Уны күрһә, башын күтәреп, тауыҡтарына ҡушылып ҡытҡылдап, уны ҡарашы менән генә оҙатыр булды.

Август урталары, бесән осоро етте. Меңъяпраҡ, клевер-туҡранбаш, аҡтамыр, төлкө ҡойроғо сәскә атты, беште, һоло тәлгәшләнеп һөтлө булып баш ҡоҫто. Аттарҙың береһен егеп, икенсеһен эйәртеп, бесән күбәләргә йөрөйөм. Артыҡ ҡабаланмай, ат тартырлыҡ итеп, көн һайын 12, хатта 15 күбә өйәм. Аттар рәхәтләнеп туғайҙа ашай, эҫелә ағас аҫтында күләгәлә ял итә. Аҡсай ҙа беҙҙең менән бесәнгә йөрөй. Бесәнлек бер йылда ла ҡоромай торған ике йылға шырлығы уртаһында урынлашҡан. Йылға башы, күп шишмәлектәрҙе ҡушып, шырлыҡ эсендә ҙур батҡыл яһай. Унда түбәлектәр, ваҡ ҡарағайлыҡ - теркелек бар. Шырлыҡ эсен элек-электән төрлө ҡыр хайуандары үҙ итте. Йәй көндәре мышы, ҡыр кәзәләре, ҡабан да керә. Ял итәләр. Хатта даими йәшәүсегә лә әйләнәләр. Шырлыҡ ситендә - селдәр, теркелек араһында һуйырҙар оя ҡора.

Күбәләр өйөлөп бөткәс, уларҙы эҫкерткә һалышырға улым ҡайтты. Бесәнгә бишәүләп йөрөй башланыҡ. Ике ат, Аҡсай һәм беҙ. Һуңғы кәбәнде өйгәс, ял иттек. Һәр төрлө тормош ҡытыршаларын һөйләшеп, оҙаҡ ултырҙыҡ. Ҡояш Оло Урал армытына һәлпәйә биреп, "Уй таш" тауының ҡаялары өҫтөнә килеп менде. Көн кискә ауышты. Аҡсай беҙгә иғтибар итмәй. Шырлыҡ эсенә кереп йә селдәрҙе осора, йә һыуға төшкән ҡыр кәзәләрен саңҡылдап өрөп Түсәй тауына баҫтырып алып китә. Ҡайҙалыр һыу булып, балсыҡҡа буялып, телен һәлберәтеп оҙаҡ йөрөп килә. Унан һуң ҡойроғон бер туҡтауһыҙ болғап, йылы ғына йомшаҡ теле менән битте, ҡулды ялай. Әйтерһең дә, бөтә ҡиәфәте, уйы "Ҡурҡмағыҙ, мин уларҙы йыраҡҡа ҡыуҙым, хәҙер килмәҫтәр", тигән кеүек.

Августың был көндәрендә ун биш көнгә ҡош-ҡортҡа һунар асылды. Ҡайтыр алдынан сел йәки ҡор атып алырға ниәтләндек. Аҡсайға ла һынау булыр. Үлән араһына төшкән ҡошто табып бирер. Шулай уйланыҡ та, улым шырлыҡтың төньяғында ситтәрәк үҫкән ҡарағай аҫтына ултырырға ҡарар итте. Ә мин ҡуйылыҡты урап, ҡаршы яғынан инәм. Улым Аҡсайҙы бәйләп, үҙе менән алып китте. Сөнки мылтыҡ уның ҡулында. Ә мин ағастарға һуғып, еңел генә тауыш бирер өсөн метр ярымлыҡ таяҡ ослап, ҡулға тотоп алдым. Ҡуйылыҡ эсенән минән ҡурҡып осҡан ҡор, һуйыр нәҡ тә улым ултырған ҡарағайҙар өҫтөнән осоп үтергә тейеш. Иҫәп шулай. Атып төшөрһә, бер ҡаҙан һурпа була. Осоп, ситкәрәк төшһә, Аҡсайға эш. Ул табып бирә. Шырлыҡты урап, арьяғына сыҡҡайным инде. Ҡапыл әле генә мин сыҡҡан кисеүҙә һыу шапылдағандай булғанға боролоп ҡараһам, йән-фарман сабып Аҡсай килә. Минең янға килеп еткәс, шатлығынан сыйылдай, бер туҡтауһыҙ ҡойроғон болғай, аяҡтары һыу, батҡаҡ тип тормай, тәпәйҙәре менән күкрәккә баҫып, битте ялар өсөн өҫкә һикерә башланы. Шулай уның менән иркәләшеп, шырлыҡ ситенә килеп еттек. Ҡапыл ул шаярыуҙан туҡтаны. Етдиләнде. Башын күтәреп, шырлыҡ яғын еҫкәне лә, сабып эскә кереп китте.

Күп тә үтмәне, минән уңдараҡ эстә саңҡылдап-саңҡылдап өрә лә башланы. Тәүге уйым шул булды: терпе тапҡандыр, шуның менән булышалыр. Әммә тауышы бер урында түгел. Йомарланған терпегә бер урында ғына өрөр ине. Ә был йә ары, йә бире китеп өрә. Ниндәйҙер йән эйәһен абалағандай ҙа тойола. Ҡыр кәзәһе булһа, күптән сығып ҡасыр ине. Ә абалау, саңҡылдау бер туҡтауһыҙ ян-яҡҡа китеп дауам итә. Әммә өрөү тауышы йыраҡ китмәй. Шул тирәлә өйөрөлә лә сөйөрөлә. Енот йыраҡ ҡаса алмай. Әллә шуны табып абалаймы икән, тип тә уйлайым. Улай тиһәң, енот бит, өҫтөнә үлемесле ҡурҡыныс баҫты икән, үлгән булып ята ла һис ҡыбырламай. Хатта тын алышы ла һиҙелмәй. Йән эйәһенең тәбиғәтендәге ғәжәйеп күренеш был. Енот та түгел был, тип уйлайым. Ул булһа, өрөү майҙаны бәләкәй булыр ине. Әллә һеләүһенме икән? Ә ул һаҙҙа, шырлыҡта ни эшләп йөрөй? Ғәжәп түгел. Ҡоралай бәрәсен йә ҡуян һағалап йөрөгәндер. Төрлөһөн уйлайым. Әммә әле урынымда тик торам. Эскә инһәм, Аҡсай абалаған йәнлекте ҡурҡытып ҡасырырмын да, уны мәхрүм итермен, тип уйлайым. Әйҙә, күрһен. Әйҙә, өйрәнһен...Тора биргәс, ҡәтғи һығымтаға киләм. Аҡсайҙың йөрөп өрөүенең майҙанына ҡарап, уның ҙур йәнлекте абалағанын төшөндөм. Мышылыр был быҙауы менән, тигән ҡарарға киләм. Эт быҙауға, ә мышы эткә ташланалыр, тигән уй нығынды. Хәҙер үк быларҙы бер-береһенән айырырға кәрәк, тигән уй менән эскә, ҡуйылыҡҡа йүнәлдем.

Әстә бейек үлән, тумар. Аҡсай һаман да ары ла, бире лә ташланып өрә. Уның тауышына яҡынлағандан-яҡынлайым. Ана, алда бер төптән өс-дүрт тармаҡ булып үҫкән ҡарт өс тал күренә. Дарыуға ҡабыҡтарын һыҙырып ала торған ҡара талға оҡшай. Эт хәҙер бер урындараҡ өрә. Тағы ла тумарға һөрөлә-һөрөлә, етеһигеҙ аҙым алға, ҡара талдарға табан атлайым. Аҡсай шунда ғына, талдар аръяғында ғына өрә. Бына бейек үләндәрҙе йыра-йыра өйкөм талдарға килеп еттем. Мышы алдымда ғына торалыр, тип уйлайым. Әммә ҡара-һоро мышы күренмәй. Тағы ла ике-өс аҙым атланым да, шаҡ ҡаттым. Өйкөм ҡара талдар араһында башын эйә биреп, Аҡсайға ташланырға әҙер торған ҙур ҡара-һоро айыуҙы күрҙем. Арабыҙ ун биш, ун ете аҙым самаһы ғына. Минең килеп сығыуҙы һиҙгән айыу, иғтибарын эттән алып, башын яй ғына миңә борҙо. Әммә кәүҙәһе нисек торған, шулай ҡалды. Ҙур, йыуан, оҙон, бейек. Башы ун биш литрлыҡ ҡоромға буялған биҙрә хәтлем. Беҙ бер-беребеҙҙең күҙҙәренә текләшеп ҡарап ҡаттыҡ. Бәләкәй генә түңәрәк ут күҙҙәрендәге асыу яйлап артҡандан-арта барҙы. Мин ни эшләргә лә белмәй, торған урынымда шаҡ ҡатҡанмын. Эт уның ян-яғына сығып абалай ҙа абалай. Ҡайһы ваҡытта ул айыуҙың арт яғына сығып, ботонда һалбырап торған оҙон йөнөнән тартырға ла самалай. Шул ваҡытта айыу минән һис ҡарашын алмай ғына алғы аяғы менән эткә "бар кит" тигәндәй һелтәнә. Эт шунда уҡ һөжүм йүнәлешен үҙгәртә. Башҡа йүнәлештән һөжүм итеүенә айыу иғтибар ҙа итмәй. Уның бөтә иғтибары миндә. Күҙҙәрен минән һис алмай. Бына ул яйлап ҡына өйөм талдың аръяғынан сығып, миңә ҡарап баҫты. Әммә ике аяғына түгел, ә дүрт аяғына ла. Быныһы инде ҡурҡыныс алым. Ташланыу алымы. Дошманын ҡурҡытыр булһа, ул ике арт аяғына баҫыр ине. Эт мине күргәс, бигерәк тә дәртләнде. Асырғаланып-асырғаланып айыуҙың ян-яғынан йөнөн тартҡыларға самаланы. Хәҙер инде айыу уға бөтөнләй иғтибар итмәй. Исмаһам, һелтәнеп тә ҡуймай. Уның бөтә иғтибары миндә. Бына ул күҙҙәрен минән алмайынса, башын түбәнерәк эйҙе. Арҡа йөндәре яй ғына ҡабара башланы. Миңә ташланырға ҡарар итте был. Мин дә уны ҡалдырып, кире сығырға ҡарар иттем. Таяҡты һөңгө кеүек ике ҡуллап алға тотоп, арт менән сигенә башланым. Алғы яҡ менән артҡа. Айыуға арҡа күрһәтергә ярамай. Ул уны ҡурҡыу, ҡасыу билдәһе итеп таный ҙа, шунда уҡ ташлана. Ни тиһәң дә, уны күҙ ҡарашы тота. Көндөҙ йыртҡыстар ҡорбандарына күп осраҡта арттан йәбешә. Төндә генә уларға күҙ нурҙары кәртә була алмай.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

# САБЫРЛЫҠ ТА ҠАТЫН ЗАТЫНАНДЫР...

**Тулҡынланып торған оҙон ҡара сәсле, иҫ киткес мөләйем йөҙлө, эшлекле был ханым менән беҙ яңыраҡ Баймаҡта районның иң әүҙем ҡатын-ҡыҙҙары, ағинәйҙәре менән булған осрашыуҙа танышҡайныҡ. Байым ауылынан иң әүҙем эшләгән ағинәйебеҙ Таңһылыу Вәлиева-Ҡарасурина, тинеләр уның тураһында. Үҙе менән яҡынданыраҡ аралашыу форсаты тейгәс, Таңһылыу апайҙың Сибай педагогия училищеһын, Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлағандан һуң утыҙ ете йыл Байым мәктәбендә эшләүен, оҙаҡ йылдар уҡытыу һәм тәрбиә биреү буйынса директор урынбаҫары вазифаһын башҡарыуын белдек. Таңһылыу Әхмәтхан ҡыҙы - юғары категориялы уҡытыусы, Рәсәй Федерацияһының почетлы мәғариф хеҙмәткәре. Бөгөнгө көндә ул хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, әүҙем тормош менән йәшәй. Ун йыл инде ауылдың "Ағинәйҙәр" клубын етәкләй.**

Тормош иптәше менән дүрт бала тәрбиәләп үҫтергән, һәр береһенең юғары белемле булып, тормошта үҙ юлдарын табыуына өлгәшкән хәстәрлекле әсә, тоғро ир ҡатыны Таңһылыу Әхмәтхан ҡыҙының һәр һүҙе кинәйәле, фекерҙәре тос һәм мәғәнәле булыуын абайламау мөмкин түгел. Уның ошо һүҙҙәрен әлеге йыйында хайран ҡалып тыңланыҡ, ҡул сабып йөпләнек: "Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, берәй нимә эшләһәк, "Мин!" ти ҙә хәбәр һөйләйбеҙ. Эйе, һис шикһеҙ, ҡатын-ҡыҙҙар советтары ла, "Ағинәйҙәр" ҡоро ла эшләһен, әммә ирҙәребеҙҙе ситкә этәмәйек! Беҙ былай ҙа бала тәрбиәләүҙе лә, аҡса табыуҙы ла үҙ өҫтөбөҙгә алып, ирҙәребеҙҙе донъя көтөүҙән ситләштерәбеҙ. Элек нисек ине? Бала берәй һорау менән әсәһенә мөрәжәғәт итһә, әсәйҙәребеҙ: "Әллә, атаң ни тиер!" - тип кенә яуап ҡайтарыр ине. Ғаиләлә беренсе урында атай булды. Ҡатын ни тиклем ҡаты булмаһын, ир балаһын барыбер ҡатын-ҡыҙ холоҡло итеп тәрбиәләй, ир бала итеп тәрбиәләй алмай. "Атаһыҙ ул көтмә, әсәһеҙ ҡыҙ көтмә!" ти бит халыҡ мәҡәле лә. Тиң ғаиләлә үҫкән балалар тормошта юғалып ҡалмай, эшен дә алып бара, гөрләтеп донъяһын да көтә.

Ирҙәрҙе беҙ күтәрмәһәк, кем күтәрһен? Бер ҡараһаң, ир көтөү - урыҫсалап әйткәндә, бессрочный трудовой стаж кеүек бит ул. Уның өсөн хатта пенсия ла түләнмәй. Йәшерәк саҡта иреңдең оҡшамаған яҡтары булһа ла, бына үҙгәрер, бына үҙгәрер, тип көтөп, өмөтләнеп йәшәгән булаһың. Кәңәш һорап килгән йәштәргә, шаяртып, гел шулай тип әйтәм: "Ир менән йәшәүҙең тәүге 40 йылы ғына ауыр бит ул, һуңынан өйрәнәһең. Яртылаш һуҡыр, яртылаш һаңғырау, яртылаш телһеҙ булһаң, ир менән йәшәүҙең бер ауырлығы ла юҡ!"

Бына беҙ әле ауылда йәмәғәтселек эштәренә лә гел ирҙәрҙе йәлеп итергә тырышабыҙ. Мин, ғәҙәттә, телефондан шылтыратам да: "Ағай, шундай-шундай эштәр башҡарырға торабыҙ. Бергәләшеп, шуны атҡарып ҡуяйыҡ әле. "Бейә сабып, бәйге алмай", тигәнде ишеткәнегеҙ бар ҙа инде, беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, үҙебеҙ генә әллә ни ҡыйрата алмабыҙ, һеҙһеҙ булмай", - тип әңгәмә ҡорам. Бына шул рәүешле яңыраҡ бик матур итеп Байым ишандың көндәрен үткәреп ебәрҙек (рухы шат, халҡыбыҙға ҡарата фатихалы булһын)..."

Ә инде иң ныҡ ғәжәпләндергәне, һоҡландырғаны Таңһылыу апайҙың шиғриәте булғандыр! Беҙҙең өсөн ысын мәғәнәһендә асыш булды ул! Йор һүҙле, сәсән телле Баймаҡ шағирәһенең ижад емештәрен, түкмәй-сәсмәй, (хатта ки ҡул тейгеҙмәй), һеҙҙең иғтибарығыҙға еткерәбеҙ.

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

*Таңһылыу ВӘЛИЕВА-ҠАРАСУРИНА*

## Көрсөк һәм ҡатын

Ҡырҡта ҡатын еләк кеүек:
Һутҡа тулышҡан, бешкән,
Ә ир урта йәшкә еткәс,
Мәлһеҙ көрсөккә төшкән.

Ҡырҡ биш. Ҡатын йәнә - еләк,
Күпме күҙ һөйөп баҡҡан,
Ә ир әлеге көрсөккә
Инде биленән батҡан.

Илле. Ҡатын - ил инәһе,
Аяҡҡа баҫҡан ныҡлап,
Көрсөктән һөйрәп сығарып
Ирен алған ҡултыҡлап.

## Сабырлыҡ

Сабырлыҡ та ҡатын затынандыр:
Һыны һылыу, буйы һомғолдор,
Йөҙө тыныс, изге һәм яғымлы,
Ҡараштары уйсан, һынсылдыр.

Иңдәренә селтәр шәл һалғандыр,
Нәзәкәтле кейгән күлдәге.
Йөҙөк-беләҙеге - аҡ көмөштән,
Наҙ бөркәлер уның күҙҙәре.

Ҡара тулҡын сәсен икенән үргән,
Тәсбих тотҡан ҡулын ҡаушырған.
Хоҙайыбыҙ барса донъя ғәмен
Сабыр ҡатындарға тапшырған.

Түҙемлектең сигенә сығып ҡайсаҡ
Түңкәргәндәй булһам донъяһын,
Сабырлыҡ та тигән изге бер һын
Әсәләрсә һона ҡулдарын.

Һуңғы тамсы шул саҡ таммай ҡала,
Әмәл табыла йәшәй алырлыҡ.
Яндарымдан ғына китә күрмә,
Йәндәремде етем итә күрмә
Ҡатын мадоннаһы - Сабырлыҡ!

## Ауыл ҡатыны

Ауыл ҡатыны - ил терәге,
Унда ҡеүәт, унда - көс,
Ике ҡулы, ун бармағы-
Бар донъяға таяныс.

Етмеш һөнәр етмәй уға,
Быуыны һайын- бер һөнәр,
Ҡатын булыу- йөҙөнә тиң,
Әсә булыу - мең һөнәр.

Утҡа керер, даръя кисер
Йән һөйгән йәре өсөн,
Балаһына бәлә килһә,
Аямаҫ йәнен, көсөн.

Сая ул ауыл ҡатыны,
Шаян да, йор һүҙле лә,
Сабыр, күндәм генә түгел,
Уҫал, ғәйрәтле үҙе.

Хәстәр-ғәме, мәшәҡәте
Тыуып тора көн һайын,
Һис зарланмай йырып сыға
Ҡатын тигән комбайн.

Эшсән ул ауыл ҡатыны,
Телсән дә булып китә.
Бер көнөн зая үткәрмәй,
Гөрләтеп донъя көтә.

## Яратырға онотам

Тәүҙә йәремде яраттым
Ярһып, янып, йән атып.
Минең һөйөү икебеҙгә
Етә, ҡала ла артып.

Балаларымды яратам,
Үҙ-үҙемде онотоп.
Һөйөү-наҙым ғүмер буйы
Барһын, тием, оҙатып.

Эшемде үлеп яраттым,
Көндө төнгә ялғаным.
Яратҡанғалыр, күрәһең,
Арыманым, талманым.

Эсәр һыуымды яратам,
Яралған тупрағымды,
Дуҫтарымды, күршеләрҙе,
Имсәктәш туғанымды.

Ҡәйнештәремде яратам,
Уларҙың кәләштәрен.
Һыйырым, һарыҡтарымды,
Быҙауын, бәрәстәрен.

Барына өләш сығарам,
Бөтәһен дә яратам.
Тик үҙем - үҙекәйемде
Яратырға онотам...

## Аҡыл, хәтер...

- Сәсең оҙон да ул һинең,
Аҡыл яғың самалы...
- Етте, әйтмә шул һүҙеңде,
Инде мине тыңла әле.

Сәсем, киреһенсә, ҡыҫҡа.
Аҡылым - быуын һайын.
Аҡылдан тыуа һәр һүҙем,
Һәр бер уйлаған уйым.

Күҙҙәрем аҡыллы минең-
Күҙ йомдо хыянатҡа.
Ҡолаҡтарым да аҡыллы-
Ҡолаҡ һалмай нахаҡҡа.

Ҡулдарымдың үҙ аҡылы-
Һин таш атһаң, аш һона.
Аяҡтарым да шау аҡыл-
Арҡыры сыҡмай юлыңа.

Йөрәккәйем дау күтәрһә,
Күңелем аҡыл таба.
Тештәрем тешләнә белә,
Асыуҙы ауыҙ яба.

Бына шулай, йәнекәйем,
Аҡыл тигән күп миндә.
Үҙемдән артып ҡалғаны
Хатта һиңә лә етә.

Миңә етә йылы һүҙең,
Етә яғымлы йөҙөң.
Бар яһиллығың онотам-
Хәтерем ҡыҫҡа минең.

## Баш, муйын...

Ир - баш, ир хужа, ти мәҡәл.
Ҡатын ни бары муйын.
Ҡабырғанан әүәләнгәс,
Муйын булыуы ҡыйын.
Ҡайҙа теләй, шунда бора,
Йәнәһе, башты муйын.
Ә һуң күҙҙәр ҡайҙа баға?
Шуны белмәүе ҡыйын.
Ярай башта аҡыл булһа...
Буш баштар, гүйә, суйын.
Шундай башты йөрөтә-йөрөтә
Сейләнә елкә, муйын.
Донъя йөгөн тартҡан саҡта
Ҡамытты кейә муйын.
Ә дан тажы башҡа ҡуна.
Ғәҙеллек ҡайҙа? Ҡыйын...
Көс еткеһеҙ ҡамыттарҙы
Баштар үҙҙәре кейһен.
Ә "муйындар" муйынына
Тик затлы сылбыр элһен...

*✓ Уйлап ҡараһаң, тәбиғәттә әллә ни күҙгә салынып бармаған ошо ҡондоҙ ғаиләһе тормошо күптәргә өлгө булырлыҡ бит. Уларҙан үрнәк алып һәр ғаилә татыу була ҡалһа, был тормоштоң төрлө ығы-зығыһына бирешмәҫ инек.*

## ИНТЕРНЕТТАН



# ТӨНДӘ...

## смс яҙмайһыңмы?

■ Төндә йоҡо аралаш кеҫә телефоны менән ҡулланып, иртән был турала бөтөнләй иҫләмәүсе кешеләр көндән-көн арта. Төндә йоҡлаған саҡта смс-хәбәр ебәреүселәр һаны донъяла шул тиклем күп, ти Америка ғалимдары. Бигерәк тә эштә артыҡ тотҡарланыусылар төндә лә "бәйләнештә" булырға тырыша. Смс-хәбәр ғәҙәттә бер кем дә аңламаҫлыҡ була. Шуға ла танышығыҙҙан осраҡлы хәрефтәр йыйылмаһынан торған хәбәр алһағыҙ, аптырамағыҙ, тип иҫкәртә ғалимдар.

■ Тәм-том яратыусылар иртә ҡартая. Шәкәр буй-һынға ғына түгел, ә бит йөҙөнә лә насар тәьҫир итә. Ҡанда глюкоза ни тиклем юғарыраҡ була, беҙ шул тиклем олораҡ күренәбеҙ, тип иҫәпләй ғалимдар. Белгестәр үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, бер литрға тура килгән артыҡ һәр миллимоль шәкәр кешене визуаль рәүештә 5 айға ҙурайта. Ә шәкәр кимәле нормала булғандар күпкә йәшерәк күренә икән. Диабет менән ауырыусылар уртаса йыл ярымға олораҡ күренә. Артыҡ шәкәр тиренең һығылмалығын булдырыусы коллагендар молекулаларын бәйләй, был ошоноң менән дә бәйле булыуы ихтимал.

■ Аҡсаһы күп булған кеше насар йоҡлай, тигән лаҡап йәшәүенә ҡарамаҫтан, ғалимдар асыҡлауынса, башҡаларға ҡарағанда тап байҙар төндә яҡшыраҡ һәм ҡатыраҡ йоҡлай икән. Инглиз социологтары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 5 мең кеше ҡатнашҡан, уларҙы килемдәренә ҡарап, төркөмдәргә бүлгәндәр. Йылына 75 000 фунт стерлинг эшләүселәр барыһы ла йоҡо менән проблемалар булмауын белдергән. Эшһеҙҙәр, киреһенсә, йоҡоларының сифаты менән ҡәнәғәт түгел, улар төндә насар йоҡлай. Сауҙа, маркетинг, проектлау һәм төҙөлөш өлкәһендә эшләүселәр, шулай уҡ сәнғәт һәм мәҙәниәт өлкәһе вәкилдәре лә йоҡоһоҙлоҡ менән йыш яфалана.

■ Ғаиләлә ир-аттың ҡатынына тоғролоғо уның интеллектуаль үҫешенә бәйле - Лондондың Иҡтисад институты психологтары ошондай һығымтаға килгән. Ир ни тиклем аҡыллыраҡ, ул шул тиклем тоғро, тип иҫәпләй улар. Тикшеренеүҙең авторҙары билдәләүенсә, эволюция процесында ирҙәрҙең полигам тәбиғәте моногамия менән алышына бара. Кешелек үҫешенең бөгөнгө стадияһында бер ҡатын-ҡыҙ менән интим мөнәсәбәттәр иң оптималь модель иҫәпләнә. Бындай моногамия заман ир-атын стрестарҙан да һаҡлай. Британия ғалимдары әйтеүенсә, юғары интеллектлы ир-ат ҡына хыянат итмәй, сөнки ул бындай мөнәсәбәттәрҙең иң яҡшы вариант икәнен өҫкө аң менән аңлай.

■ Әгәр ҙә кеше даими рәүештә стресс кисерә икән, ул хис-тойғолары менән идара итеү һәләтен юғалта. Шуға ла хәүеф кимәлен түбәнәйтеү маҡсатында дарыуҙар эсеү һәм башҡа терапиялар ҡулланыу һөҙөмтә бирмәй, бында стресс сығанағын юҡ итергә кәрәк. "Кешеләр үҙенең тойғоларына йоғонто яһай ала, бының асыҡ миҫалы булып оптимистар, пессимистар тора. Тойғоларыңды контролдә тоторға өйрәнеү өсөн проблемалы предметҡа үҙеңдең ҡарашыңды үҙгәртергә кәрәк, шул саҡта тойғоларығыҙ ҙа үҙгәрәсәк", - ти Нью-Йорк университеты ғалимы Элизабет Фелпс.

## ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Бала саҡ хәтирәләрендә ҡондоҙ күп осраҡта ағас кимереп ултырған көйө һаҡланып ҡалған. Әммә үҙен яҡшылап күреп тә, хәтерләп тә булмай. Яҡыныраҡ барып ҡарайым тиһәң, ҡабаланмай ғына үҙ эше менән булышып ултырған был йәнлек, әйтерһең, ҡапыл ғына һыуға сумып юҡ була.**



# ҠОНДОҘ

Бөгөнгө мәҡәлә ҡондоҙ тураһында. Был йәнлек шуныһы менән үҙенсәлекле - элек улар беҙҙең яҡтарҙа күпләп йәшәгән. Әммә бер мәл уны матур тиреһе өсөн күпләп ҡыра башлағандар. Хатта ул 1920 йылдарҙа бөтөү кимәленә барып еткән. Ә инде 60-сы йылдарҙан башлап уны тәбиғи шарттарҙа үрсетеү тураһында ҡайғырта башлайҙар. Ситтән алып ҡайтылған был йәнлектәр Архангел, Балаҡатай, Өфө һәм Ғафури райондары йылғаларына ебәрелә. Улар тиҙ арала үрсеп китә һәм башҡа район биләмәләренә ихлас тарала башлай. Бына, әйтәйек, Бөрйәндә тәү башлап ҡондоҙ быуаһы 1986 йылда Буйлау йылғаһында осраны. Был йылға Мәҡсүт ауылынан түбәндә урынлашҡан һәм үҙ һыуҙарын Ағиҙел йылғаһына ҡоя. Әммә бөгөн ҡондоҙ үтә ныҡ үрсеп китте, буғай.

Башҡа тәбиғәт йәнлектәренән ҡондоҙ әллә ни айырылмай кеүек. Шуныһы иғтибарға лайыҡ. Кимереүселәр араһында ул иң ҙуры булып иҫәпләнә. Ололарының ауырлыҡтары егерме килограмға, ә оҙонлоғо бер метрға етеүе бик ихтимал. Борон заман улар бигерәк күп булған. Бына, әйтәйек, "Уҙаҡ-туҙаҡ - балабәшнәк ярсығы" тигән халыҡ ижадында был йәнлек тураһында ошолай тип әйтелә.

Йылға яуап биргән, ти:

*... Күктә күпме йондоҙ бар -*
*Миндә шунса ҡондоҙ бар.*

Тәбиғәттәге бар йәнлектәр кеүек үк, ҡондоҙ ҙа тырыш хайуандар исемлегенә инә. Был турала Саҡ-Суҡ бәйетендә ошолай иҫкә алына. Әйткәндәй, был бәйетте хөрмәтле гәзит уҡыусыларға уҡып сығырға тәҡдим итер инем. Был халыҡ ижады өлгөһө бик фәһемле.

*Икәү ыҙғыштыҡ тимер уҡ өсөн,*
*Әсәй ҡарғаны ерле юҡ өсөн.*
*Емдәр ташыйҙыр ҡоштар баҫыуҙан,*
*Әсәй ҡарғаны беҙҙе асыуҙан.*

*Ҡояш сыҡҡанда нур төшә күҙгә,*
*Ҡиәмәт көнһөҙ ҡауышыу юҡ беҙгә.*
*Ҡондоҙ йәнлеге һис тыныс ятмай,*
*Әсә ҡарғышы һис кире ҡайтмай.*

Ҡондоҙҙоң төп йәшәү урыны - йылға. Бушҡа ғына халыҡ, ҡарурмандың ҡәҙерҙәрен айыу менән бүре белер, ҡамышлыҡтың ҡәҙерҙәрен ҡама менән ҡондоҙ белер, тип әйтмәгәндер.

Ҡондоҙ яңғыҙ йәшәмәй, ә ғаилә менән көн күрә. Ғаилә ҡорған осорҙа бер генә иш менән ҡауыша. Инә йәнлек бер юлы биш бала табыуға һәләтле. Ғаилә атай-әсәйҙән һәм яҡынса алты-ете баланан (быйылғы һәм былтырғы) тора. Өс йәштәгеләре иһә тыуған йортон ташлап, айырым донъя көтә башлай. Донъя көтөү өсөн ҡондоҙ ғаиләһе быуа төҙөй. Быуа шул тиклем ныҡ төҙөлә, хатта уны яҙғы ташҡын да емерә алмай. Ә инде уның өҫтөнән, күперҙән үткән һымаҡ, болан да үтеп китә ала.

Быуа төҙөгәндә ҡондоҙҙар ағас ҡуллана. Бары тик теш ярҙамында ғына ҡондоҙ уны шул тиклем камил, оҫта йыға - ни тиклем оҫта булмаһын, кеше улай йыға алмайҙыр. Ә бит беҙҙең ҡулдарҙа үткер балта, көслө бысҡы уйнап тора. Берәүебеҙ быса, икенсебеҙ этә, ә өсөнсөбөҙ (иң "оҫтабыҙ") өйрәтеп тора. Ә ағасыбыҙ күп осраҡта беҙгә кәрәк яҡҡа ҡоламай ҙа ҡуя бит әле.

Сағыштырыу өсөн ошондай миҫал килтерергә була - йыуанлығы ун см булған ағасты ҡондоҙ үҙе теләгән яҡҡа (!) ун минут эсендә йыға ала икән. Шуныһы ҡыҙыҡ - ҡондоҙ быуа төҙөү өсөн күп осраҡта нәҙек ағасты һайламай. Ҡолатҡан ағасты ҡондоҙ кәрәкле оҙонлоҡта бүлеп сыға - һаман да шул теш шәп эш ҡоралы булып ҡала. Хәҙер уны ташыр кәрәк бит инде. Әммә мине башҡа нәмә аптырата - ошо ташылған ағастарҙы ул нисек итеп йылға төбөнә тура итеп ултыртып нығыта ала икән. Йылға бит һәр ваҡыт ағып тора. Ағас нисек ағып китмәй икән, уны нисек нығытып баралар икән, аптыраһың. Бер мәл быуа төҙөлөп бөтә. Ә бына йәшәү өсөн урын, өндө әйтәм, яр аҫтында айырым төҙөлә. Был өндә йоҡлау, ашау һәм ял итеү өсөн айырым бүлмәләр эшләнә. Был бүлмәләрҙә һәр ваҡыт йылы һәм таҙа. Ҡондоҙҙар көн һайын быуаны һәм өйҙәрен тикшереп торалар һәм бәләкәй генә етешһеҙлекте лә шунда уҡ бөтөрөп баралар.

Тәүге һыуыҡтар төшөү менән ҡондоҙ ғаиләһе ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә башлай. Көн һайын, дөрөҫөрәге, төн һайын, улар ағас әҙерләй. Уларҙы йығалар, бүләләр, ташыйҙар һәм быуа төбөнә урынлаштырып баралар. Ҡыш осоронда ошо ағастарҙы быуа төбөнән соҡоп алып, кимереп, тамаҡ туйҙыралар. Ҡайын, уҫаҡ һәм талдан әҙерләнгән аҙыҡтың күләме ҡайһы ваҡыт хатта 30 кубометрға хәтлем барып етә, тип иҫәпләй белгестәр. Беҙҙеңсә, яҡынса 6 машина ағас була инде.

Һәр йән эйәһенең үҙ донъяһы инде - көндәлек эштәрҙе бөтөрөп, тамаҡ туйҙырып алғас, ҡондоҙ ғаиләһе бер-береһенә һыйынып "һөйләшергә" ярата икән. Нимә тураһында һөйләшәләрҙер инде... Ата-әсәһе аҡыл өйрәтәлер инде, өлкән балалары яңы урынға күсеү тураһында уйланалыр, бәлки, ә йәштәре шаярып бер булаларҙыр инде. Ҡыҫҡаһы, ышаныслы ғаилә тормошо менән йәшәй улар.

Уйлап ҡараһаң, тәбиғәттә әллә ни күҙгә салынып бармаған ошо ҡондоҙ ғаиләһе тормошо күптәргә өлгө булырлыҡ бит. Уларҙан үрнәк алып һәр ғаилә татыу була ҡалһа, был тормоштоң төрлө ығы-зығыһына бирешмәҫ инек, тип уйлап ҡуям мин ҡайһы саҡ.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре кандидаты.**
**Бөрйән районы.**

## ЙӘШЕЛ ДАУАХАНА



# БОЛАНУТ

**Урман ҡапыл ғына бөткән ерҙә аҡлан тултырып үҫкән алһыу төҫтәге бейек үләндәрҙе хәтерләйһегеҙҙер? Был - боланут (иван-чай). "Ут" һүҙе үләнде аңлата. Йәғни болан үләне булып сыға инде.**

Бейеклеге 1,5-2 м булған был үләнде беҙҙең урмандарҙың гиганты -болан менән сағыштырыу берәүҙе лә аптыратмайҙыр. Ә бына былтыр ғына көслө янғын булған урында уның күпләп үҫеп китеүе бер аҙ ғәжәп кеүек. Баҡһаң, бында артыҡ ҙур сер ҙә юҡ. Боланут - тамырсаларҙан үрсеп китеүсән үҫемлек. Уның ер аҫтында ышаныслы һаҡланған горизонталь тамырҙары бөрөләргә бик бай була. Бына шул бөрөләрҙең һәр ҡайһыһынан яңы үҫемлек һабағы өҫкә ҡалҡып сыға ла инде. Япраҡтары алмаштилмәш урынлашҡан һәм бер аҙ тал япраҡтарына оҡшаған. Бынан тыш, ул орлоҡтары ярҙамында ла үрсей һәм тарала. Сәскә атыусы бер үҫемлек ҡырҡ меңдән ашыу орлоҡ сәсә. Ә боланут менән ҡапланған бер гектар майҙан дүрт миллиард орлоҡ бирә! Бына ни өсөн янғындарҙан һуң тәүгеләрҙән булып ҡотороп үҫеп китеүсән үҫемлектең боланут икәне аңлашыла. Уның ышығында башҡа үҫемлектәр үҫеп китеүгә уңайлы шарттар тыуа. Болануттың ҡуйы үлән япмаһы, янғындан һуң яңы ғына сығып килгән ағас үҫентеләренә үҙенсәлекле юрған булып, тәүге һыуыҡтарҙан, ә йәй эҫе ҡояштың көйҙөргөс нурҙарынан һаҡлай.

Умартасылар боланутты нектарға бай үҫемлек булараҡ белә. Ҡояшлы көндә уның сәскәләренең төбөндә йылтырап ятҡан шыйыҡса күрергә була. Был - нектар. Шуға күрә лә боланут тирәһендә бал ҡорттары һәр саҡ геүләп тора. Унан йыйылған бал үтә күренмәле, таҙа була һәм умартасылар фекеренсә, ул иң тәмлеһе лә. Көнөнә һәр умартаға унан 1-6 кг бал йыйыла.

Боланут элекке янғын булған урындарҙа ғына түгел, урман ситтәрендә лә, йылға буйҙарында ла йыш осрай. Хатта юл ситтәрендә лә ул күпләп үҫә. Бейеклеге 2000-2300 м булған тауҙарға тиклем менә ул.

Болануттың сәскәләренән һәм япраҡтарынан бешерелгән сәй ысын сәйҙән бер ҙә ҡалышмай. Элек-электән уны ҡытай сәйен алмаштырыу өсөн ҡулланғандар.

Болануттан салат. 50-100 г яңы ғына өҙөлгән боланут япраҡтары, 50 г йәшел һуған, 2 ҡалаҡ ваҡланған керән, 20 г ҡаймаҡ, 1/4 лимон, тоҙ, борос - тәменә ҡарап. Япраҡтарҙы 1-2 минутҡа ҡайнар һыуға һалып алғас, туралған һуған, керән, тоҙ һәм борос һалалар. Бөтәһен бергә бутап, өҫтөнә ҡаймаҡ һәм лимон һуты ҡойоп, табынға бирәләр.

Болануттан щи. 100 г яңы өҙөлгән боланут япрағы, 100 г кесерткән, 100 г ҡуҙғалаҡ, 200 г картуф, 10 г кишер, 40 г башлы һуған, 20 г маргарин, ярты йомортҡа, 20 г ҡаймаҡ, самалап тоҙ, борос алына. Йәшел япраҡтарҙы ҡайнап торған һыуға 1-2 минутҡа һалып алалар ҙа иләк сүмескә һалып, һыуын һарҡыталар. Шунан ваҡ ҡына итеп турап, майҙа быҡтыралар. Ҡайнар һурпаға йәки һыуға туралған картуфты, быҡтырылған япраҡтарҙы һәм ҡыҙҙырылған кишер менән һуғанды һалып, бешеп сыҡҡансы ҡайнаталар. Бешеп сығырға 10 минут ҡалғас, тоҙ һәм борос һалалар. Йомортҡа менән ҡаймаҡты өҫтәлгә ҡуйыр алдынан ғына өҫтәйҙәр.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы.**

*✓ Ваҡ-төйәк йәки кире ҡайтарып булмай торған нәмәләр өсөн бер минутығыҙҙы ла әрәм итмәгеҙ. Тормош ваҡлыҡтарынан юғарыраҡ булығыҙ - тап шул көндән үҙегеҙ лайыҡлы булған бейеклектәргә күтәрелеүҙе башлай алаһығыҙ.*



*ЭЛЕКТРОН ПОЧТАНАН*

# ЙЫЛМАЙЫП БАҠ ДОНЪЯҒА!



**Һүҙемде башлар алдынан мин һеҙҙән матур итеп тороп бер йылмайыуығыҙҙы һорайым. Әгәр ихлас күңелдән йылмайыу килеп сыҡмаһа, эстән генә лә йылмайып алырға була. Ана бит, ҡайһылай матур! Шулай итеп, һүҙем йылмайыу хаҡында булыр.**

"Донъя йылмайыуҙан башлана", тигән Тереза-Әсә. "Йылмайыу - ул сөннәт", тигән Бәйғәмбәребеҙ. Йылмайыу - саҙаҡа ла. Йырҙарҙа йырланған кеүек, кешеләргә бер йылы һүҙ һәм ысын йөрәктән йылмайыу ҙа етә. Йылы мөнәсәбәт күңелдәргә үтеп инә.

Йылмайыу - ҡояш, ул кеше йөҙөнән ҡышты ҡыуа. Бер йылы ҡараш һәм йылмайыу менән күңелдәрҙә ут яғырға була. Сабый тыуғанда уҡ йылмая белеү сифатына эйә, тиҙәр ғалимдар. Бары йылмайыу, уйын-көлкө һәм ыңғай тойғо-хистәр генә бала организмында шатлыҡ гормондары - опиаттар эшләп сығарыуға булышлыҡ итә. Хоҙай тарафынан бирелгән оло бүләк ул.

Йылмайыуҙар төрлө була: өмөтлө, оялсан, яһалма, күңелле, мыҫҡыллы, асыу ҡатыш йылмайыу, иҫкәртеүле, әҙәпле, һынсыл, тыйнаҡ, уйсан... Тик бәхетле һәм ихлас йылмайыу ғына бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Күркәм холоҡло кешеләрҙең йылмайыуы ла тәбиғи була.

Мин үҙем йәйәү йөрөргә яратам. Ҡайһы саҡ ашығып китеп барғанда ла, таныш һәм дуҫтарҙың юлдың икенсе осонан һөрәнләгән "сәләмдәре" ишетелмәйерәк ҡалһа ла, нурлы йылмайыуҙары бар донъяны балҡытып ебәрә. Көн буйы яҡшы кәйеф менән йөрөйөм. Кеше йылмая икәнтимәк, уның донъяһы түңәрәк, күңеле бөтөн. Үҙенә күрә бер күрһәткес ул йылмайыу!

Йылмайыу күңел түренән килә. Көлөү ғүмерҙе оҙайта. Рәсми булмаған халыҡ- ара йылмайыу көнө лә бар. Октябрь (ҡарасай) айының беренсе йомаһында билдәләнә ул.

Йылмайыуға бағышлап күп йырҙар, шиғырҙар ижад ителгән.

Рәшит Назарҙың йылмайыу тураһындағы шиғыры оҡшай миңә:

*Гел йылмайҙы донъя... Әсәм булып,*
*Бишегемә эйелеп йылмайҙы,*
*Тәүге аҙымымды үҙем үткәс,*
*Шатлығынан һөйөнөп йылмайҙы,*
*Ә йығылғас -*
*Күҙ йәшенә төйөлөп йылмайҙы...*
*Ул йылмайҙы ал таң булып, балҡып,*
*Моңһоу шәфәҡ булып йылмайҙы,*
*Ҡояш булып - көндөҙ,*
*Кис - ай булып,*
*Төпһөҙ күккә ҡунып йылмайҙы.*
*Алыҫ йондоҙ-хыял йылмайғанда,*
*Йылмайғанда шашып, яҙғы һыу,*
*Бөтә ғүмеремә ал нур бөркөп,*
*Йылмайғайны бер саҡ бер һылыу...*
*Селпәрәмә килһә өмөт әгәр,*
*Ярсыҡтары, сәсрәп, йылмайҙы.*
*Һөйөү һүнгәс - нәфрәт йылмайҙы,*
*Дошман көлгәс - хәсрәт йылмайҙы...*
*Балҡып торған маңлай һырым булып,*
*Бәхет йырым булып, нурға тулып,*
*Миңә донъя һаман йылмайҙы...*
*Берсә мыҫҡыл, берсә һынау менән,*
*Берсә наҙлап, берсә әсенеп*
*Ул йылмайҙы миңә, йә ап-асыҡ,*
*Йә аҫтыртын ғына, йәшереп...*
*Гел йылмайҙы... Ҡиммәт төшкәндә лә*
*Ҡайһы саҡта ошо йылмайыу, -*
*Мин бәхетле булдым,*
*Сөнки донъя*
*Ҡараманы һытып сырайын,*
*Донъя миңә гел йылмайып баҡты...*

Беҙ ҙә ҡәҙерле кешеләребеҙгә Хоҙай бүләгенән өлөштө йәлләмәйек!

Йылмайыу өсөн байрам көндәре генә кәрәкмәй. Донъялыҡтағы бөтә көндәрҙе лә үҙебеҙ үк нурға күмәйек, йылмайыуыбыҙ менән!

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Ошо хатты редакцияның электрон почтаһына кемдер бер уҡыусыбыҙ ебәргән дә, аҫтына үҙенең исем-шәрифен яҙырға онотҡан. Ә бындай хәл йыш ҡабатлана: почтабыҙҙа исем-шәрифһеҙ матур ғына байтаҡ хаттар ята. Зинһар, электрон почтаға ебәргәндә, мәҡәләләрегеҙ аҫтына имза ҡуйырға онотмағыҙ, йәме.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# КИЛДЕМ. КҮРҘЕМ. ЕҢДЕМ



## Күләгәнең үҙ урыны

*Икенсе ролдәрҙе башҡарғанда үҙегеҙҙе буласаҡ лидер итеп күрһәтергә тырышмағыҙ. Етәксегеҙҙең ҡеүәте һеҙҙекенә ҡарағанда түбәнерәк булғанда - бигерәк тә. Етәксегеҙҙе алға үткәреп, уның артында ҡалығыҙ, "Аллаһ күләгәһе" булығыҙ.*

Рәсәйҙең бөйөк реформаторы Петр Столыпин 1906 йылда беренсе рус революцияһының иң ҡыҙған ваҡытында үҙенә анархияға һәм террорға батҡан империяны тынысландырыу йөгөн алып, хөкүмәт рәйесе булып китә. Биш йыл премьер булып эшләү дәүерендә ул хәрби-ялан суды һәм каторга ярҙамында тәртипһеҙлектәрҙе баҫтырыуға, илде күпселек ҡороткос элементтарҙан азат итеүгә өлгәшеп кенә ҡалмай, Рәсәйҙе модернизация юлына баҫтыра. Николай Икенсенән диктатор вәкәләттәре алып, Столыпин террористик ойошмаларҙы тарата, Дәүләт Думаһын власҡа буйһонорға мәжбүр итә, аграр реформа үткәрә, крәҫтиәндәрҙе Себерҙең, Волга аръяғының, Ҡаҙағстандың буш ятҡан ерҙәренә күсерә, полицияны, земство ойошмаларын үҙгәртеп ҡороу программаһын башлай, Рәсәйҙә ныҡлы дәүләт партияһы төҙөй һ.б. Уның уңыштары империяла ғына түгел, сит илдәрҙә лә шаңдау таба. Ил тотороҡлолоҡ һәм иҡтисади үҫеш осорона аяҡ баҫа.

Әммә реформаларҙың барлыҡ мөмкин булған уңышһыҙлыҡтары өсөн яуаплылыҡты шәхсән үҙ өҫтөнә алып, батша һарайы традицияларында тәжрибәһе булмаған Столыпин ваҡ ҡына кеүек тойолған бер нәмәне - улар уңышлы булғанда, барлыҡ уңышты батшаныҡы тип күрһәтеүҙе онота. Уның популярлығынан көнләшеүсе Николай Икенсе "Рус ерҙәренең хужаһы"нан башҡа империяла тағы ла кемдеңдер сағыуыраҡ һәм аҡыллыраҡ булыуын ғәфү итә алмай. Һөҙөмтәлә Столыпин йәмғиәттә ундан да, һулдан да, батша ғаиләһенә яҡын булыусылар араһында ла үҙен хөрмәт итеүселәрҙе генә түгел, асыҡтан-асыҡ дошмандар ҙа таба. Ә фаворит Григорий Распутинға ҡаршы сығышы Столыпинды Царское Селола "нон грант шәхесе" (кәрәкмәгән кеше) яһай. Премьер үлтерелгәндән һуң уның урынына тәғәйенләнгән Владимир Коковцовҡа Николай Икенсе асыҡтын-асыҡ: "Һеҙ мине, Столыпин кеүек, ышыҡламаҫһығыҙ", - тип кәңәш итә.

Француз дипломаты Шарль Морис Талейран: "Карьера яһау өсөн һоро төҫтә кейенергә, күләгәлә ҡалырға һәм инициатива күрһәтмәҫкә кәрәк", - ти. Власть үренә сәйәхәт башлағанда һәм әлегә икенсе-өсөнсө ролдәрҙә булғанда, аҡылығыҙға таянып, "күләгәлә" ҡалығыҙ. Унан "яу яланы" яҡшыраҡ күренә, шул уҡ ваҡытта киләсәккә уйниәттәрегеҙ ҙә башҡаларға билдәле булмаҫ. Эзоп кәңәш итеүенсә, "йә батшаларға бөтөнләй яҡынламаҫҡа, йә уларҙың күңеленә хуш килгән нәмәләрҙе генә һөйләргә кәрәк". Һеҙҙең аҡыллы ҡарарҙарығыҙ һәм фекерҙәрегеҙ етәксегеҙҙең "шәхсән" ҡарары булһын тиһәгеҙ, ул һеҙҙең кәңәштәрегеҙҙән башҡа бер нәмә лә эшләй алмауын аңларға тейеш.

**Сергей СУВОРОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Унынсы көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Китап һүҙенең көсө: китап уҡыусылар - лидерҙар!**

Камиллашыу өсөн һеҙ эшләй алғандың иң мөһиме - ул көн һайын илһам һәм дәрт өҫтәүсе, файҙалы китап уҡыу. Уҡыу аңды яңы кимәлгә күтәрә, юҡҡа ғына, белем - көс, тимәгәндәр. Китап уҡыу тормошоғоҙҙоң барлыҡ аспекттарын яҡшыртыу өсөн сағыу идеялар бирер. Ул һеҙҙе ыңғай йүнәлештә фекерләргә һәм сикләүҙәрҙе ҡабул итмәҫкә мәжбүр итер.

Бөтөн мөмкин булған хаталар был донъяла күптән инде эшләнгән, уларҙы нисек төҙәтеү күптән инде бихисап китапта яҙылған. Уларҙы үҙеңә ҡабатлауҙан фәтүә бармы? Бөтөн фокус шунда: тормошоңдо еңеләйтергә кәрәк һәм быны китаптар ярҙамында тормошҡа ашырырға мөмкин. Тормошта уңыш ҡаҙаныу буйынса үҙегеҙҙең шәхси китапханағыҙҙы туплай башлағыҙ һәм уның нигеҙенә түбәндәге ун китапты һалығыҙ: Наполеон Хилдың "Думай и богатей", "Автобиография Бенджамина Франклина", Джозеф Мэрфиҙың "Управляйте своей судьбой", Норман Винсент Пилдың "Сила позитивного мышления", Герман Гессеның "Сиддхартха", Махатма Гандиҙың "История моих экспериментов с правдой", Джеймс Аллендың "Человек мыслящий", Дэвид Майерстың "Дорога к счастью", Дейл Карнегиҙың "Как завоевывать друзей и оказывать влияние на людей", Клод Бристолдың "Волшебство веры".

**Икенсе бүлек: тән. Үҙегеҙҙе йәшегеҙгә тап килергә кәрәк, тип уйлауҙан туҡтағыҙ: һындың дөрөҫлөгө мөһимлеге**

Әгәр үҙегеҙҙе ҡарт йәки ҡарсыҡ кеүек тотаһығыҙ икән, барыһы ла һеҙҙе шундай тип уйлаясаҡ. Ниңә, һәр йәш үҙенең аныҡ тәртибенә һәм эшмәкәрлек образына тап килергә тейеш, тигән ҡалыпҡа буйһонорға? Ни өсөн үҙеңдең йәшеңә саҡырыу ташламаҫҡа? Тәү сиратта, үҙеңде физик йәһәттән йәш тип хис итергә кәрәк. Һыныңыҙҙы тәртипкә килтерегеҙ, арҡағыҙҙы турайтығыҙ. Был һеҙгә шунда уҡ дөрөҫ тын алыу мөмкинлеген бирер.

Шулай уҡ махсус тырышлыҡ һалығыҙ һәм ҡарт кеше кеүек йөрөүегеҙҙе туҡтатығыҙ. Йәш тормош рәүеше мәғәнәһе - тәнеңә ҡартлыҡты индермәү. Ә бының өсөн йәштәрсә уйлау һәм йәшәү кәрәк.

**Өсөнсө бүлек: характер. Донъяға ҡарашты киңәйтеү**

Шәхесте үҫтереүҙең иң файҙалы шөғөлдәренең береһе - күберәк сәйәхәт итеү. Сәйәхәт донъяны белеү, иң мөһиме - үҙегеҙҙең ни тиклем бәхетле икәнлегегеҙҙе таныу мөмкинлеген бирә. Көндәлек ығы-зығы артынан ҡыуып, беҙ ваҡ-төйәккә күберәк иғтибар бирәбеҙ. Гәзитте бөгөн ғәҙәттәгегә ҡарағанда һуңыраҡ килтерҙеләр икән ти йәки шефығыҙҙың кәйефе насар икән ти, унда һеҙҙең ни эшегеҙ бар Иртән ашарығыҙға бармы? Илегеҙ һуғыш алдында торамы? Әгәр сәйәхәт итергә мөмкинлегегеҙ юҡ икән, гәзиттәр уҡып, башҡа илдәрҙә кешеләрҙең нисек йәшәүе тураһында күберәк белеп, тормошто сағыштыра, уның киләсәген күҙаллай, үҙегеҙҙә булған нәмәләр өсөн ҡыуана алаһығыҙ. Ваҡ-төйәк йәки кире ҡайтарып булмай торған нәмәләр өсөн көйәләнергә бер генә минутығыҙҙы ла әрәм итмәгеҙ. Тормош ваҡлыҡтарынан юғарыраҡ булығыҙ - тап шул көндән үҙегеҙ ысынлап лайыҡлы булған бейеклектәргә күтәрелеүҙе башлай алаһығыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 16 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!".
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мать-и-мачеха". Сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Перевозчик". Сериал (12+).
01.10, 03.05 "В тылу врага". Боевик (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны института благородных девиц", 173-я серия. Сериал.
16.00, 17.30 "Земский доктор". (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Женщины на грани", 1-3-я серии. Детективный сериал (12+).
23.55 "Хулио Иглесиас. Жизнь продолжается". Док. фильм.
00.50 "Девчата" (16+).
01.35 "Люди и манекены". Комедийный сериал.
03.10 "Темнокожие американские принцессы". Комедия (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Таңсулпан Бураҡаева (6+)
10.15 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.30 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.15 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
16.00 "Ваҡыт арбаһы". Фильм-концерт (6+)
18.00 "Алтын мираҫ". Абдулла Солтанов. Концерт (6+)
21.00 "3:0". Рәил Өмөтбаев (6+)

### БСТ

**07.00, 09.00 "Сәләм!" (12+).**
**08.00 "Акция "Сәләм, республика!"**
**10.00 Новости (на башк. яз) (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**11.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Новости недели" (16+).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск.яз.).**
**12.45 "Хазина".**
**13.15, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.45, 05.15 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Солнечные дети" (6+).**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Орнамент".**
**18.00, 06.00 "Автограф" (6+).**
**18.45 Чемпионат Росси по хоккею - Чемпионат КХЛ.**
**22.00 "Следопыт".**
**23.00 "Юлдаш йыры-2013" (6+).**
**23.15 Художественный фильм (16+).**
**01.00 "Единое время" (16+).**
**03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**03.30 Ф.Буляков "Любишь, не любишь" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 17 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!".
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мать-и-мачеха". Сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Перевозчик". Сериал (16+).
01.10 "Секретные материалы: хочу верить". Мистический триллер (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Форс-мажоры".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц", 174-я серия. Сериал.
16.00, 17.30 "Земский доктор". (12+).
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.40 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Женщины на грани". (12+).
23.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.55 "Генерал Скобелев". Док. фильм (12+).
02.00 "Люди и манекены". Сериал.
03.35 "Двушка-сплетница-5". Сериал (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Дарман" (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.30 "Йәштәр тауышы" . Йырҙар (6+)
09.15 "Автограф". Ирек Кинйәбулатов (6+)
09.45 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (0+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүе (0+)
12.45 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Һылыуҡай - 2013" гүзәллек бәйгеһе (+6)
21.00 Рәшиҙә Туйсинаның юбилей концерты (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**08.00 "Акция "Сәләм, республика!"**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**11.45 "Зеркальце".**
**11.00, 17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.25 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.45 "Хазина".**
**13.15, 18.45, 01.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Отдел культуры" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (на башк.яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Власть отвечает" (16+).**
**20.30 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Юлдаш йыры-2013" (6+).**
**23.15 Художественный фильм (16+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 "Вой волчицы" (12+).**
**06.00 "Автограф".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 18 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!".
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 Другие новости.
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия", 1-2-я серии. (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Перевозчик". Сериал (16+).
01.10, 03.05 "Неуязвимый". Триллер (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Форс-мажоры". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть" .
15.00 "Тайны института благородных девиц", 175-я серия. Сериал.
16.00, 17.30 "Земский доктор". (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Женщины на грани". (12+).
22.55 "Калашников". Док. фильм (12+).
24.00 "Русский чернозем".
01.00 "Горячая десятка" (12+).
02.05 "Люди и манекены". Сериал.
03.30 "Девушка-сплетница-5". (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
09.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
10.05 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
12.20 "Байыҡ" (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
18.00 "Күңелле троллейбус". Музыкаль фильм (6+)
21.00 "Кис ултырып". Азалия һәм Урал Рәшитов (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**08.00 Акция "Сәләм, республика!"**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 "Новости" (на русск. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.45 "Хазина".**
**13.15 "Весело живем" (12+).**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Байыҡ" представляет..."**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Власть отвечает" (16+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.45 "Алтын тирмә. Семейная телевикторина".**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ.**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 "Юлдаш йыры-2013" (6+).**
**23.15 Художественный фильм (16+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 М.Гафури "Красная звезда".**
**04.45 Р.Эрдуран "Подарок" (12+).**
**06.00 "Автограф".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 19 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 Другие новости.
14.25 "Домработница" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж". (16+).
16.10 "Ясмин". 12-я серия. (16+).
17.00 "В наше время".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". 3-я и 4-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Перевозчик". 8-я серия (16+).
01.10 "Милашка". Романтическая комедия (18+).
02.40, 03.05 "Смертельная охота" (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "От всей души".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Вопросы воспитания" (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц", 176-я серия.
16.00 "Склифософский-2". 11-я и 12-я серии. (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Склифосовский-2". Продолжение (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Женщины на грани". 9-я и 10-я серии (12+) .
22.50 "Поединок" (12+).
00.25 "Иду на таран". Док. фильм.
01.25 "Люди и манекены".
03.05 "Девушка-сплетница-5" (16+).
04.00 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йырлап асыла күңел " (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Замандаштар". Риф Бикбаев (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.10 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.30 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.45 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Һандуғастар төйәге". Концерт (6+)
17.00 "Минен йондоҙом". Фильм (6+)
21.00 "Юлдаш йыры - 2012". Гала-концерт (+6)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**08.00 "Акция "Сәләм, республика!"**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русс. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель" (12+).**
**12.45 "Хазина".**
**13.15, 18.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Башҡорт йыры" представляет..."**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Ғәләмәт донъя".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**18.00 "Шәжәрә".**
**19.00 "Телецентр" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (16+).**
**23.00 "Юлдаш йыры-2013" (6+).**
**23.15 "Местная история".**
**23.30 ФК "Уфа".**
**24.00, 06.00 "Автограф".**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 Н.В.Гоголь "Женитьба" (12+).**

## 20 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Новости.
05.05 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 Другие новости.
14.25 "Домработница" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж". (16+).
16.10 "За и против" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости.
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Муз. шоу (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Под куполом". 11-я серия. Фантастический сериал (16+).
01.20 "Древо жизни". Драма (16+).
03.55 "Драконий жемчуг: эволюция" (12+).
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
8.55 "Мусульмане".
09.05 "Ауаз".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Вопросы воспитания". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.15 Дневник Сочи-2014.
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Тайны института благородных девиц". 177-я серия.
16.00 "Склифосовский-2". 13-я и 14-я серии (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести ПФО".
17.30 "Склифосовский-2". Продолжение (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Хит". Музыкальное шоу.
20.20 "Предсказание". Мелодрама
00.05 "Чертово колесо" (12+).
01.50 "Честный детектив" (16+).
02.25 "Почему бы я солгал?" (12+).
04.35 "Комната смеха" (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.50 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
18.00 "Сөмбөлдөң етенсе йәйе". Фильм
15.00 "Йома". (0+)
21.00 "Наҙға төрөнөп". Хәлимә Ғәббәсова концерты (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**08.00 "Акция "Сәләм, республика!"**
**10.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00, 17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.45 "Хазина".**
**13.15, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Тамыр йондоззары".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "ФК "Уфа" Даешь премьер-лигу!"**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ.**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "Юлдаш-йыры-2013" (6+).**
**23.15 "Отдел культуры" (12+).**
**23.45 "Дарман".**
**01.00 "Утраченные боги" (16+).**
**03.15 М.Карим Похищение девушки" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 21 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Паспорт" (16+).
08.20 "Дисней-клуб".
08.50 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Шипы белых роз" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Лысый нянька: спецзадание". Комедия (12+).
14.55 "Свадебный переполох".
15.50 "Голос. За кадром" (12+).
16.50 "Куб" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию".
18.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.45 "Минута славы. Дорога на Олимп!" (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Успеть до полуночи". Юмористическая викторина (16+).
23.50 "Любовь с препятствиями". Романтическая комедия (16+).
01.50 "Наверное, боги сошли с ума". Комедия (16+).
03.55 "Один дома-3" (12+).

### РОССИЯ 1

05.05 "Очень верная жена" (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан" (16+).
08.20 "Планета собак".
09.20 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив" (16+).
12.25 "Военная программа" Александра Сладкова.
12.55 "Танковый биатлон". Военно-спортивное шоу.
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
16.50 "Субботний вечер".
16.15 "Танцы со звездами".
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Чужая женщина". Мелодрама (12+).
00.35 "Спасибо за любовь". Мелодрама (12+).
02.50 "Чья это жизнь в конце концов?" (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.20 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.40 "Автограф". Рафаэль Аҙнағолов
08.55 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.25 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.20 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.40 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Китмәгеҙ торналар". Спектакль. Сибай театры (6+)
21.00 "Был тылсымлы донъя ". Г. Бикбулатова концерты (6+)

### БСТ

**07.00, 19.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 "Фильм детям".**
**09.00 "Көндәлек" (6+).**
**09.30 Мультфильм (на башк. яз.).**
**10.00 "Сәләм+" (12+).**
**10.15 "Замандаштар" (6+).**
**10.30 "Огонь и свет оставил он...". Мустай Карим.**
**11.30 "Аль-Фатиха".**
**12.00 "Следопыт".**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**12.45 "Оперение-2013" (12+).**
**13.30 "Открытый всем ветрам". Якуб Кулмый, 2-я часть.**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 И.Абдуллин. "Лунные вечера Айсылу". Спектакль (12+).**
**18.00, 05.45 "Хазина. Книга жизни Сергея Рыбакова".**
**19.00 "Башкорттар".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Еду я деревню".**
**20.45 "Живое село" (12+).**
**21.15 "Деловой Башкортостан".**
**22.00 "Наши годы" (12+).**
**22.30 "Юлдаш йыры" (6+).**
**22.45 "Радио "Юлдаш" представляет... (12+).**
**01.00 Художественный фильм (16+).**
**03.30 И.Юмагулов "Нэркэс" (12+).**
**06.45 "Весело живем" (12+).**

## 22 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Как приручить дракона".
06.00 Новости.
07.45 "Армейский магазин" (16+).
08.20 "Дисней-клуб".
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Крепкий орешек: возмездие". Боевик (16+).
14.40 "Ералаш".
15.05 "Есть только миг..."
17.00 "Ванга". Док. фильм (12+).
18.00 "Ледниковый период".
21.00 "Воскресное "Время" с Ирадой Зейналовой.
22.00 "Достояние республики". Музыкальное шоу.
00.10 "Прошлой ночью в Нью-Йорке". Мелодрама (16+).
01.55 "Свидетель". Триллер (16+).
03.50 "Замороженная планета" (12+).

### РОССИЯ 1

05.25 "Семь дней после убийства". Детектив.
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Городок. Дайджест".
11.45 "Мой папа - мастер".
12.15 "Отцовский инстинкт". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Отцовский инстинкт". Продолжение (12+).
16.25 "Смеяться разрешается".
18.20 "Наш выход!". Муз. шоу.
20.00 "Вести недели".
21.30 "Родная кровиночка". Мелодрама (12+).
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.20 "Уловка-44". Боевик (16+).
03.10 "Планета собак".
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Еңмеш". Фильм (0+)
08.50 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Эльмира Саматова(6+)
10.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.45 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (0+)
11.30 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Рәшиҙә Туйсинаның юбилей концерты (6+)
21.00 "3:0". Рәил Өмөтбаев (6+)

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Еду я в деревню".**
**09.30 "Живое село" (12+).**
**10.00 "Бауырһаҡ".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Шәп арба".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Байтус" (16+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар".**
**14.00 "Дарю песню".**
**14.55 Футбол. Первенство ФНЛ.**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ.**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Любимое дело".**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Итоги спорта".**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+).**
**21.15 "Бизнес-обзор".**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.).**
**22.00 "Наши годы" (12+).**
**22.30 "Юлдаш йыры" (6+).**
**22.45 "Вечер.com" (12+).**
**23.30 "Театральная ночь" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом".**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+).**
**02.15 Художественный фильм (16+).**
**03.45 И.Абдуллин "Лунные вечера Айсылу" (12+).**
**05.45 "Мелодии души" (12+).**

*ИҒЛАН*

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамлаусылар иғтибарына!**

Сығарылыш уҡыусылары тураһында мәғлүмәт базаһын туплау һәм тулыландырыу маҡсатында **www.brgil.org** сайтындағы анкетаны тултырып, фотография менән бергә анкетала күрһәтелгән электрон адресҡа ебәреүегеҙҙе һорайбыҙ. Һеҙҙең һәр берегеҙ гимназиябыҙ тарихының айырылғыһыҙ бер өлөшө, шуға күрә был эштә әүҙем ҡатнашыуығыҙҙы теләйбеҙ.

Мәғлүмәтте 1 ноябргә тиклем ебәрергә.

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты етәкселеге.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# УЧАЛЫ РАЙОНЫ



**Горизонталь буйынса:** 1. Беҙҙең легенда. 6. Итальян билмәне. 11. Мачтала эленеп торған "экран". 12. Хәйләкәр, мут кеше. 13. Стена буяусы эшсе. 14. Ҡаҙылған оҙон тар соҡор. 15. Нәҫелдән-нәҫелгә күсә торған ер. 26. Цинктың башҡортса атамаһы. 28. Өҫтәлдәге "күҙә һуғыу" уйыны. 29. Пушка. 31. Кәмһетелеүҙән тыуған әсенеү тойғоһо. 33. Бесән сапҡандағы бер "аҙым". 34. Бураҙнаны боҙмаған ҡарт ат. 35. Аяҡ енсегенең йыуан ере. 36. Ығы-зығы килгән буталыш. 37. Ҡунаҡ мәжлесе. 39. Эш-хәлдәге эҙмә-эҙлекле тәртип. 42. Ермак йәки Дутов. 45. Алдатҡыс ҡармаҡ. 59. "Париж-Дакар" ярышы. 56. Төркөм исеменән эш алып барған кеше. 57. Һөңгө. 58. Һиндтарҙың изге сәскәһе. 59. Орден йәки миҙал. 61. Төньяҡ Американан күсеп килгән ер-һыу йәнлеге.

**Вертикаль буйынса:** 2. Сифатын үҙгәртеп, төрлө ҡиәфәткә ингән мифик зат. 4. Геологтар эҙләгән таш. 5. Рәсәй кинорежиссеры, актер, билдәле каскадер. 7. Ваҡ ҡына йылтыр орлоҡло, тарбаҡ һабаҡлы сүп үләне. 9. Ҡыуығы булмаған диңгеҙ балығы. 10. Телеграмма ҡағыҙы. 16. Төнәктәге төшкә кергән ярма. 17. Килен артынан килгән мал. 19. Бер урындан башҡа-башҡа киткән тармаҡ. 20. Ай календарының етенсе айы. 22. Йыуантаҡтар көрәше. 23. Сифатлы туҡыма биргән ҡытай кесерткәне. 27. Гимнаст. 28. Башҡорт "гитараһы". 30. Башҡортостандың азиат ҡалаһы. 32. Әрәмә баҫҡан түмгәкле һаҙлыҡ урын. 33. Ҡарауыл. 37. Оҙонса һуҙылған тар буй. 38. Ер аҫтында "көйшәүсе" йән эйәһе. 40. Ҡапыл таралып, малды, кешене күпләп ҡырған йоғошло ауырыу. 41. Эш өсөн түләнгән хаҡ. 43. Саперҙың "һөҙгөсө". 44. Боҙҙа уйылған тишек. 46. Әсе һеркәгә төрлө тәмләткес ҡушып яһалған шыйыҡса. 48. Бер бит ҡағыҙҙан ҡайсыһыҙ яһалған торна. 49. Ағалы-ҡустылы булған совет академиктары. 51. Одессала был емешкә һәйкәл ҡуйылған 52. Исемен үгеҙ елкәһенә оҡшағаны өсөн алған йыртҡыс балыҡ. 53. Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең арттан һөйрәлдереп теккән "ҡойроғо". 54. Йәбештергес таҫма.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**36-сы һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Йосопов. Ишемғолов. 6. Материк. 11. Талап. 12. Ихата. 13. Распе. 14. Атолл. 15. Әхмәтов. ,18. Штакетник. 21. Аҡманов. 26. Ләстит. 28. Саңдау. 29. Нур. 31. Рейтуз. 33. Ампула. 34. Апарт. 35. Ҡиәфәт. 36. Арбағи. 37. Ҡан. 39. Етегән. 42. Итбаев. 45.Ғүмәров. 47. Илембәтов. 50. Биатлон. 55. Денев. 56.Театр. 57. Түтәл. 58. Нюанс. 59. Арғымаҡ. 60. Исмәғилев. 61. Квартал.

**Вертикаль буйынса:** 1. Йөкләмә. 2. Онтарио. 4. Шипкерт. 5. Оригами. 7. Ағаслыҡ. 8. Кәримов. 9. Аласа. 10. Майор. 16. Трос. 17. Мари. 19. Килен. 20. Тауар. 22. Маҙа. 23. Норд. 24. Юлдашбаев. 25. Бураҡаева. 27. Тараҡан. 28. Суахили. 30. Ураҙа. 32. Зат. 33. Ата. 37. Ҡырым. 38. Ниргә. 40. Есем. 41. Әсир. 43. Тоба. 44. Асыл. 45. Ғәлиева. 46. Онтадра. 48. Ловелас. 49. Остенде. 51. Иҙрисов. 52. Номинал. 53. Анита. 54. Балан.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1434 һижри йыл.***

| Сентябрь (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (10) дүшәмбе | 6:22 | 7:52 | 14:30 | 18:58 | 20:28 | 21:58 |
| 17 (11) шишәмбе | 6:24 | 7:54 | 14:30 | 18:57 | 20:26 | 21:57 |
| 18 (12) шаршамбы | 6:26 | 7:56 | 14:30 | 18:53 | 20:23 | 21:53 |
| 19 (13) кесе йома | 6:27 | 7:57 | 14:30 | 18:51 | 20:21 | 21:51 |
| 20 (14) йома | 6:29 | 7:59 | 14:30 | 18:48 | 20:18 | 21:48 |
| 21 (15) шәмбе | 6:31 | 8:01 | 14:30 | 18:45 | 20:15 | 21:45 |
| 22 (16) йәкшәмбе | 6:33 | 8:03 | 14:30 | 18:43 | 20:13 | 21:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



# БАШҠОРТ ҠАТЫН-ҠЫҘЫ...

## яңы башҡорт фильмында

**Башҡортостан Президентының мәҙәниәтте үҫтереүгә тәғәйенләнгән гранты башҡорт кинематографистарына тағы бер фильм төшөрөү мөмкинлеге бирәсәк. Был турала "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында үткән журналистар менән осрашыуҙа режиссер-ҡуйыусы Айсыуаҡ Йомағолов менән продюсер, оператор-ҡуйыусы Рияз Исхаҡов белдерҙе. "Башҡорт йырҙарында легендалар" тип аталған музыкаль фильм боронғо башҡорт халыҡ йырҙары легендаларына нигеҙләнгән.**

Йырҙар - башҡорт халҡының тарихи үткәнен, тормош-көнкүрешен, милли характерын үҙендә сағылдырыу һәм дөйөмләштереү йәһәтенән фольклорҙың башҡа жанрҙары менән сағыштырмаҫлыҡ дәрәжәлә юғары тора. Һәр башҡорт йырының тарихы йәки легендаһы булыуы - уның шулай уҡ мөһим бер үҙенсәлеге. Фильм төшөрөүселәрҙе был тема тап ошоноһо менән йәлеп иткән дә инде. "Башҡорт йырҙарында легендалар" фильмы туғыҙ халыҡ йырынан торасаҡ. Әлегә фильм төшөрөүселәр йырҙарҙың атамаларын һәм уларҙы башҡарыусыларҙы сер итеп һаҡлай, шулай ҙа фильмда үҙәк урынды ете ҡыҙ алып торасағы билдәле. Әбйәлил районының Ҡарабалыҡлы күлендә фильмдың бер өлөшө - Ф. Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт академия ансамбле башҡарыуында күл өҫтөндә "Ете ҡыҙ" бейеүе төшөрөлгән дә инде. Уның ҡалған өлөштәрен төшөрөү өсөн дә Әбйәлил ере һайланған. Һәр фильм һайын төп герой ҙа, ваҡиғалар ҙа үҙгәреп торасаҡ, әммә уларҙы яйлап бер сюжет линияһы - еңел булмаған ҡатын-ҡыҙ яҙмыштары берләштерәсәк.

Фильмдың премьераһы баш ҡаланың "Родина" кинотеатрында декабрь аҙаҡтарында буласаҡ, тип фаразлайҙар. Яңы йылдың тәүге ике аҙнаһында иһә уны республиканың башҡа кинотеатрҙары ла күрһәтер, моғайын. Һуңынан инде кино һөйөүселәр яңы фильм менән телевизор экрандары аша таныша аласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бик борон заманда, башҡорттар ҡояшҡа, айға, һыуға, ергә, елгә, утҡа, тауҙарға, урмандарға һәм Күк Аллаһы - Тәңрегә табынған мәлдә ете ҡыҙ йәшәгән. Улар сибәр генә түгел, таҫыл һәм ҡыйыу ҙа булған. Был ҡыҙҙарҙың һәр береһе яратҡан йәрҙәренә кейәүгә сығып, балалар үҫтереп, ҡартайғансы ғүмер кисерергә хыялланған... Яңы фильм боронғо башҡорттарҙың донъяға ҡарашын, йолаларын сағылдырыу йәһәтенән генә түгел, сюжет үҙенсәлеге менән дә ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Ни генә тиһәң дә, йырҙарыбыҙҙың тарихында ла ысын кеше яҙмыштары, тойғо-кисерештәре ята. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы ярата ла белә, әммә бәхетһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһындағы йырҙарҙың нигеҙендә, асылда, Тыуған илде һәм Тыуған ерҙе һағыныу һағышы ятҡанын да онотмайыҡ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

*Дәүләт тарафынан матди ярҙам бүленеүе ошолай дауам итһә, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрер ине. Әгәр был турала кемдер уйланһа һәм тейешле сараһын күрһә, музыкаль һәләттәре булған балалар ҙа үҙебеҙҙә уҡыр, ситкә китмәҫ ине.*

АФАРИН!



# БАШҠОРТОСТАНДА ТЫУҒАНДАР...

## шуға талантлылар

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Конгресс-холл бинаһы янындағы майҙанда, асыҡ һауала, "Башҡортостанда тыуғандар" тип исемләнгән үҙенсәлекле концертты тамаша ҡылдыҡ. Теләгән һәр кем был көндө Башҡортостан Республикаһы Милли симфоник оркестры, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры хоры, Дәүләт академия хор капеллаһы һәм йәш музыканттар башҡарыуында башҡорт, рус, сит ил классик музыкаһын һәм башҡа көйҙәр тыңлап кинәнде. Кинәнестәр бының менән генә бөтмәне: бәғзе берәүҙәр хатта күгүләнгә ятып, музыка тыңланы, күп кенә йәш ғаиләләр балаларын саф һауала уйнатты. Бындай сара Башҡортостан тарихында тәүге тапҡыр үткәрелә икән. Сараның ойоштороусыһы - республика Милли симфоник оркестры баш дирижеры Рөстәм Сөләймәнов, сит илдәрҙә, Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында уҡып, эшләп йөрөүсе Башҡортостан егет-ҡыҙҙарын саҡырып, концертты 12 йәш оҫтаның яңғыҙ сығышы менән биҙәне. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, ҡайһы бер музыканттар, шулай уҡ тамашасылар менән дә аралашып, һөйләшеп алдыҡ.**

**Сыңғыҙ ХАННАНОВ, скрипкасы, әле Швейцарияның Цюрих ҡалаһында уҡый:** Уҡыуҙар 16 сентябрҙән генә башланғанға күрә, Рөстәм Сөләймәнов ойошторған был шәп концертта ла ҡатнаша алыуым, музыкаға битараф булмаған баш ҡалабыҙ халҡына моңло кис бүләк итә алыуым өсөн бик шатмын. Мин башлыса сит ил композиторҙары әҫәрҙәрен башҡарҙым. Улар тамашасы күңеленә хуш килгәндер, тип ышанам.

Сит илдә нимәһе оҡшай? Унда үҙеңдең ижади һәләттәреңде, мөмкинлектәреңде асыуы еңелерәк. Мәҙәниәт өлкәһенә лә иғтибар, матди ярҙам күберәк бүленә уларҙа. Беҙҙә, Башҡортостанда, хатта Рәсәйҙе алғанда ла, был юҫыҡта бер аҙ артта ҡалыу һиҙелә. Әлбиттә, бөгөнгө проекты ошо йүнәлештә үҫтереүгә табан бер аҙым, тип билдәләге килә. Дәүләт тарафынан матди ярҙам бүленеүе ошолай дауам итһә, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрер ине, моғайын. Әгәр был турала кемдер уйланһа һәм тейешле сараһын күрһә, музыкаль һәләттәре булған балалар ҙа үҙебеҙҙә уҡыр, ҡағиҙә булараҡ, ситкә китмәҫ ине.

Ситтә уҡыуы, йәшәүе нисек тип һораһағыҙ, башта шуны әйтергә кәрәк: туған телдә аралашыу, тыуған ер, туғандар, дуҫтар һағындыра. Һағыш баҫып киткән саҡтарҙа мин үҙебеҙҙең башҡорт көй-моңдарын уйнап, күңел һыҙлауын баҫам. Ярҙам итә. Инглиз теленә бында, Өфөлә уҡыған саҡта уҡ төшөнгәйнем, тегендә баргас, нығыраҡ өйрәнелде. Хәҙер шыма һөйләшәм, өҫтәүенә, башҡорт телендәге *һ, ө, ң, ҙ, ғ, ҫ* өндәренең инглиз телендә лә булыуы минең телмәремде был телгә нығыраҡ яҡынайта. Акцентымды русса һөйләшкән кешеләр акцентынан айырыла, тиҙәр. Швейцария халҡы, баҡтиһәң, Башҡортостан тураһында бик үк белмәй икән. Әлегә тиклем Урал тауҙары тураһында ишетеп белгән кешеләр генә осраштырғылай. Кем менән танышһам да, һәммәһенә үҙемдең ҡайҙан булыуымды, ниндәй милләт кешеһе икәнлегемде әйтә йөрөйөм. Цюрихта бер йыл уҡыһам, уҡыуым тамамланасаҡ. Алда ни булырын белеп булмай, шулай ҙа киләсәктә мотлаҡ Өфөгә ҡайтасаҡмын.

**Юлия ХОЧНЕВА, тамашасы, Өфө ҡалаһы:** Бөгөнгө тамашаға ғаиләбеҙ менән - ун йәшлек улыбыҙҙы ла, әсәйебеҙҙе лә алып килдек. Әсәйем Илһам Вәлиевтың башҡортса йырлауын ныҡ оҡшатты, тауышы бик көсөлө был егеттең, тип ҡарап торҙо. Минең үҙемә Сыңғыҙ Ханнановтың йөрәктәрҙе елкендереп, осоп-талпынып, скрипка уйнауы оҡшаны. Арҡамдан тулҡындар йүгергән кеүек тойолдо бер ваҡыт. Сығыш оҙаҡ ҡына дауам итһә лә, бер тында тыңланды, хатта тулҡынланыуымдан тын алыуы ла ауырлашҡан ваҡыттар булды. Роберт Юлдашевтың симфоник оркестр менән берлектә ҡурай уйнауын беренсе тапҡыр ишеттек, иҫ киткес сығыш булды. Ошондай тамашалар йышыраҡ үткәрелһен ине. Был концерт традицияға әйләнер, йылына бер тапҡыр булһа ла үткәрелер, моғайын, тип теләге килә. Үткәрелгән урыны ла күңелгә ятышлы бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Open air" (асыҡ һауалағы тамаша) ваҡытында музыка тыңларға бал костюмдары кейеп килеүсе ҡыҙҙарҙы һәм егеттәрҙе лә күрергә мөмкин ине. Быны иһә ҡала халҡының, айырыуса йәштәрҙең классик музыкаға, симфоник оркестрға ихтирамлы ҡарашы өлгөһө тип аңларға кәрәктер, моғайын. Тағы ла, ошо урында АҠШ ғалимдарының күҙәтеүе тураһында телгә алып үтке килә. Криминаль хәлдәр менән дан тотҡан бер паркта кистәрен ҙур тауыш динамиктарынан классик музыка яңғырата башлағандар. Һөҙөмтәлә, классик музыканың кешеләрҙең үҙ-үҙен тотошона ыңғай йоғонтоһо үҙен шунда уҡ һиҙҙергән - был паркта енәйәттәр ҡырҡа кәмегән... Һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ инде хәҙер.**

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ШӘЖӘРӘҺЕН...

## кем яҡшыраҡ белә?

**БР Мәғариф министрлығы, Республика Халыҡ ижады йорто, республиканың ҡала һәм район хакимиәттәре ойошторған Иң яҡшы шәжәрә төҙөү республика конкурсының еңеүселәре билдәләнде.**

Конкурста Әлшәй, Борай, Федоровка, Дүртөйлө, Бүздәк, Бөрйән, Йәрмәкәй, Салауат, Миәкә, Шишмә, Ишембай, Ғафури, Краснокама, Кушнаренко, Нуриман, Күгәрсен, Мәсетле, Ҡырмыҫҡалы, Илеш, Тәтешле, Әбйәлил, Белорет райондырынан, Өфө, Октябрьский, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан 45 эш ҡатнашты һәм түбәндәге бәйгеселәр еңеүсе тип табылды:

**"Шәжәрәне ентекле өйрәнгәне өсөн"** - Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев шәжәрәһе (авторы Ғәлимйән Ибраһимов, Ҡырмыҫҡалы районы), Ғәле Соҡорой шәжәрәһе (авторы Венер Ғилемшин, Тәтешле районы), Мәжит Ғафури шәжәрәһе (авторы Фәнил Кинйәғолов, Ғафури районы);

**"Иң тәрән тамырлы шәжәрә өсөн"** - Шәйәхмәт Сибаев шәжәрәһе (авторы Эльвира Һағынбаева-Утарбаева, Өфө ҡалаһы), шағир һәм мәғрифәтсе Хөснийәр шәжәрәһе (авторы Әнзирә Ғәниева, Асҡын районы);

**"Шәжәрә төҙөүҙә ғаилә реликвияларын ҡулланған өсөн"** - Зәйнетдиновтар шәжәрәһе (авторы Фәйрүзә Дуҫмөхәмәтова, Мәсетле районы); Имай Насыри шәжәрәһе (авторы Клара Туҡаева, Әлшәй районы).

**"Шәжәрә төҙөүҙә һәм өйрәнеүҙә ғилми асыш"** - Мөхтәр Сәғитов шәжәрәһе (авторы Зөһрә Нурдәүләтова, Бөрйән районы), Мөхәмәҙинур Шаһиәхмәтов шәжәрәһе (авторы Резида Әхтәмова, Ҡырмыҫҡалы районы); Иван Григорьевич Тарасов-Кириллов шәжәрәһе (авторы Петр Петров, Ҡырмыҫҡалы районы).

**Еңеүселәр 2013 йылдың 29 сентябрендә Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылында үтәсәк "Шәжәрә байрамы"нда бүләкләнәсәк.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУНАҠ КӨНӨ - ӨС,

## шунан артһа, хужаға көс

Эт менән ҡоҙа булһаң, һөйәк менән туй итерһең, яман менән өйҙәш булһаң, яу менән көн итерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.

**(М. Монтень).**

Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тоттормай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.

**(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер йәш кеше үҙен, мөхәббәттән уңманым, тип иҫәпләй. Тормош юлымда гел генә әллә ниндәй ҡыҙҙар осрай, ҡайһыһы бик йәмһеҙ, ҡайһыһы - аҡылһыҙ, ҡайһыһы - мыжыҡ, тип зарлана икән был. Идеаль ҡыҙҙы эҙләп арығас, егет бер аҡыл эйәһенә мөрәжәғәт иткән һәм уға үҙенең зарын түккән. Аҡыл эйәһе егетте иғтибар менән тыңлаған һәм шулай тигән: "Күрәм, оло бәләгә тарығанһың... Ләкин һин миңә башта шуны әйт: һин үҙеңдең әсәйеңә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттәһең?" Егет, аптырап: "Ә бында минең әсәйемдең ни ҡыҫылышы бар? - тип һораған. Шунан икеләнеп кенә һүҙен дауам иткән: - Әллә, белмәйем... Әсәйем йыш ҡына үҙенең ахмаҡ һорауҙары, бәйләнсеклеге, ялыуҙары һәм үтенестәре менән мине шартлар сиккә еткерә... Мин уны яратам тип әйтә лә алмайым шикелле..."**

**Аҡыл эйәһе баш сайҡап аптырап ултырғандан һуң, әңгәмәне дауам итә: "Хәҙер мин һиңә Мөхәббәттең иң төп серен асам. Мөхәббәт бар һәм ул һинең йөрәгеңә йәшеренгән. Һәм ул Мөхәббәт уңышы орлоғон һинең йөрәгеңә тормошоңдағы иң мөһим, иң ҡәҙерле кешең - әсәйең сәскән. Уға ниндәй мөнәсәбәт күрһәтәһең - донъялағы бар ҡатын-ҡыҙҙарға мөнәсәбәтең шундай буласаҡ. Сөнки әсәйең - ул һинең тәүге мөхәббәтең. Һине үҙ ҡосағына ҡыҫҡан, хәстәрләгән, ҡурсылаған тәүге ҡатын-ҡыҙ - ул әсәйең. Ҡарашың да, күңелең дә, аңың да ҡабул иткән тәүге ҡатын-ҡыҙ һыны - ул әсәйең. Әсәйеңде яратырға өйрәнәһең икән, башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла ҡәҙерләргә һәм яратырға өйрәнәсәкһең. Шул саҡта үҙеңә оҡшаған бер ҡыҙҙың һине йылы ҡарашы менән иркәләгәнен, һиңә ҡарап йылмайғанын күрерһең. Һин уның етешһеҙлектәрен дә шәйләмәҫһең. Атай-әсәйҙәребеҙгә мөнәсәбәтебеҙ - ул беҙҙең бәхет үлсәме икәнен бер ваҡытта ла онотма..." Ошо кәңәштән һуң егет аҡһаҡалға рәхмәт әйтә һәм боролоп китергә йыйына. Ләкин аҡыл эйәһе уны тағы туҡтата һәм тағы бер кәңәшен еткерә: "Тағы шул: тормош көтөү өсөн һинең атайыңды яратҡан һәм баһалаған ҡыҙҙы һайла!.."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 13 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 3443

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.